ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 октябрь (ҡарасай) 2015

№41 (667)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡарабойҙай яуы - күгәрсенгә көс** 3



**Поход старшинаһы Абдулла Сурағолов**
Унын дворянлыҡ титулы уландарына ла тапшырылған 7



**Үҙәк менән килешеү төҙөп,**
вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау үҙ сиратын көтә 8-10



**Көндөҙ ут яндырып...**
драматургтар эҙләйбеҙ 11



**ТВ-программа** 14

**ИҒТИБАР! АРЗАН ХАҠҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!**
**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 15 октябрҙән 25 октябргә тиклем матбуғат баҫмаларына яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо ун көнлөктә Башҡортостандың бөтөн почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө"гә 469 һум 02 тингә (махсус индекс В0665), юридик шәхестәр 499 һум 02 тингә (махсус индекс В0673) яҙыла ала.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 25 йыл элек Башҡортостан Республикаһында Дәүләт суверенитеты тураһында декларация иғлан ителде. Уның емештәрен барлайыҡ әле...

***Рәшит ШӘКУР, күренекле ғалим һәм шағир, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты:*** Беҙ бер ваҡытта ла үҙебеҙҙең аҫабалыҡты юғалтмаған халыҡ. XVI быуат уртаһында, үҙ иркебеҙ менән урыҫ дәүләтенә ҡушылған саҡта, үҙебеҙҙең хоҡуҡтарыбыҙҙы - аҫабалыҡты, үҙаллы йәшәү мөмкинлеген, динебеҙҙе, телебеҙҙе - ныҒытып ҡалдырғанбыҙ. Бик оҙаҡ ваҡыт ошо хоҡуҡтарыбыҙҙы юғалтмайынса, иҫ киткес ҙур территорияға хужа булып, Рәсәй империяһы составындағы көслө милләт булып йәшәгән халыҡбыҙ. Башҡорттарҙың ошо империя составындағы берҙән-бер аҫаба халыҡ булыуҙарын урыҫ ғалимдары һәм тарихсылары әле булһа һоҡланып телгә ала. Ерҙәребеҙҙе, хоҡуҡтарыбыҙҙы сикләргә тырышыуҙарҙы бер ҡасан да күҙ йомоп үткәреп ебәрмәгәнбеҙ, ә үҙебеҙҙе яҡлап, яуға күтәрелгәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар һәр ваҡыт Рәсәй дәүләте алдында булған тоғрологон, унын именлеге өсөн яуаплылығын иҫбат итеп торған, үҙ өҫтөнә алған бурыстарҙы тулы килеш, еренә еткереп үтәгән.

Тарих, ғәҙәттә, ҡабатланып тора. Һәм 1917-1919 йылдарҙа башҡорт халҡы алдында үҙенең милли территориаль автономия хоҡуғын яңынан тергеҙеү мәсьәләһе килеп баҫҡан. Был бурысты ла халҡыбыҙ лайыҡлы үтәне һәм Рәсәй тарихында феноменаль күренешкә - илдең федератив ҡоролошона нигеҙ һалды.

XX быуаттың 1990 йылдарында тарих тәгәрмәсе яңынан әйләнде. Халыҡ берҙәм рәүештә республикабыҙҙың сәйәси һәм юридик хоҡуғын яҡлау өсөн күтәрелде һәм ҙур уңышҡа өлгәште - Башҡортостан Республикаһынын Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителде. Унын иң ҙур емеше - Башҡортостан дәүләтселеген Рәсәй Федерацияһы составында юридик-хоҡуҡи планда өр-яңынан нығытып ҡуйыу. Шулай уҡ телебеҙгә дәүләт теле статусы алыуыбыҙ ҙа суверенитеттың иң эре һәм "тәмле" емештәренең береһе.

Декларацияла "Башҡорт халҡының айырып алғыһыҙ үҙбилдәләнеш хоҡуғын реаллаштереп", тигән бик мөһим һүҙҙәр бар. Нәҡ ошо хоҡуғыбыҙ арҡаһында яңы шарттарҙа республикабыҙ яңы кимәлгә күтәрелде. Декларация ҡабул ителгәндән һуң мөмкин булған бөтә өлкәләрҙә лә үҙебеҙҙең хоҡуҡтарыбыҙҙы реаллаштерҙек. Республикала иҡтисад, мәҙәниәт, рухиәт, социаль өлкәләр яңы шарттарҙа үҫеш юлына баҫты. Ошо йылдарҙан башлап республикала тормош бермә-бер яҡшырҙы - күпләп мәктәптәр асылды, дауаханалар төҙөлдө, ялтырап ятҡан юлдар барлыҡҡа килде. Ғөмүмән, ныҡ күтәрелеп ҡалдыҡ һәм әле булһын суверенитеттың ыңғай һөҙөмтәләрен күреп йәшәйбеҙ. Артабан да ошо юҫыҡта халыҡ күңелен күтәрерлек кенә эштәр башҡарылһын ине, тигән теләктә ҡалам.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ТЕМӘС – АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР ТӨЙӘГЕ...

## БР Башлығы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһендә шулай тип белдерҙе

**Тормошобоҙҙо халыҡ ижадынан тыш күҙ алдына ла килтереп булмай: кәсепселек, яҙма ижад йәиһә мәҙәни юҫыҡта булһынмы - борондан ата-бабаларыбыҙҙан килгән йолаларҙы һаҡларға тырышабыҙ, уларға үҙебеҙсә яңылыҡ индерәбеҙ, биҙәктәр һалабыҙ. Һәр хәлдә, ул беҙҙең йәшәү рәүешебеҙгә әүерелгән.**



2 октябрҙә Сибай ҡала округында башланып, 3 октябрҙә Темәс ауылында дауам иткән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең республика кәңәшмәһе ошо темаға арналды һәм "Патриотик тәрбиә һәм милләт-ара килешеүҙе формалаштырыуҙың бер факторы булараҡ халыҡ ижадын һаҡлау һәм үҫтереү" тип аталды. Унда республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Дәүләт халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова, БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының муниципаль район хакимиәттәре һәм ҡала округтары башлыҡтары, мәҙәниәт бүлектәре начальниктары ҡатнашты.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯУАП БИРӘМ, ТИП...

## дәрәжәне төшөрмәйек

**Ишморат ИЛБӘКОВ, БР-ҙың халыҡ артисы, ҡурайсы:** Мәскәүҙә бер йәһүд ағайы: "Телеңде, ереңде юғалтһаң, юғалт. Үҙеңде юғалтма", - тигәйне. Сал быуаттар аша бөгөнгәсә килеп еткән телебеҙ ҙә, үҙ еребеҙ ҙә бар, шөкөр. Тик милләттәштәр араһында үҙен юғалтыусылар күбәйҙе. Үҙенең башҡорт милләтенән булыуын танымаған, тарихын белмәгән, халҡы менән ғорурланмаған кешеләр бихисап арабыҙҙа. Ә донъяның һәр төбәгендә йәшәгән, етәксе урындарҙа эшләгән йәһүд халҡы бер ваҡытта ла үҙенең милли үҙаңын юғалтмаған. Ошондай халыҡтарҙан өлгө алып, хәҙерге закондарҙы яҡшы өйрәнеп, тормошҡа яраҡлашып йәшәй белеү кәрәк халҡыбыҙға. Шул осраҡта милләттең дә киләсәге булыр, телебеҙ һәм рухи ҡиммәттәребеҙ ҙә тере ҡалыр. Бер бүренең ҡаны сыҡһа, ҡалғандары уны талап ташлай. Бүрегә оҡшап, хаталанған милләттәшебеҙҙе халыҡ дошманына әйләндереп ебәрмәйек, берҙәм һәм татыу булайыҡ. Ҡайҙа йөрөһәк тә, башҡорт булып ҡалайыҡ, асылыбыҙға хыянат итмәйек.

Башҡорт түҙемле, толерант, тиҙәр. Бөгөн беҙгә айырыуса түҙемле булырға кәрәк. Сөнки интернет селтәрендә ҡурай, ауыҙ-тел ижады, йыр-моңға ҡағылышлы төрлө талашыуҙар, ҡотҡолар йышайып китте. Бер ниндәй иҫбат итерлек тарихи факттар булмаһа ла, йә йырҙарыбыҙға, йә ҡурайыбыҙға яҫҡыналар, үҙҙәренеке тип күрһәтергә маташалар. Башҡорттоҡо ғына булған оҙон көйҙәрҙе йырлау һәм ҡурайҙа уйнау өсөн башҡорт булырға кәрәк икәнде танымаҫҡа тырышалар. Ошоға оҡшаш яҫҡыныуҙар элек тә булған. Был осраҡта мин халҡыбыҙҙың билдәле мәҡәленә таянып фекер йөрөтөргә кәңәш итәм: "Эт өрә, бүре йөрөй". Кешеләрҙең милләтен кәмһетеп, булмаған урында ыҙғыш сығарырға тырышыусы, был эште махсус рәүештә атҡарып ултырыусы әҙәмдәр күп түгел бит инде ул. Улар кимәленә төшөп, уларға яуап бирәбеҙ, тип, үҙ дәрәжәбеҙҙе бәҫһеҙләндермәйек, тип әйтмәксемен.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# 25 йыл элек Башҡортостан Республикаһында Дәүләт суверенитеты тураһында декларация иғлан ителде. Уның емештәрен барлайыҡ әле...

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Суверенитеттан нимә өмөт иткәйнек беҙ? Суверенитет яҡлағандан һуң Башҡортостан ниндәй булырға тейеш ине? Ошо күҙаллауҙарыбыҙҙы беҙ "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге исеменән Борис Ельцинға һәм БАССР етәкселегенә ебәргән мөрәжәғәттә сағылдырҙыҡ. Ул сәйәси, иҡтисади, сәнәғәт һәм мәҙәни өлкәләргә бүленгән бүлектәрҙе үҙ эсенә алды. Республикабыҙҙың абруйлы ғалимдары тарафынан яҙылған һәм мөрәжәғәттә сағылған бик күп проекттар тормошҡа ашты. Айырыуса сәнәғәт һәм иҡтисади өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшелде, сөнки ошо бүлектәрҙе яҙған ғалимдарыбыҙҙың күбеһе дәүләт эшмәкәрҙәре булып китте. Ә сәйәсәт һәм мәҙәниәт тирәһендә иһә үҙгәрештәр әллә ни күҙгә күренерлек булманы, сөнки был өлкәлә эшләүсе ғалимдарыбыҙ республика Хөкүмәте эргәһенә йәлеп ителмәне. Мәҫәлән, мөрәжәғәттәге Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе ҡурсалайыҡ, ул төбәктәрҙә мәктәптәр асайыҡ һәм туған телебеҙҙе уҡытайыҡ, тигән саҡырыуҙар тормошҡа ашманы, беҙҙең фекерҙәр юғарыға барып етмәне.

Шулай ҙа республика өсөн суверенитеттың емештәре тос ҡына булды. Мәҫәлән, Декларация ҡабул ителгәнгә тиклем республикала хатта башҡортса календарь ҙа сыҡмай ине. Шулай уҡ башҡорт телендә бихисап гәзит-журналдар нәшер ителә башлауы, республика ҡалаларында юғары уҡыу йорттары үҙ ишектәрен асыуы, мәктәптәрҙә туған тел уҡытыу яңыртылыуы, асфальт юлдар һалыныуы, Урал аръяғы райондарында әүҙем рәүештә газ үткәрелеүе - быларҙың барыһы ла нәҡ суверенитет арҡаһында яуланған уңыштар. Тағы ла белем усаҡтары программаларына Башҡортостан мәҙәниәте, тарихы, географияһы, "Тормош һабаҡтары" дәрестәренең индерелеүе лә ҙур уңыштарыбыҙҙың береһе, тип һанайым. Ләкин бөгөнгө көндә был дәрестәрҙең мәктәп программаһынан юғала барыуы һәм башҡорт телен тик дәүләт теле булараҡ ҡына уҡытыуға күсә барыуҙар күңелде ҡыра. Ни өсөн ошо көнгә килеп еттек һуң? Сөнки беҙ кешенең, халҡыбыҙҙың аң революцияһына үҙгәреш индерә алмағанбыҙ. Суверенитет яулау йылдарында сағылған рухлылыҡты, тотош халыҡ рухы, тип уйлауыбыҙ хата булған. Уның бер көнлөк кенә рух булыуын бөгөнгө көн ваҡиғалары асыҡ дәлилләй. Айырыуса шул йылдарҙа "Башҡорт теле" тип лозунгылар күтәреп, мәктәптә туған телде уҡытыуҙы даулап йөрөүсе ҡайһы бер зыялыларыбыҙҙың ейәндәре бөгөнгө көндә үҙ телен белмәй. Ә бит туған телеңде белмәү - ул халҡыңды, уның булмышын, тарихын белмәү, күңел торошон аңламау.




Суверенитет биргән емештәребеҙҙең бөгөнгө көндә юғала барыуы сәбәбе - беҙҙең аңлы, зыялы егет-ҡыҙҙарыбыҙҙың әҙ булыуы. Ләкин халҡын яратҡан, уның ихтыяжын белгән һәм ошо юҫыҡта әүҙем эшмәкәрлек алып барғандар ҙа юҡ түгел. Нәҡ улар республиканы күтәрә, килеп тыуған ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыға. Суверенитет - ул беҙҙең рухи азатлығыбыҙ булды. Ошо ваҡыттарҙағы кеүек, артабан да ҡанаттарҙы киң йәйеп, иркенләп осорға мөмкинлектәр булһын өсөн суверенитет емештәрен һаҡларлыҡ һәм яҡларлыҡ абруйлы егет-ҡыҙҙарыбыҙҙың күберәк булыуы шарт.

***Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:*** 90-сы йылдарҙа бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшкә баҫҡан башҡорт интеллигенцияһы, республика йәмәғәтселеге тарафынан яуланған суверенлыҡ осоронда Башҡортостанда байтаҡ ҡына ыңғай үҙгәрештәр булды. Суверенитеттың төп ҡаҙанышы, минеңсә, башҡорт халҡының ғына түгел, ә республикала көн күргән бар милләттәрҙең дә тел мәсьәләһе үҫеше. Нәҡ беҙҙә, Рәсәй Федерацияһының бер төбәгендә лә булмағанса, мәктәптәрҙә балаларыбыҙ туған телендә уҡый башланы. Был, әлбиттә, халыҡтың күңелен күтәрҙе, йәшәүгә дәрт өҫтәне, сөнки туған тел ул һәр кем, һәр милләт өсөн иң ҙур хазиналарҙың береһе.

Миңә нәҡ ошо йылдарҙа Силәбе, Һамар, Һарытау, Ырымбур өлкәләрендә ижади командировкаларҙа булырға тура килде. Башҡортостандан ситтәге төбәктәрҙә халыҡтың ни тиклем ауыр йәшәүен күреп, ауылдарҙың ниндәй бөлгөнлөккә төшөүенә шаһит булып, үҙебеҙҙәге хәл-торошҡа һоҡланыуым әле булһа иҫтә. Шул осорҙа Рәсәйҙә барған реформалар һөҙөмтәһендә күпселек төбәктәрҙә ауыл хужалығы юҡҡа сығарылды һәм ауыл кешеһе эшһеҙ тороп ҡалды. Ә Башҡортостанда ауыл хужалығына, сәнәғәт предприятиеларына бөтә илде ялмап алған хосусилаштырыу еленең әллә ни ҡағылмауы халҡыбыҙҙың йәшәйеше өсөн ыңғай күренеш булды. Ошо йылдарҙа республикабыҙҙа, ғөмүмән, ауылдарҙы төҙөкләндереүгә иғтибар ныҡ артты. Бәхеткә күрә, ауылдарҙың бөхтәлеге, ниндәйҙер эстетик зауыҡ менән биҙәлеүе традицияға инеп китеп, әле булһа дауам итә.

Суверенитеттың тағы ла байтаҡ ҡаҙаныштарын телгә алып үтмәйенсә булмай. Республикала китап нәшриәте, матбуғат баҫмалары һаҡланып ҡалды. Ваҡытлы матбуғат баҫмалары хатта күбәйеп, халыҡтың үҙ телендәге гәзит-журналдарға булған һыуһынын ҡандырыу мөмкинлеге бирҙе. Шулай уҡ республикала һүҙ азатлығы тыйылманы, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, социаль өлкәләрҙә байтаҡ эштәр башҡарылды.

Ләкин күңелде әрнеткән, эсте бошорған күренештәр ҙә бар тормошобоҙҙа. Ҙур көс түгеп асылған мәктәптәрҙең, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының ябылыуы хәүефләндерә. Тағы ла бөгөнгө көндөң әсендергес хәле - юғары уҡыу йорттарының түләүле була барыуы. Был халыҡтың муйынына тағылған элмәк кеүек күренә миңә. Барыһы ла йөҙәр мең түләп, балаһын уҡыта алмай. Тимәк, киләсәк быуыныбыҙ белемһеҙ, һөнәрһеҙ булырмы икән ни, тигән борсоулы һорауҙар ҡайнай башта. Халыҡтың рухи үҫешенә лә ҡул һелтәп ҡарау әлеге мәлдә киң таралған тенденция. Был, тәү сиратта, яҙыусы, рәссам, композиторҙар союздарының йәмәғәт ойошмалары кимәлендә генә көн күреүендә асыҡ сағыла. Ауыл яғына ла иғтибар кәмене. Ундағы эшһеҙлек арҡаһында ир-егеттәр сит ерҙәргә китеп эшләргә, ә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ донъя йөгөн бер үҙе тартырға мәжбүр. Был кире күренештәр, әлбиттә, бөтөн Рәсәйгә хас. Тимәк, Рәсәй кимәлендә хәл ителә торған мәсьәләләр буйынса фекерҙәребеҙҙе Мәскәү тарафтарына беҙ ҙә әүҙем еткереп торорға тейешбеҙҙер, тип уйлайым.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөлә Еңеү паркында тыл хеҙмәтсәндәренә һәйкәл асылды. Был уңай менән республика халҡын Рөстәм Хәмитов ҡотланы. "Монумент аяуһыҙ һуғышты еңгән Рәсәй, совет халҡын символлаштыра. Һәйкәлгә ҡарап илебеҙҙең ҡеүәтен дә, ябай хеҙмәткәргә ихтирамыбыҙҙы ла тойорға була. Беҙ Еңеүҙе яҡынайтҡан был быуынға рәхмәтлебеҙ", - тине ул. Проекттың авторы - Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Андрей Ковальчук. Һәйкәл тыл хеҙмәтсәндәренең төп һөнәрҙәрен символлаштырыусы скульптур төркөмдән тора. Стеланың өҫкө өлөшөндә Еңеү ордены һүрәтләнгән.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов X Бөтөн Рәсәй шәрҡиәтселәр съезында сығыш яһаны. "Өфө Евразия ҡитғаһының тарихын, телдәрен, сәнғәтен, динен, философияһын, этнографияһын өйрәнеүсе үҙәк булып тора", - тине Рәстәм Зәки улы һәм сығышында республиканың билдәле шәрҡиәтселәренең ҡаҙаныштары тураһында һөйләне, улар араһында Әхмәтзәки Вәлиди, Ризаитдин Фәхретдин, Морат Рәмзи бар. Рәсәйҙең шәрҡиәтселәр йәмғиәте ике йылға бер съезд ойоштора, Өфө йыйынды икенсе тапҡыр ҡабул итә.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктең юғары уҡыу йорттары ректорҙары һәм етештереү предприятиелары етәкселәре менән осрашты. Фән менән етештереүҙең яҡынайыуы, илебеҙҙәге яңы технологияларҙы ғәмәлгә индереү, шулай уҡ Өфөлә технополис төҙөү мәсьәләләре тикшерелде. Республика предприятиелары импортты алмаштырыу мәсьәләләре менән аҙ шөғөлләнә, тип билдәләне республика Башлығы. Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, вуздарға, үҙ сиратында, эштәрен әүҙемерәк тәҡдим итергә кәрәк.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов балаларға ҡарата ҡылынған енәйәттәрҙе иҫкәртеүгә арналған хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эш итеүсе координация кәңәшмәһе ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, йыл башынан республикала балиғ булмағандарға ҡарата ҡылынған ике меңдән ашыу енәйәт теркәлгән. Рөстәм Хәмитов халыҡ дружиналарын йәлеп итеп, урамдарҙы һәм парктарҙы, мәктәп һәм балалар баҡсалары, өҫтәмә белем биреү, башҡа социаль әһәмиәтле объекттар янындағы биләмәләрҙе патрулләү иҫкәртеү саралары булып тора тип билдәләне.

УЙЛЫҒА-УЙ

# ҠАРАБОЙҘАЙ ЯУЫ - КҮГӘРСЕНГӘ КӨС

**Октябрь айының икенсе яртыһы бер-береһе менән тәү ҡарашҡа бигүк күҙгә бәрелеп тормаған, ләкин эске бәйләнештәре яғынан уртаҡлыҡтары булған иҫтәлекле көндәр теҙмәһенән хасил. Ындай оҡшашлыҡтарҙы иһә бер һәм дә берәгәйле дата - Халыҡ-ара фәҡирлекте бөтөрөүгә ҡаршы көрәш көнө (17-һе) берләштереп тора кеүек.**



Әйткәндәй, ул фәҡирлекте бөтөрөү мөмкинме икән һуң? Кемдәр тарафынан ниндәй көрәш саралары алып барыла был юҫыҡта? Бер ни мәғлүм түгел. Әммә шул уҡ ваҡытта Ер шарында фәҡирлектең сигендә йәшәүсе халыҡтар һанының кимәле быйыл тарихта беренсе тапҡыр 10 проценттан түбәнгә тәгәрәйәсәк һәм 9,6 процент кимәлен биләйәсәк, тип көтә аналитиктар. Бөтә донъя банкы фаразлауынса, был ыңғай үҙгәреш донъяның күп кенә илдәренә ҡағыласаҡ, тик Рәсәйгә түгел. Беҙҙә, киреһенсә, фәҡирҙәр артасаҡ ҡына, тип бара белгестәр. Мәҫәлән, "Коммерсант" гәзите яҙып сығыуынса, Рәсәйҙә фәҡирҙәр ҡатламына табыш кимәле айлыҡ йәшәү минимумының (2015 йылдың икенсе кварталынан -10 мең) яртыһын тәшкил иткән кешеләр ҡарай.

Макроиҡтисади анализ үҙәге белгесе И. Поляковтың иҫәпләүенсә, Рәсәйҙә ағымдағы йылда Бөтә донъя банкы ысулы буйынса фәҡирлек күрһәткесе 1,5 проценттан алып 6,5 процентҡаса артасаҡ һәм был үҫеш киләһе йылдарҙа ла дауам итәсәк. Аныҡ һандар менән эш иткәндә, был, тимәк, 9,5 млн кеше, йәғни 3 млн ғаиләгә тиң, тип раҫлай эксперт. Рәсәй Иҡтисади үҫеш министрлығының алдан күҙаллауҙарында ағымдағы йылда рәсәйҙәрҙең табышы кимәле 19 процентҡа кәмейәсәк, тип билдәләнгәйне, ә был үҙ сиратында 30 миллион кешенең, йәғни илдәге дөйөм халыҡ һанының 21 процентының, фәҡирлеккә төшөүен аңлата. Элекке финанс министры, әле Граждандар башланғыстары комитеты башлығы Алексей Кудрин фекеренсә, пенсияны инфляция кимәлендә индексациялауҙан баш тартыу илдә фәҡирлекте арттырыуҙың төп сәбәбе буласаҡ. Пенсияларҙы индексациялауҙы кәметеү туранан-тура халыҡтың реаль табышын кәметеүгә килтерәсәк, тип раҫлай тәжрибәле финансист.

Ошондай шарттарҙа Бөтә донъя аҙыҡ-түлек көнө (16 октябрь) хаҡында бик урынлы һүҙ ҡуҙғатыла. Был сараның төп маҡсаты ла бит Ер йөҙөндә аслыҡтан яфаланыусы миллиардҡа яҡын кешенең яҙмышына иғтибарҙы көсәйтеү. Ошо тәңгәлдә донъя кимәлендә һүҙ йөрөтмәйенсә лә һәр кемебеҙ үҙ эргә-тирәбеҙгә иғтибарлабыраҡ баҡһаҡ ине. Фәҡирлеккә ҡаршы көрәш сараларының ҡайһы берҙәре үҙ ҡулыбыҙҙа түгелме, тигәнерәк һорау тыуа. Юҡты бар итеү: үҫтереү, етештереү; барҙы ин ишәйтеү йәйин ҡарау, унан ары - экономиялау, һаҡсыллыҡ һ.б саралар. Һаҡсыллыҡ тигәндән, яныраҡ ҡына Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генераль ассамблеяһы штаб-квартираһының ашханаһы матур өлгө күрһәтте: 70-се юбилей сессияһына килгән ил башлыҡтары өсөн мәжлес табыны тулыһынса ҡулланыуға яраҡһыҙ тип иҫәпләнгән эшкәртеү ҡалдыҡтарынан: аҙыҡ крахмалы, кукуруз һәм бөртөклөләр төпрәһенән әҙерләнде, тип яҙҙы "Российская газета" аҙналығы (1 октябрь, 2015). Оҫта ашнаҡсылар сүп-сарға ташланырға тейешле ошо аҙыҡ ҡалдыҡтарынан ике көн буйы мөғжизә яһай һәм һөҙөмтәлә улар юғары ҡунаҡтарҙы һыйҙыан һығылып торған өҫтәлдәр менән ҡаршылай. Дөрөҫ, был юлы юбилей менюһында өйрәнелгән француз блюдолары, шул иҫәптән фуа-гра ла, миньон филеһы ла, һыйыр һәм ҡош ите лә булмай, уның ҡарауы, һый еңел һәм файҙалы, өҫтәүенә телде йоторлоҡ тәмле килеп сыға. "Йыл һайын миллиард тоннанан ашыу аҙыҡ продукттары сүп-сар контейнерҙарына ташлана, - ти мәжлес алдынан сығыш яһап, БМО-ның Генераль секретары Пан Ги Мун, - донъяла бик күп асығыусылар барҙа, был - ояттһыҙлыҡ. Икенсенән, аҙыҡ-түлекте уйһыҙ-ниһеҙ сүплеккә ырғытып, беҙ тирә-яҡ мөхитте бысратабыҙ, ә был транспорт двигателе бүлеп сығарған ҡалдыҡ газ кеүек үк зыянлы". Донъя лидерҙарына бына шундай ғибрәтле күрһәтмә "дәрес" бирелә.

Беҙ ҙә һабаҡ алайыҡ, әйҙә, ошо миҫалдан. Юрый ғына булһа ла иҫәпләп ҡарайыҡ әле: нимәне һәм күпме һатып алабыҙ, күпмеһен ҡулланабыҙ, күпмеһе сүп-сар биҙрәһенә төшөп ята... Әмәлгә ҡалгандай, яңыраҡ ҡына күрше ҡатын зарланып торҙо: ҡарабойҙай "яуы" мәлендә, пенсиям бөтмәҫ борон тип, 10 кило ярма һатып ала. Ире менән икеһенә баштан аша. Ҡарты хәҙер ҡарабойҙай бутҡаһына әйләнеп тә ҡарамай икән. Иң үкенеслеһе шул: ярмаһы ҡортлаған бит бынын. Хәҙер күршем көн дә ишек алдына сығып, бына аҙналар буйы инде күгәрсендәр һыйлай...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

СУВЕРЕНИТЕТ ЕМЕШТӘРЕ



# ҺҮҘ АЗАТЛЫҒЫ

**Рәшиҙә МӘҺӘҘИЕВА, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты:**

- Башҡортостандың үҙаллылығы матбуғат өлкәһенә нимә бирҙе? Был һорауға яуап биреү өсөн йәштәр матбуғаты тарихына күҙ һалыу ҙа етә. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем беҙҙең республикала комсомолдар өсөн үҙ аллы өс баҫма сыға: башҡорт телендә "Ленинсы", татарса - "Яшь коммунар" һәм русса "Комсомолец Башкирии". Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, улар сығыуҙан туҡтай. 1956 йылда "Ленинец" тигән исем аҫтында русса гәзит тергеҙелә, ә башҡортса уның туранан-тура тәржемәһе генә донъя күрә.

Башҡортостан үҙаллылыҡ алғас, йәмәғәтселектең талабы һәм әүҙемлеге менән иң тәүҙә "Йәшлек" гәзите ойошторола, шунан татарса "Өмөт" барлыҡҡа килә, "Шоңҡар", "Толпар" журналдары донъя күрә. Йәғни, теүәл 50 йылдан һуң ғына йәштәр матбуғаты һуғыштан алдағы кимәленә күтәрелә.

Республикала йәштәр матбуғаты тарихын фәнни күҙлектән өйрәнгән ғалим буларак, үҙған быуаттың 90-сы йылдарын Башҡортостан матбуғатының ысын мәғәнәһендә сәскә атҡан осоро тип әйтә алам. Өр-яңы баҫмалар барлыҡҡа килеү, тираждар артыу, гәзит уҡыусыларҙың әүҙемлеге ("Йәшлек"те сығарыу өсөн ҡағыҙ һатып алырлыҡ, типографик сығымдарҙы ҡапларлыҡ аҡса булмағас, райондарҙа, ауылдарҙа халыҡ аҡса йыйыу ойошторғайны), журналистарҙың ҡыйыу сығыштары, гәзит-журналдарҙа береһенән-береһе ҡыҙыҡлыраҡ темалар, ижади эҙләнеүҙәр һәм табыштар - ысынлап та, ул осор шундай ярһыулығы менән айырылып торҙо. Матбуғатҡа, йәмғиәтебеҙгә һүҙ азатлығы биреү - 25 йыл элек яулап алынған суверенлыҡтың иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе.

Үҙаллылыҡтың шәхсән үҙемә биргән тағы ла бер татлы емеше тураһында әйтмәй булдыра алмайым. Улым Байрас менән ҡыҙым Гөлнәзирәгә балалар баҡсаһына барыр мәл етеүгә, Сипайлово биҫтәһендәге 308-се балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө асылды. Балаларым рәхәтләнеп тиҫтерҙәре менән үҙ телебеҙҙә аралашты, милли уйындарыбыҙ, йолаларыбыҙ аша күркәм тәрбиә алды. Шунан инде мәктәпкә барыр алдынан 136-сы башҡорт лицейы ишек асты. Был да беҙҙең өсөн оло ҡыуаныс булды. Сөнки баланың үҙенә аңлайышлы һәм яҡын мөхиттә үҫеүе уның һәләттәрен асыуға, күңелен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Хәҙерге көндә Байрас - Мәскәү Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтында магистратурала, Гөлнәзирә Мәскәү дәүләт университетының юридик факультетында уҡый. Ошондай уҡыу йорттарын яуларға уларға башҡортса уҡыу бер ҙә ҡамасауламаны, ярҙам ғына итте. Шуға ла ҡайһы бер ата-әсәләрҙең, туған телдә уҡыһа, юғары уҡыу йортона инә алмаҫ, тигән борсолоуы урынһыҙ, тип кенә әйтмәксе булғайным.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала йыл башынан 2 миллион 300 мең самаһы кеше Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Бәйләнеш үҙәге аша табипҡа яҙылған. Табиптарға иртәнге 8-се яртынан киске сәғәт 7-гә тиклем 09383 берҙәм телефоны аша яҙылырға була. Бәйләнеш үҙәгенә 246-93-83 телефоны буйынса ла шылтыратырға мөмкин. Кеҫә телефонынан 09383 һандарын йыйғандан һуң медицина учреждениеһының кодын индерергә кәрәк.

✓Быйыл Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға Башҡортостан һәм яҡташтар тураһында материалдар шәлкеме өсөн "Труд" гәзитенең бүлек мөхәррире Гүзәл Агишева, публицистик мәҡәләләре өсөн Белорет мәғлүмәт үҙәгенең "Урал" гәзите хәбәрсеһе Рәмилә Мусина, "Улар Тыуған иле өсөн көрәште", "Тыуған ил ҡайҙан башлана...", "Спорт - көсһөҙҙәр өсөн түгел" фотоһүрәттәр шәлкеме өсөн Стәрлетамаҡ районы мәғлүмәт үҙәгенең "Ауыл тормошо" гәзите фотохәбәрсеһе Юрий Нестеренко лайыҡ булды.

✓Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары, Башҡортостандан сенатор Лилиә Ғүмәрова "Сочи-2015" Халыҡ-ара инвестиция форумы эшендә ҡатнашты. Сарала 9300 кеше, шул иҫәптән 40 илдән 210 сит ил ҡунағы, 1200 журналист ҡатнашты. Форумға Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев, Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫарҙары Игорь Шувалов, Ольга Голодец, Аркадий Дворкович, федераль министрҙар, төбәк етәкселәре һәм Рәсәй эшҡыуарлығы вәкилдәре килде.

✓18 октябрҙә Екатеринбургтың Халыҡ ижады һарайында "Башҡорт теле - донъялағы боронғо төрки телдәренең береһе" тигән темаға ғилми-ғәмәли конференция ойошторола. Сара иртәнге сәғәт 10-да башлана. Конференцияла Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан килгән ғалимдар ҡатнаша. Улар үҙҙәренең сығыштарында боронғо башҡорт теле, уның барлыҡҡа килеүе, үҫеше, хәҙерге торошо мәсьәләләренә ҡағыласаҡ.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, быйыл ғинуарҙан август тиклем төбәктән ситкә китеүселәрҙең һаны 33,9 мең кеше тәшкил иткән. 34,1 мең кеше элекке йәшәгән урынын республикаға алмаштырған. 61 мендән ашыу иһә республика эсендә күсенгән. Миграция ағымы күләме 190,3 мең осраҡ тәшкил иткән. Һөҙөмтәлә төбәктә миграция үҫеше 153 кеше тәшкил итте (былтырғы ошо уҡ осорҙа үҫеш - 1839 кеше).

**"Башинформ"дан.**

✔ *Бына әле Сибай сәнғәт колледжында сәсәндәр мәктәбе асылды. Халыҡ ижадын һаҡлау өсөн мәҙәниәт усаҡтарын - клубтарҙы, китапханаларҙы һаҡлап ҡалыу зарурлығын да беләбеҙ.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы**
Рәсәй МЧС-ының 25 йыллығына арналған "Каһарманлыҡ йондоҙлоғо" Бөтә Рәсәй фестивалендә "Янғын һүндереү часы" номинацияһында Шаҡшаның 35-се янғын һүндереү часы иң яҡшыһы тип табылған. 2007 йылда бында бина реконструкцияланғайны. Бөгөн штат тулыһынса комплектланған, техника һәм ҡорамалдар яңы. Часта хеҙмәт өсөн барлыҡ шарттар булдырылған.

**Совет районы**
Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә иҫәптә тороусы һәм үҙенең шәхси эшен асырға йәки ойошма ойоштороорға теләүсе эшһеҙ граждандарға үҙәктең район филиалы дәүләт пошлинаһын, мисәт һәм штамп эшләүгә киткән сығымдарҙы кире ҡайтарып алыу мөмкинлеген бирә. Өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн 8(347) 223-35-44 телефоны буйынса шылтыратырға йәки Бессонов урамы, 2а адресы буйынса 5-се бүлмәгә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Дим районы**
11 октябрҙә "Батыр" балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбендә үҫмерҙәр араһында дзюдо буйынса Башҡортостан беренселеге үткәрелә. Унда 1996 - 1997 йылғы 100 спортсының ҡатнашыуы көтөлә. Ярыштар 17 ауырлыҡ категорияһында уҙғарыласаҡ. Һөҙөмтәләр буйынса Волга буйы федераль округы беренселегенә ҡатнашыусылар һайлап алынасаҡ.

**Киров районы**
Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында "Өфө-II ҡаласығы: биҙәүестәр һәм көнкүреш әйберҙәре" тип аталған күргәҙмә асылды. Унда ҡуйылған барлыҡ экспонаттар ошо территорияла алып барылған ҡаҙыныу эштәре барышында табылған. Экспозиция менән 16 октябргә тиклем танышырға мөмкин.

**Ленин районы**
"Ал елкәндәр" берләшмәһенең "Грань" йәштәр клубында шотландтарҙың Самайн байрамына әҙерлек бара. Балалар шотланд бейеүҙәре буйынса дәрестәрҙән һуң Шотландия мифологияһын өйрәнә. Самайн - кельттарҙың уңыш йыйыу бөтөүен сағылдырған байрамы. Ул бер ауыл хужалығы йылы тамамланып, икенсеһе башланыуын белдерә.

**Орджоникидзе районы**
Әрме хеҙмәтенә көҙгө саҡырылышта райондан 184 егет китәсәк. Быйыл егеттәр танк ғәскәрҙәрендә, пехотала, хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт итһә, быйылдан башлап улар Һауа-космик ғәскәрҙәре сафын да тулыландырасаҡ. Шул уҡ ваҡытта райондың 38 егете контракт хеҙмәтенә килешеү төҙөгән. Уларға 30 мең эш хаҡынан тыш хеҙмәт урынында ятаҡ, бүлмә бирелә. Теләге булған һалдат уҙ аҡсаһына фатир һатып алырға мөмкин.

**Октябрь районы**
"Меридиан" балалар һауыҡтырыу-мәғариф туризм, экскурсиялар һәм крайҙы өйрәнеү үҙәге мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында спорт туризмы буйынса ярыштар үткәрҙе. Ҡаршылыҡ һыҙатын үтеүҙә ете балалар баҡсаһының командалары ҡатнашты.

*АФАРИН!*

# ТЕМӘС – АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР ТӨЙӘГЕ...



## БР Башлығы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһендә шулай тип белдерҙе

**(Башы 1-се биттә).**

Пленар ултырыш алдынан Рөстәм Зәки улы Хәмитов "Урал" мәҙәниәт йорто базаһындағы яңы күп функциялы мәҙәниәт үҙәгенең эше менән танышты. Мәҙәниәт үҙәгенә ауыл мәҙәниәт йорто, ауыл модель китапханаһы, тарих һәм крайҙы өйрәнеү музейы, "Темәс" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге инә. Үҙәккә төҙөлөш өсөн муниципаль бюджеттан 2,5 млн һәм республика бюджетынан 700 мең аҡса һум бүленгән. Уны булдырыуҙың маҡсаты - халыҡ кәсептәрен тергеҙеү, мәҙәни һәм тәбиғи ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү. Бынан тыш, бинала спорт һәм тренажер залдары, мәктәп уҡыусылары өсөн креатив үҙәк булдырылған, бында уҡыусылар төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә, өҫтәл уйындары уйнай. Мәҙәниәт йортонда урынлашҡан балалар музыка мәктәбе тәрбиәләнеүселәре классик һәм милли ҡоралдарҙа уйнарға өйрәнә. Егеттәр ҡурай тартырға өйрәнеп кенә ҡалмай, уны яһау техникаһы серҙәренә лә төшөнә. Мәктәпкә сәйәхәт барышында Раян Ғәбитов исемле уҡыусы әле генә үҙе эшләгән ҡурайын республика Башлығына бүләк итте. Кәңәшмәне БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов алып барҙы. Республика башлығы Рөстәм Хәмитов үҙенең сығышында мәҙәниәт буйынса республика кәңәшмәһенең бушҡа ғына Баймаҡ ерендә үтмәүенә баҫым яһаны. "Бында археологик табыштар бик күп. Темәс - бихисап арҙаҡлы шәхестәрҙең тыуған төйәге. Уларҙың барыһына ла Тыуған илебеҙҙе үҫтереүгә һалған көстәре өсөн рәхмәт", - тине ул.

Тамара Валентиновна Пуртова бөгөнгө көндә клубтарҙың ауылдың мәҙәниәтен күтәреүҙә роле ҙур, шуға күрә клуб селтәрҙәрен үҫтереүгә ярҙам күрһәтеү мотлаҡ, тип баҫым яһаны. "Мәҙәни ҡомартҡыларҙы һаҡлау - ҙур проблема. Глобалләштереү, интернетлаштырыу, мәғлүмәтләштереү арҡаһында халыкта кәсепселеккә иғтибар кәмей. Гәүһәрҙәр халыҡ араһында йәшеренгән, уларҙы табып, үҫтереү - төп бурысыбыҙ", - тине ул.

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың сығышы ла тыңлаусылар өсөн бик фәһемле булды: "Беҙҙә лә әле сәсәнлек сәнғәте йәшәп килә. Бына әле Сибай сәнғәт колледжында сәсәндәр мәктәбе асылды, унда билдәле сәсәниә Асия Ғәйнуллина белем бирәсәк. Халыҡ ижадын һаҡлау өсөн мәҙәниәт усаҡтарын - клубтарҙы, китапханаларҙы һаҡлап ҡалыу зарурлығын да беләбеҙ. Уларҙы ябыу мәсьәләһен, йәмғәтселектең фекерен иҫәпкә алмайынса, башҡарырға ярамай, тигән федераль Закон сыҡты. Мәҙәниәткә кадрҙар тәрбиәләү мәсьәләһен балалар сәнғәт һәм музыка мәктәптәре аша хәл итеү мәсьәләһе көн ҡаҙағына ҡуйылған", - тине Әминә Ивнәй ҡыҙы.

Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина һәр район үҙәгендә, ауылдарҙа Дуҫлыҡ йорто булырға тейешлеген, уны китапханаларҙа ойоштороорға булыуын әйтеп үтте. "Тәрбиә эшенә дини конфессия вәкилдәрен дә йәлеп итергә кәрәк, - тине ул. - Патриотлыҡ - тыуған ергә, илгә генә түгел, дингә лә һөйөү ул. Юғиһә, һуңғы ва-



*Ат яҡшыһы яуҙа ла, байрамда ла...*

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔"Стартап автобусы" Башҡортостандың Урал аръяғы һәм көньяҡ-көнсығыш райондарына юллана. Ағымдағы йылдың октябрендә "Стартап автобусы" республиканың муниципаль берәмектәренә сәфәрҙәр ойоштора. Проекттың төп бурысы - эшҡыуарлыҡ субъекттарына муниципаль берәмектәрҙең биләмәләрендә яңы проекттар булдырыуҙа ярҙам, эшҡыуарлыҡты популярлаштырыу.

✔Өфөнөң Енеү паркында Хәрби техника аллеяһы асылды. БМП-1 һәм БМП-2 пехоталарының броняль машиналары, ЗСУ-23 зенит үҙйөрөшлө ҡоролмаһы, үҙйөрөшлө артиллерия ҡоролмалары (САУ), "Нона" хәрби машинаһы, БТР-70 бронетранспортеры, БМ-21 "Град" хәрби машинаһы күрһәтелде. Аллеяны асыуҙа ҡала етәкселеге, Бөйөк Ватан һәм локаль һуғыш ветерандары, кадеттар, хәрби-патриотик клуб тәрбиәләнеүселәре, уҡыусылар, баш ҡала халҡы һәм уның ҡунаҡтары ҡатнашты.

✔Өфөлә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле яңы ижад миҙгелен аса. 22 октябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында "Берҙәм ғаиләлә" исемле тамаша була. Концерт донъя халыҡтарының берҙәмлегенә арналған. Тамашаны ижади төркөм - "Мираҫ"тың директоры Айнур Искәндәров, художество етәксеһе Нәфирә Ихсанова, балетмейстер Әлфиә Тимерғәзиева, хормейстер Эльвира Ғәйфуллина, музыкаль етәксе Сергей Горичевский, "Забава" ансамбле етәксеһе Виктор Ярцев әҙерләй. Концерт киске сәғәт 7-лә башлана.

✔Өфөлә йылытыу миҙгеле башланды. 1 октябрҙә йылытыу миҙгеленең башланыуы тураһында ҡарарға ҡул ҡуйылған. Федераль ҡануниәткә ярашлы, әгәр уртаса һауа температураһы биш көн дауамында һигеҙ градустан түбән булһа, йорттарға йылы бирелә башлай. Әммә муниципалитетта температураның түбәнәйеүен көтөп торманылар. Йылы тәү сиратта балалар баҡсаларына, мәктәптәргә, дауалау учреждениеларына ебәрелә.

✔Башҡорт дәүләт филармонияһында ҙур этно-рок фестивале ойоштоpола. Был хаҡта эстрада буйынса художество етәксеһе Илшат Фәхертдинов хәбәр итте. Ошо маҡсатта популяр "Арғымаҡ" төркөмөн филармонияға эшкә саҡырғандар. Учреждение етәкселеге төркөмгә ҙур өмөттәр бағлай.

ҡытта төрлө секта вәкилдәре беҙҙең традицион динебеҙҙе ҡыҫырыҡлай, быға юл ҡуйырға ярамай. Балаларыбыҙ индустарҙың мантраларын ятлағансы, үҙебеҙҙең мөнәжәттәрҙе өйрәнһен. Бына әле генә Сибай ағинәйҙәре бар республиканан, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләренән ағинәйҙәрҙе саҡырып, мөнәжәт бәйгеһе ойошторҙо. Шәп сара булды. Ләкин бындай конкурстар Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Ағинәйҙәр ҡоро кимәлендә генә үтергә тейеш түгел, уларҙың матур башланғысын беҙҙең Мәҙәниәт министрлығы дауам итергә тейеш".

Баймаҡ районы муниципаль район хакимиәте башлығы Илшат Ситдиҡов Баймаҡ районы миҫалында халыҡ ижадын һаҡлау һәм үҫтереү тураһында һөйләне, семинарға тәҡдим ителгән "Башҡорт аты" проекты - Урал арьяғының бренды булыуын, былтыр уның грантҡа лайыҡ булыуын әйтеп үтте. "Бәлки, был проект киләсәктә республиканың да брендына әйләнер", - тигән өмөт белдерҙе ул.

Көндөң икенсе яртыһында Темәс ауылының "Һаҡмар" стадионында "Башҡорт аты" этнофестивале үтте. Көн боҙолоп, дауыл сығыуына ҡарамаҫтан, сараға тамаша ҡылырға ауыл халҡы ла йыйылды. Фестиваль сиктәрендә башҡорт тоҡомло аттар, ҡул эштәре, башҡорт милли аш-һыуы, йылҡы итенән аҙыҡ-түлек күргәҙмәләре, ҡымыҙсылар бәйгеһе ойошторолдо. Республика семинарында ҡатнашыусылар район ҡымыҙсылары әҙерләгән батырҙар эсемлеген татып ҡараны. Иң мауыҡтырыҡ, йөрәктәрҙе елкендерерлек сара - стадионда башҡорт тоҡомло аттар менән бейеү, һыбайлыларҙың ат өҫтөндә төрлө трюктар эшләүе ("джигитовка") булды. Сабып барған ат өҫтөндә торған килеш йәйһә йөҙтүбән үтеү, ат аҫтынан әйләнеп сығыу һ.б. хәтәр алымдарҙы башҡарған егеттәрҙең һәм берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ - Снежана Таймасованың йылғырлығына, батырлығына бар тамашасы хайран ҡалды. Артабан тарантастар парады үтте. Парадтан һуң тамашасы "Төньяҡ амурҙары" тарихи клубы ағзаларын сәләмләне. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорттарҙы сағылдырыусы клуб ағзалары Ватан һуғышына 200 йыл тулыу уңайынан республика, ил күләмендә үткәрелгән байрам сараларында әүҙем ҡатнашты. Артабан майҙанға көтөүселәр сыҡты. Иртә таңдан ҡара кискә тиклем тоғро дуҫы - аты менән мал көтөүсе ир-егеттәр үҙ-ара һөнәргә бәйле ярыштарҙа көс һынашты. Сыбыртҡы шартлатыу, аттың әйәрен һалдырыу һәм яңынан әйәрләү буйынса ваҡытҡа ярышыу, һәр көтөүсенең төрлө хуш еҫле үләндәр, япраҡтар ҡушып әҙерләнгән сәйе буйынса баһалама ағзалары еңеүсене билдәләне.

"Ылаҡ" халыҡ уйынын күрһәтеү - этнофестивалдең кульминацияһы булды. Шартлы рәүештә Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән ырыуҙарына бүленгән уйында ҡатнашыусылар уйын майҙанының ике яҡ ситенә урынлаштырылған ҡаҙандарға кәзә төшөрөргә тейеш ине. Командалар капитандары майҙан уртаһындағы кәзәне һыбай көйөнсә эйәлеп эләктерергә тейеш. Кәзәне ҡаршы яҡтың ҡаҙанына төшөрөргә кәрәк. Уйын ҡағиҙәләре буйынса, унда ҡатнашыусылар бер-береһен этергә, кәзәне ҡаршы яҡ команданан һалдырып алырға хоҡуҡлы. Шул уҡ ваҡытта атты үрәпсетмәҫкә кәрәк. Уйын барыһына ла оҡшаны: "трофей", йәғни кәзә муляжы әле бер, әле икенсе командаға күсеп торҙо. Һөҙөмтәлә, уйында дуҫлыҡ еңеп сыҡты. Иҫәп - 2:2.

Ойоштороусылар үҙ маҡсатына өлгәште: башҡорт мәҙәниәте байрамы сағыу тамашаға әйләнде, башҡорт атына мәҙхиә йырланды. Көн дауамында ат өҫтөнән төшмәгән, ат менән бергә тамаша ойошторған һыбайлылар: Снежана һәм Рәмзил Таймасовтар, Илсур Сынғыҙов, Айгиз Муллабаев, Илгиз Аҡбулатов (Ҡуянтау), Салауат Әбсәләмов (Баймаҡ), Рәмил Әлмөхәмәтов (Икенсе Этҡол), Рәмил Мөхәмәтйәнов (Ҡолсора), Ғәфәр Йәнтүрин (Мерәҫ), Дамир Шарапов (Үрге Йәйыҡбай), Марсель Ғайсин, Фәнүз Үҙәнбаев (Билал), Илһам Моталлапов (Буранбай), Салауат Әбдрәшитов (Аҡморон), Венер Байғужин, Фуат Харисов, Ришат Аллабирҙин, Илфат Хөсәйенов (Темәс), Урал Игебаев, Ғәлим Яуымбаев (Күсей), Айнур Илбулов (Иҫәнбәт), Фәнил Маннапов, Ғилман Сирбаев (Юлыҡ) маҡтауға лайыҡ. Һыбайлыларҙы оҫталыҡҡа яҡташыбыҙ, Өфө ҡалаһы циркы тренеры Миҙхәт Солтангәрәев өйрәтте.

Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов семинарҙа ҡатнашыусылар һәм ауыл халҡы менән хушлашҡанда этнофестивалдән ҡәнәғәт ҡалыуын белдерҙе: "Бик яҡшы тәьҫораттар алдым. "Джигитовка" ла, конкурстар ҙа бик оҡшаны. Барыһы ла яҡшы ойошторолған. Бындай уйындарҙы, конкурстарҙы һабантуйҙарҙа ла ойошторорға, үҫтерергә, райондар араһында үткәрергә кәрәк. Киләсәктә һәр мәктәптә ат спортын үҫтереүҙе уйларға кәрәк. Был тәңгәлдә пландар бар", - тине.

**Айгөл ИҘЕЛБАЕВА,**
**Дилә АРЫҪЛАНОВА.**
**Баймаҡ районы.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# БЕРҘӘМ ИЛДЕҢ...

## көнө берҙәм



**Һорау: Егерме биш йыл элек илдә, республикала башланған үҙгәрештәрҙе нисек ҡабул иттегеҙ һәм уларҙа нисек ҡатнаштығыҙ?**

**Вәкифә ХӘЙРУЛЛИНА, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ профессоры:** Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулаған йылдарҙа булған ваҡиғаларға хәҙер анализ яһап, баһа биреп була. Ул ваҡытта беҙ барыһын да аңлап та етмәгәнбеҙ, әммә үҙгәрештәрҙе шул тиклем ҙур өмөттәр, ҡыуаныс менән ҡаршы алдыҡ. Шул саҡта беҙгә баҙар иҡтисадын яңы үҫеш юлы булараҡ күрһәттеләр. Теорияға ярашлы, баҙар системаһында конкурентлыҡ ҙур, етештереүсәнлек үҫә, етештереүселәр бөтә сығымдарҙы кәметергә тырыша, тәҡдимдәр арта, бөтә нәмә мул булғас, хаҡтар кәмей. Әммә ғәмәлдә бөтөнләй икенсе төрлө килеп сыҡты. Капитализмға оҙаҡ йылдар әҙерләнеп, яйлап, эволюцион рәүештә күсергә кәрәк булған да бит, беҙҙә быға һәр ваҡыттағыса революция яһап өлгәшелде. Беҙҙең ил кешеһенең менталитеты икенсе, улар мәсьәләләрҙе Үҙәктә хәл итеүгә күнеккән. Шуға ла яулап алынған үҙаллылыҡ менән нимә эшләргә белмәй тороп ҡалдыҡ. Элекке йәмғиәт нормалары яңы шарттарға ярамай, яңылары уйланып етелмәгән. Бөгөн ҡайһы бер Скандинавия илдәрендә беҙ ваз кискән социалистик ҡоролош идеологияһының ыңғай яҡтарын үҙләштереп, халыҡҡа бушлай социаль ярҙам күрһәтеү механизмдарын яйға һалғандар. Тимәк, социаль тигеҙлек, социаль ғәҙеллек тигән төшөнсәләр капиталистик ҡоролошта ла, баҙар иҡтисады шарттарында ла йәшәй ала. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең быуын баҙар иҡтисады принциптарына барыбер бигүк төшөнөп етмәне, киҫкенләшеп киткән ҡайһы бер мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҫеп килгән быуын йәштәре табыр, тип өмөтләнәм.

**Әхтәр БОҪҠОНОВ, сәйәсәт фәндәре кандидаты:** Башҡортостаныбыҙға суверенлыҡ яулаған йылдарҙа мин Башҡорт дәүләт университеты юридик факультетының 2-се курс студенты инем. Дәүләттәге үҙгәртеп ҡороуҙарға бик ҙур өмөттәр бағлап, яңы республика төҙөйбөҙ тип дәррәү тотондоҡ. Шундай уҡ дәрт менән "Урал" башҡорт милли үҙәген, "Аҡ тирмә" ойошмаһын, Башҡорт йәштәре иттифағын ойошторҙоҡ. Оло быуын кешеләренә эйәреп, бер идея менән янып йәшәнек. Беҙ ул заманда тоталитар ил бүтән булмаҫ, һәр нәмәгә ирек бирелер, тип уйлай инек. Бик күп маҡсаттар тормошҡа ашты ашыуға, Башҡортостандың үҙаллылыҡ статусы күтәрелде, уҡыу йорттары, юлдар мәсьәләһе хәл ителде. Әммә бөгөн сәйәсәт өлкәһендә, фирҡәләр эшмәкәрлегендә артҡа китеш һиҙелә. Халыҡ был өлкәләрҙең эшенә бөтөнләй ҡыҫылмай, ҡыҙыҡһынмай. Сөнки хәҙер бер нәмә лә халыҡ фекеренән тормай, тип уйлай кеше. Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ та бар, әлбиттә. Шулай ҙа бөгөн бер ни кимәлдә ирек бар, беҙ теләгәнебеҙҙе эшләй алабыҙ. Тел, дин, ер мәсьәләләрендә берҙәм булып, йәмғиәт эштәрендә әүҙем ҡатнашып йәшәһә ине милләттәштәр.

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН, БР Күсемһеҙ мәҙәни милек объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге директоры:** Егерме биш йыл элек булған үҙгәрештәрҙе ҙур өмөт менән ҡабул иттем, сөнки ул ваҡытта мин, егерме йәшлек студент, Башҡорт йәштәре иттифағын ойоштороусыларҙың береһе инем. Йәштәр ойошмаһы булдырып, беҙ үҙаллылыҡ өсөн көрәштә әүҙем ҡатнаштыҡ. Меңәрләгән кешенән торған митингтар йыя инек. Ә суверенитет иғлан итер алдынан бер аҙна элек Ленин урамында Нефтселәр мәҙәниәт һарайы алдында тирмә ҡороп, бер төркөм йәштәр халыҡтан үҙаллылыҡ өсөн имзалар йыйыу ойошторҙоҡ, аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Иттифаҡтың бөтә эшмәкәрлеге суверенитет алыу, үҙаллылыҡҡа ынтылыу ине. Беҙ, ул ваҡыттағы йәштәр, революцион ҡарашлы, радикаль холоҡло инек. Шуға күрә суверенитеттың республика халҡына иҡтисади үҙаллылыҡ килтеререн, милли мәҙәниәткә, белем биреүгә яңы киңлектәр асылырын аңланыҡ. Һөҙөмтәләр ысынлап та яҡшы булды: төҙөк юлдар, газ үткән матур ауылдар, йәмле ҡалалар, үҫешкән милли мәҙәниәт, мәғариф, милли матбуғат - былар бөтәһе лә бөгөн халҡыбыҙҙың ғорурланырлыҡ ҡаҙанышы. Ҡайһы берәүҙәр, суверенитет юлынан тайпылдыҡ, күп ҡаҙаныштарыбыҙҙан баш тарттыҡ, тип әйтер. Ләкин башҡорт халҡының тарихынан сығып фекер йөрөтһәк, тәүге тапҡыр ҡан ҡойошһоҙ, тыныслыҡ юлы менән үҙаллылыҡ яулауға өлгәшкәнбеҙ. Бының өсөн мин ул саҡтағы федераль үҙәк етәкселегенә һәм төбәгебеҙ лидерҙарына рәхмәт әйткем килә. Илдә тыныслыҡ һаҡлана, тотороҡло алға ынтылыш бара. Үҙ илемдең ҡәҙере, баһаһы сит өлкәләргә сығып йөрөгәндә, сағыштырғанда күренә. Беҙҙең республикабыҙҙа халыҡ сағыштырмаса арыу йәшәй. Шуны күреп, мин һәр ваҡыт ҡыуанам.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бөйөр

❖ Бөйөрҙә таш барлығын белгәс тә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр стакан ҡайын һуты эсергә.

❖ 4-6 ай буйына көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ кишер һуты эсергә.

❖ көнөнә 1 тапҡыр 1 ҡалаҡ зәйтүн майы эсергә.

❖ 2 аҙна буйы көнөнә 3-4 тапҡыр 1 лимон һутына һыу йәки кишер, сөгөлдөр, ҡыяр һуты ҡушып эсергә.

❖ 3 аҙна буйы ашар алдынан сирек йәки яртышар стакан картуф бешкән һыуҙы эсергә. Һәр һутты сиратлап эсегеҙ, бөтәһен бер көндә түгел.

### Баш ауыртһа...

❖ Көмөшкә менән болғап яһалған һинд һуғаны төнәтмәһен маңлай һәм сикәләргә һөртөргә. Был төнәтмәне тәндең башҡа ауыртҡан урындарына һөртөргә була, бик килешә.

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған бәпембә тамырына 3 балғалаҡ бөтнөк япрағы ҡушырға ла, 1 стакан ҡайнап сыҡҡан һыуға һалып, 5-7 минут төнәтергә. Көнөнә 2-4 мәртәбә ашар алдынан 1/4 стакан эсергә. Биш аҙнанан да кәм эсмәҫкә. 7-10 көнлөк тәнәфес яһау мотлаҡ.

### Геморрой

❖ Геморройҙан ябай ғына дауа: ваҡ ҡырғыстан ҡырылған 1 ҡалаҡ керән (хрен) тамырын эмаль һауытҡа 300 мл һыуға һалып, ҡайнатып сығарығыҙ. Плитәнән алып, ҡапҡасын ябып төнәтергә. Һөҙөп, шешәләргә ҡойоп, һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. 1 литр керән төнәтмәһен эсеп бөтөүгә сир ҙә юҡҡа сыға.

### Ҡалҡан биҙе

❖ 4 ҡалаҡ ҡара мышар емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай, 1 ай ял итергә. Һуңынан дауаланыу курсын тағы ҡабатларға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ғалимыбыҙ Зиннур Ураҡсин әйтмешләй: "Башҡортҡа ла сәйәси дипломатияға, ҡатлы-ҡатлы фекерҙәрҙе асырға өйрәнергә кәрәк. Башҡорт йөрәкле, донъя күләмендә фекер йөрөтөрлөк сәйәсмәндәребеҙ, дипломаттарыбыҙ үҫһен ине".*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠӘМӘР... ябай билбау түгел

**Кешенең инә йәки ата өйрәккә әйләнеүе кеүек сюжеттар ҙа күп халыҡтар, шул иҫәптән, башҡорт мифологияһында ла осрай. "Ике туған" әкиәтендә алтын йомортҡа һалыусы тылсымлы өйрәктең итен ашағандан һуң, малайҙар үҙҙәре лә ошо һәләткә эйә була. Был эпизод боронғо кешеләрҙең тотемдың итен ашағандан һуң уның теге йәки был физик сифаттары күсеүенә ышаныуҙары менән бәйле.**

Ир-егеттең билбауы - ҡәмәрҙе өйрәк баштары фигуралары менән биҙәү ҙә ошо ышаныуҙарға бәйле булһа кәрәк. Беренсенән, ҡәмәрҙе балалар йәки ҡарттар йөрөтмәгән, уны көсө ташып торған йәш һәм урта йәштәге ирҙәр таҡҡан. С. Шитова материалдары буйынса, ҡәмәр - башлыса кейәү егете кейеменең бер атрибуты.

Был тезис этнографик һәм фольклор материалдар менән дә нигеҙләнә. "Ҡара юрға" легендаһында (М. Буранғолов версияһы) Мәсем байҙың ҡыҙы Маҡтымһылыу үҙенең уға битараф булмауы билгеһе итеп, Әбләй батырҙың биленә көмөш менән ҡайылған ҡәмәр бәйләргә теләүен белдерә. "Алдар батыр" эпосында Алдар үҙенең туйы мәлендә дуҫы Итбайға ҡәмәр бүләк итә. "Мәхүбә" легендаһында ҡыҙҙың атаһы ҡыҙын уғын йөҙөк аша ата алған мәргән егеткә кейәүгә бирергә вәғәҙәләй. Аҙаҡтан вәғәҙә билдәһе итеп Айбулат атлы егеткә ҡәмәр бәйләй. "Урал батыр" эпосында Яйыҡ та ир ҡорона инеп еткәс, биленә ҡәмәр бәйләп, атаһы Урал батырға ярҙамға китә. "Заятүләк һәм Һыуһылыу"ҙа (М. Сәғитов версияһы) үҙ ғүмерендәге тәүге уңышлы һунары өсөн Заятүләккә атаһы Сәмәр хан көмөш һәм ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән ҡәмәр бүләк итә. "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" (Ғ. Сәләм версияһы) эпосында Ҡуҙыйкүрпәскә ун ете йәш тулғас, уға атаһының көмөш менән биҙәлгән ҡәмәрен тапшыралар.

Быларҙың барыһы ла шуны күрһәтә: боронғо башҡорттарҙа ҡәмәр йәш кешенең өлгөрөп етеүен күрһәтеп тороусы атрибут булған. Икенсенән, тотем тиреһенән яһалған билбау (беләҙек, йөҙөк, маңлай бауы һ.б.) ошо йәнлек йә ҡоштоң тиреһен ябыныуға тиң ҡаралған. Был кеше тотем йәнлек йә ҡошҡа әүерелеп, уның бөтөн яҡшы сифаттарын ала, тип ышанғандар.

Көньяҡ Ҡытайҙа бер ҡыҙыҡ йола таралған була: йылдың аҙаҡҡы көнөндә малайҙар ҡулдарына өйрәк йомортҡаһы тотоп урамға сыға һәм: "Ялҡауҙы һатам!" - тип ҡысҡыра. Киләһе йылда үҙҙәренең насар ғәҙәттәренән ҡотоласаҡтарына ышанып, һуңынан йомортҡаны ашайҙар. Быны аңлатыуы еңел генә: борон өйрәктең йомортҡаһын йәки йөрәген ашаһаң, уның бөтөн яҡшы сифаттарын алаһың, йәғни, яңынан тыуаһың, тип уйлағандар. Бынан һуң изге ҡош ҡурсалап торорға тейеш булған. Хакастар, мәҫәлән, ҡыҙҙарының сәсен толомлап тәүге тапҡыр үргәс, уның осона ебәк ептәргә бәйләнгән өйрәк ҡойроғонан алынған мамыҡ менән биҙәгәндәр. Бында ла балаға изге өйрәктең күркәм сифаттарын теләү күренеше ята.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘШТӘРГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Заманалар бер аҙ болғанып, рухи ҡиммәттәр алышынып торған мәлдә бигерәк тә йәш быуын аҡыллы һүҙгә, кәңәшкә мохтаж икәнен беләбеҙ. "Йәштәргә әйтер һүҙем..." тигән яңы рубрикабыҙҙы З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы һәм Башҡорт дәүләт университеты профессоры, филология фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Ишмөхәмәт ҒӘЛӘҮЕТДИНОВтың кәңәштәренән башлайбыҙ.**



# ОЛО ҺҮҘЕН ТЫҢЛАҒАН - ҡырын ятып йырлаған

## Маҡсат ҡуйырға өйрән!

Ер йөҙөндә өсөнсө мең йыллыҡтың башында барған киҫкен һынылыштарға, фәнни-техник һәм глобалләшеү процесы һөҙөмтәләренә, Ай менән Ҡояштың торошо, Күк йөҙөндәге башҡа планеталарҙың, йондоҙҙарҙың хәрәкәтенә ҡарайһың да, кешенең сәләмәт рухына ҡурҡыныстар янауын аңлайһың. Кешене биҙәмәгән битарафлыҡ, ғәмһеҙлек, аҙғынлыҡ, бәйелһеҙлек, аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ, боҙоҡлоҡ һәм әшәкелек кеүек насар сифаттар өҫкә ҡалҡып сыҡты. Йәмғәтселеккә ҡаршы ҡылынған хаяһыҙ күренештәр, язаһыҙ ҡалдырылған енәйәттәр кире тойғолар уята. Алдын-артын уйламай эшләгән аумаҡайҙар, шикәйәтендә үҙ исемен йәшергән ошаҡтар майҙанға сыҡты. Дәүләт-ара сәйәсәттәге дошмансылыҡ, баҫҡынсылыҡ, реакцион һәм агрессив даирәләрҙең мәнфәғәтен яҡлаған террор, диктатура һәм милләтселек күп илдәргә төҙәлмәҫлек ҡаты яралар, ҡот осҡос бәхетһеҙлектәр килтерә.

Әммә тормош нисек кенә ауыр, көнкүреш ҡалай ғына насар булмаһын - халыҡ донъянан төңөлмәгән, яҡты көндәргә өмөтөн өҙмәгән. Тормош үҙенең бөткөһөҙ ғәмдәре һәм йәмдәре менән әүрәтеп, көн артынан көн, йыл артынан йыл үтеп кенә тора. Шул үтәсәк ваҡыт арауығының башында уҡ үҙеңә дөрөҫ маҡсат ҡуя белеү бик мөһим. Йәш кешенең күңелендә ҙур хыялдар, оло маҡсаттар ҡайнарға тейеш, уларҙы тик "энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыуға" тиң ныҡышмалы һәм фиҙаҡәр хеҙмәт аша тормошҡа ашырып була. Һәр кем был донъяға үҙ өлөшө, үҙ бәхете менән тыуа, шулай ҙа ул өлөштө, ул бәхетте йәшәйештә ғүмер буйы көндәлек эш, аҡыл һәм көс менән яуларға тура килә. Дарьялар ҙа кескәй инештәрҙән башланғандай, оло эштәр, оло асыштар көндәлек даими көс түгелгән тыйып тотҡоһоҙ дәрт менән башҡарылған бәләкәй эштәрҙән ғибәрәт. Үҙеңде уҡымышлы, илеңә, халҡыңа файҙалы кеше булырға әҙерләү - йәштәрҙең һәр береһенең мөҡәддәс бурысы. Әйтергә кәрәк, бурыс тойғоһо - ул тик кешелекле һәм кеселекле булып ҡала белгән заттарға ғына хас сифат. Бары тик үҙ хоҡуҡтарын ғына даулап йөрөгән ялған шәхес булырға ынтылыусы буш ҡыуыҡтарға бирелмәй ул бөйөк тойғо.

Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигән васыят һүҙҙәре бөгөн дә бик актуаль. Уҡыу һәм тәбиғәт биргән һәләттәреңде үҫтереү, донъялағы бөтә нәмәне лә белергә ынтылыу һәм етмеш төрлө һөнәргә эйә булыу - киләсәк тормошоңа баштан уҡ ныҡлы нигеҙ ҡороп, ожмах һарайында тулы ҡанлы донъя көтөү ул. Мәктәптә, юғары уҡыу йортонда иңгә-иң терәшеп, тоғро дуҫтар менән уҡыған йылдар ҙур-ҙур хыялдар менән талпынып йәшәгән ынтылышлы осор булып ҡала. Мәшһүр ғалимыбыҙ Зиннур Ураҡсин әйтмешләй: "Башҡортҡа ла сәйәси дипломатияға, ҡатлы-ҡатлы фекерҙәрҙе асырға өйрәнергә кәрәк. Башҡорт йөрәкле, донъя күләмендә фекер йөрөтөрлөк сәйәсмәндәребеҙ, дипломаттарыбыҙ үҫһен ине". Был урында үҙебеҙҙең иҡтисадты үҫтерерҙәй, эшҡыуарлыҡ, бизнес менән шөғөлләнгән отҡор, аҡыллы, егәрле йәштәребеҙ булырға тейешлекте лә өҫтәргә кәрәк.

## Ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланһын!

Йәмғиәтебеҙҙең, илебеҙҙең нигеҙен һәм рухи сәләмәтлеген тәшкил итеүсе ғаилә мәсьәләһе бик етди һәм яуаплы бурыстарҙан һанала. Ғаилә ҡороу һәр халыҡта, тарихи үҫештең һәр дәүерендә кеше тормошондағы иң яуаплы ғәмәлдәрҙең береһе иҫәпләнгән. Уны башҡорт халҡының йәштәрҙе ҡауыштырыр алдынан үтәлә торған боронғо йолаларынан да күрергә була. Мәҫәлән, һырға һабағы, ҡыҙ күҙләү, яусылау, димселек, ҡыҙ әйттереү, ҡоҙалыҡ, кейәүләп йөрөү, ҡоҙалашыр алдынан ике яҡтың да нәҫел-нәсәбен тикшереү һ.б. Ҡыҫҡаһы, эште туйға алып барып еткереү алдынан өйләнәсәк ҡыҙ менән егетте һәм уларҙың туған-тыумасаһын төрлө яҡтан һынар өсөн булдырылған был йолаларҙың маҡсаты тик бер генә - ғаиләнең ныҡлығын тәьмин итеү һәм шуның менән йәштәрҙе бәхетле яһау. Хәҙерге йәштәребеҙ ҙә ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған йолаларҙы һаҡлаһын ине.

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәтебеҙҙә шәжәрә байрамдары уҙғарыу йолаһы киң ҡолас алды. Һүҙ юҡ, ысынлап та, бындай саралар йәш быуынды илһөйәрлек һәм рух тойғоларында тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Рухлы булыу - ул ата-бабаларҙан килгән ғөрөф-ғәҙәткә, телгә, иманға, булмышыңа, халҡыңдың ауыҙ-тел ижадына, мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, тыуған ереңә һәм туған халҡыңа, ҡан-ҡәрҙәштәреңә тоғро ҡалыу. Кешеләге рухи ныҡлыҡ бала саҡтағы дөрөҫ тәрбиәнән, милли рухты барлыҡҡа килтереүсе нигеҙ күҙәнәктәренең кесе йәштән һалыныуынан. Тимәк, кеше күңеленә рухиәт орлоҡтары бала саҡтан һалына, улар артабан үҫмерҙең булмышын формалаштырыуға, уға ҡабатланмаҫ милли һыҙаттар өҫтәүгә булышлыҡ итә.

Йәш быуындың физик һаулығын нығытыу, рух сәләмәтлеген булдырыу, милли ғөрөф-ғәҙәттәргә тоғролоҡ тәрбиәләү - барыбыҙҙың хәстәрлеге. "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" әйтеме бөгөнгө көндә уғата ауаздаш яңғырай. Үҫеп килеүсе йәштәребеҙгә бөгөн төрлө мәғәнәһеҙ компьютер уйындары, көнө-төнө интернетта ултырыу һөҙөмтәһендә төрлө сирҙәр янай. Был осраҡта тормошобоҙҙан юйылыуға дусар ителгән башҡорт халыҡ балалар уйындарын тергеҙеү кеүек сараларҙың әһәмиәте бермә-бер арта. Әҙәм балаһының һаулыҡтан да ҡәҙерле нимәһе бар был донъяла!

## Бәхетле булыу сере

Йәштәр, ғәҙәттә, киләсәк тормошон тик бәхетле генә итеп күҙ алдына килтереүсән. Бәхет төшөнсәһе үҙе лә һәр кемде ныҡ уйландыра. Берәүҙәр бәхетте хыялының тормошҡа ашыуында, кешеләргә файҙа килтереүҙә йәки саф мөхәббәттә күрә. Икенселәр тормошта артыҡ борсолмай йәшәүҙе, үҙ ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙе, йә булмаһа яҡшы костюм, күлдәк һатып алып театрға, концерттарға йөрөүҙе бәхет тип һанай. Бындай осраҡтарҙа бәхет төшөнсәһе йөкмәткеһендә һәр кемдең тормошта тотҡан урыны, уның тормошҡа булған шәхси ҡарашы, холҡо, тәрбиәлелеге, әҙәплелеге, әхлаҡлығы һәм рухи байлығы сағыла.

Йәш уҡыусым! Әгәр һин, тормош йүгәнен ҡыҫып тотоп, бәхет ҡапҡаһын үрелеп асам, тиһәң - ололар һүҙенә ҡолаҡ һал. Оло һүҙен тыңлаған - ҡырын ятып йырлаған, ти боронғолар. Оло һүҙен тотмаған - оролған да бәрелгән. Бөгөнгө еңел булмаған заманда йәштәргә фәһем булһын тип, халыҡ мәҡәлдәрендә ярылып ятҡан хаҡ һүҙҙәрҙе ишеттерәйек.

"Тыуған-үҫкән илең алтын бишек" бит ул. "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул". Юғиһә, "Ил ҡәҙерен белмәһәң - башыңды юғалтырһың, ер ҡәҙерен белмәһәң - ас ултырырһың".

"Ата-әсәһен тыңлаған - әҙәм булған, тыңламаған - әрәм булған". "Ата-әсәһен хурлаған үҙен юҡҡа сығарған". Шуға ла "Ата-әсәңә ни ҡылһаң, үҙең дә шуны күрерһең".

"Ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ - егетлек, ә уңғанлыҡ һәм матурлыҡ - ҡыҙ сифатылыр".

"Белгән белеменән таяныр, белмәгән беләгенә таяныр". "Беләге йыуан берҙе йыҡһа, белеме булған меңде йығыр".

Тормошто хеҙмәттән башҡа күҙ алдына килтереүе ауыр. "Хеҙмәте барҙың хөрмәте бар", - ти халыҡ та.

Әхлаҡлы, ҡаты ихтыярлы һәм оҫҡор ынтылышлы булыу - һәйбәт ғәҙәттер. "Ихтыярлы кеше - иғтибарлы кеше, ихтыярһыҙ - юҡ кеше". "Кеше булыу ҡыйын түгел, кешелекле булыу ҡыйын".

Бармаҡтар тиң булмағандай, әҙәм менән әҙәм дә тиң түгел. Изгелек баҡсаһынан ҡыуылған, яҡшылыҡты белергә теләмәгән кешеләр менән дуҫлашма. Улар дуҫлыҡҡа лайыҡ түгел. "Яҡшы әҙәм билдәһе - асыу менән үсе юҡ". "Асыуыңды сабырлыҡ менән һыуындыр". "Асыу - дошман, аҡыл - дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш".

"Ололарҙы ололаһаң, ололарҙар үҙеңде". "Оҫта барҙа ҡулыңды тый, сәсән барҙа телеңде тый". "Өлгөлө һүҙҙең дә үлсәүе була, уйлап һөйлә һәр ерҙә". Туған тел яҙмышы - халҡың яҙмышы бит ул. Ғаиләгеҙҙә балағыҙ телен туған телендә асһын, юғиһә, балағыҙҙың кешелек хоҡуғын боҙаһығыҙ. Бер-берегеҙгә тел ярҙамы, ҡул ярҙамы күрһәтеп, милли берҙәмлекте нығытайыҡ. Уяу, һиҙгер, һаҡ булайыҡ, башҡорттоң быуаттар һуҙымында ҡалыплашҡан юғары әхлаҡи ҡағиҙәләрен онотмайыҡ.

Киләсәк тормошобоҙҙоң бәхетле булыуы беҙҙең үҙебеҙгә ҡайтып ҡала. Бәхетте беҙ, үҙебеҙ бер булып, һандалда сүкеп ҡуйорға тейешбеҙ. Ул еңел генә бирелмәй. Уны эҙләргә, ысын бәхет өсөн көрәшергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ололар һүҙендә быуаттар буйы тупланған халыҡ аҡылы, тос фекер, йәштәр өсөн фәһем ятыр. Тик уларҙы тыңлаусылар һәм ишетә белеүселәр генә булһын. Остаздың һүҙен бөгөн бәхет дилбегәһен үҙ ҡулына алырға йыйынған һәр кем күңел түренә һалып ҡуйғандыр, тип ышанайыҡ. Йә, һүҙҙе тағы кем дауам итә?**

✓ *Яҡташыбыҙ, командир, офицер, ордендар кавалеры, милләтен Наполеонға ҡаршы яуҙа данлаусы Абдулла СураҒоловтың исеме хөрмәткә һәм йәш быуындың белеүенә, ентекле өйрәнеүенә лайыҡ.*



*ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!*

# ПОХОД СТАРШИНАҺЫ АБДУЛЛА СУРАҒОЛОВ



## Уның дворянлыҡ титулы уландарына ла тапшырылған

**Беҙҙең данлы яҡташыбыҙ, 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла СураҒолов хаҡында һүҙҙе дауам итәбеҙ.**

Шулай итеп, 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла Сураҡолов армияның 1813 йылдың 31 октябрендә сығарылған 85-се һанлы бойороғо буйынса "За сражение под Лейпцигом 6-го и 7-го октября 1813 года награжден генералом Бенигсеном чином во время служения в 14-м башкирском полку, что удостоено и высочайшего утверждения, о чем объявлено инспекторскому Департаменту 29 июня [1]815 года за № 2030 для надлежащего исполнения" тигән эстәлекле класс чины менән наградлана. Был мәғлүмәттәрҙе 1818 йылғы "14-се Башҡорт полкының наградланған яугирҙары исемлеге" лә дәлилләй. Ошо урында рангтар тураһындағы Табель тәртибе буйынса беренсе класс (түбәнге) чины, йәғни 14-се класс "Табели" (фендрик, 1730 йылдан - прапорщик) дәрәжәһендәге кешегә быуындарына тапшырылыр дворянлыҡ титулы ла бирелә икәнде әйтеп китеү урынлы булыр.

Шулай итеп, үрҙә ҡарап үтелгән документтар беҙгә поход старшинаһы, 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла Сураҡоловтың Верхнеурал өйәҙе Ҡарағай-Ҡыпсаҡ олоҫона Таһир ауылы, хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Баймаҡ районы Таһир ауылы кешеһе булыуын иҫбатлай.

Ревизия теркәүҙәрендә күрһәтелгән йәше буйынса Абдулла Сураҡолов 1773 йылда тыуған һәм 1812 йылғы Ватан һуғышы осорона инде 39 йәшен тултырған. Ошо күрһәткестәрҙән самалап, яугир 1807 йылғы Пруссия походында ла ҡатнашҡандыр, тип әйтеп булалыр. Юғиһә, тәжрибәһе булмаған кешене Ватан һуғышы башланыу менән үк поход старшинаһы итеп ҡуйырҙар инеме икән? Ошо урында асыҡлап китәйек: кемдәр булған ул поход старшиналары?

Поход старшиналары Башҡорт ғәскәренең хәрби хеҙмәт алып барыуға яуаплы, даими административ дәрәжәһе булмаған һәм зауряд-офицер тип һаналған чиновниктары улар. Ҡаҙнанан армияның гусар полктары алған ҡәҙәре эш хаҡы алғандар, әммә денщик тотоу ярамаған. Башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең поход старшиналары кантон начальниктары тарафынан кантонға 2-3 кеше һанында билдәләнгән һәм Ырымбур хәрби губернаторы менән раҫланған. Төп эштәре командаларҙы хеҙмәткә ебәреп һәм ҡайтарып тороу булған.

Ә. Н. Усманов менән Ә. З. Әсфәндийәровтарҙың тикшеренеүе күрһәтеүенсә, А. Сураҡолов үрҙә әйтелгән наградаларына өҫтәп, ике тапҡыр 4-се дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә. 1821 йылда инде подпоручик чинында була (13-сө класс). Сураҡоловтың был обер-офицер званиеһы хаҡында VIII ревизия теркәүҙәре материалдарында ла телгә алына.

Шул уҡ ревизия теркәүҙәре мәғлүмәттәре буйынса Абдулла Сураҡоловтың артабанғы яҙмышын да билдәләп була. 1834 йылда уға инде 62 йәш, ике ҡатыны (Итбикәгә - 50 йәш, Зөләйхаға - 30 йәш) бар. Беренсе ҡатынынан булған улдары Мөхәмәтәмин (23 йәш), ҡатыны Һыуһарбикә (26 йәш), улдары Әхмәтйән (9 йәш) һәм Әхмәтшаһ (1 йәш) менән, унан килә улдары Әбүбәкер (19 йәш), Ғүмәр (10 йәш) уның менән бер ихатала йәшәй. Ҡыҙҙары беренсе ҡатынынан Гөльямал (15 йәш), икенсеһенән Сөрөмаш (5 йәш) була. Абдулланың дворянлыҡ титулы Мөхәмәтәминенән башҡа улдарына ла күсә. Өлкәне атаһы был чинды алғанға тиклем 1811 йылда тыуып ҡалған була.

IX ревизия теркәүҙәре буйынса Абдулла Сураҡолов 72 йәшенә етеп, 1845 йылда мәрхүм булып ҡала. Артабан уның һәм уның ғаиләһе хаҡындағы мәғлүмәттәр Билал ауылы документтарында күрһәтелә. Ғаилә ысынлап та хәҙерге Баймаҡ районы Билал ауылына күсә. Шул уҡ инеш күрһәткестәре һәм архив матриалдары буйынса Абдулла Сураҡоловтың шәжәрәһе түбәндәге һыҙымда килә: Яугилде - Сураҡол - Ғабдулхалик, Абдулла, Ғәбделхәсән. Абдулланан - Әбүбәкер, Ғүмәр, Мөхәмәтәмин, Әбүбәкерҙән - Әхмәтдин, Ғүмәрҙән - Мөхәмәтхафиз, Мөхәмәтәминдән - Әхмәтшаһ, Ибниәмин, Динислам, Сөләймән. Был исемдәр аша уның бөгөнгө быуындарын табыу ауыр булмаҫтыр.

Был тикшенереү эштәре беҙгә республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихы өсөн мөһим булған шәхестең, яу батырының исемен асыҡларға булышлыҡ итте. Яҡташыбыҙ, командир, офицер, ордендар кавалеры, милләтен Наполеонға ҡаршы яуҙа данлаусы Абдулла Сураҡоловтың исеме хөрмәткә һәм йәш быуындың белеүенә, ентекле өйрәнеүенә лайыҡ. Яҡын киләсәктә уның бөгөнгө быуындары ошо данды күтәреп алыр, өҫтәмә материалдар туплар һәм олуғ шәхестең шәжәрә байрамын ойоштоҡор, тигән ышаныста ҡалабыҙ.

**Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 40-сы һанда).**

*ХАЛЫҠ ТЕЛЕНДӘ*

# ТЫҢЛАҺАҢ - ЫШАНҒЫ,

## ышанһаң - белге килә

**Ғәҙәттә, журналистың хәтер һандығында дәлилле мәғлүмәттәрҙән тыш, ышанырға йә ышанмаҫҡа ла белмәгән, әммә шундай ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс ваҡиғалар, риүәйәттәр ҙә йәшәй. Уларҙы һин артыҡ етдигә алмаҫҡа, иғтибар бирмәҫкә лә тырышаһың, тик улар ишеткән көндән алып, "Яҙ, һөйлә, башҡалар ҙа белһен!" тигән кеүек, күңелде ҡытыҡлап тик тора. Бер уйлаһаң, бындай тарихтарҙың ғүмере лә ана шул телдән-телгә күсеүҙә, һөйләнеп ҡалдырылыуҙа бит.**

### Амазонкалар һуғышы

Ырымбур педагогия университеты уҡытыусыһы Казбек Әхмәҙулла улы Әхмәҙуллиндан яҙып алынған легенда быныһы. Заманында уҡытыусыға уны Дыуан районы Ҡаранай ауылынан тыҡһан йәшлек Алмабикә инәй һөйләгән булған.

Бик күптән, хатта беҙҙең эраға тиклем, хәҙерге Ҡаранай ерлегендә төньяҡтан һәм көньяҡтан килгән ике ҡәбилә бәрелешә. Ҡәбиләнең икеһе лә тик ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына тора. Ҡайҙан килгән булғандарҙыр улар, ни өсөн тап ошо ерлекте һайлағандарҙыр, нимә бүлешкәндәрҙер - билдәһеҙ. Көньяҡтан килгән ғәскәр Эйек йылғаһының хәҙерге Әпшән ауылы урынлашҡан ерендә туҡтай. Кискә ҡарай Әйҙең уң яҡ ярына төньяҡ ҡыҙҙары армияһы килеп урынлаша. Тап ошо тәңгәлдә ике йылға килеп ҡушыла икән.

Ике яҡтағы ғәскәрҙәр ҙә төнгә усаҡтар тоҡандыра һәм эргә-тирә күҙ асҡыһыҙ һоро төтөнгә күмелә. Көньяҡ ҡәбиләһе тап ошо форсаттан файҙаланып, төтөн пәрҙәһе аҫтында таң алдынан һөжүм итә. Тегеләре аңғарып өлгөрмәй, ҡаршы яҡ йылғаны йөҙөп сығып, алышҡа ташлана. Йылға аша уҡ ямғыры яуып тора. Алыш көн оҙоно бара. Ҡылыс сыңы, уҡтар һыҙғырыуы, ҡыҙҙарҙың аяныслы ҡысҡырған тауыштары инрәтеп тора яр буйҙарын. Һуғыш ҡорола ла, һыуҙа ла бара. Ҡараңғы төшөүгә, төньяҡтар сигенергә мәжбүр була, еңеүселәр уларҙы ҡыуып китә. Төнө буйы алыш урынынан яралы ҡыҙҙарҙың ыңғырашҡан тауыштары ишетелеп тора. Иртәнсәк тә әле йылға ҡандан ҡыҙарып ята. Амазонкалар үлектәрен ерләп тормай - икенсе юлдан ҡайталармы, әллә күсеп барыуҙары шул буламы. Ауыл халҡы яуҙа ҡырылған ҡыҙҙарҙың барыһын да йыйып алып, ҡоралдары-кейемдәре менән бергә дөйөм ҡәбергә күмә.

Был тарихты һөйләгән уҡытыусы Өфөгә килгәнендә археологтарҙан, тарихсыларҙан был хәлдең ысын булыу мөмкинлеге хаҡында һораша һәм уға ыңғай яуап бирәләр. Ҡаранай ҡәберлеге булырға тейеш, тиҙәр улар, тик ҡайҙа? Әлегә тиклем был эшкә тотоноусы юҡ икән. Ә былар барыһы ла ысынға сыҡһа, ниндәй шәп ҡомартҡылар табылыр ине. Икенсе яҡтан ҡарағанда, бәлки, ерҙәгенең ерҙә ятыуы хәйерлелер. Ерҙең ҡуйынын аҡтарыу һәр ваҡыт яҡшылыҡ ҡына килтереп тормай бит. Тик ҡалайтаһың, беҙ шулай яралған, тыңлаһаң - ышанғы, ышанһаң - ҡайҙалығын белге килә шул.

Был ерлектәге халыҡ телендә бына ошондай тарихтар йәшәй. Ә һеҙҙә ниндәй тарихтар бар? Яҙып ебәрегеҙ беҙгә.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Башҡорт халҡының театр сәнғәте Бөйөк Октябрь революцияһы ҡаҙанышы булып тора. Башҡорт дәүләт академия драма театры граждандар һуғышы башында Ҡыҙыл армия частарының драма түңәрәктәренән барлыҡҡа килә. Театр менән бергә башҡорт совет драматургияһы ла үҫә. Х. Ибраһимовтың, С. Мифтаховтың, Б. Бикбайҙың, Ҡ. Даяндың ҡайһы бер пьесалары республика театрҙарында инде күптәнән бара. Һуңғы йылдарҙа К. Мәргәндең, М. Кәримдең, И. Абдуллиндың, Н. Нәжмиҙең, Ғ. Әхмәтшиндың, М. Хәйҙәровтың яңы пьесалары барлыҡҡа килде.

Башҡорт музыка сәнғәте лә яңы юлға баҫты. Һуңғы ваҡытҡа тиклем башҡорттарҙың милли музыкаһы бик бай булһа ла, бары тик халыҡ йырҙары аша ғына күрһәтелә. Башҡорттарҙың профессиональ традициялары булмай һәм уларҙың музыкаль мәҙәниәте бик йәш. Беренсе профессиональ музыканттар, башҡарыусылар һәм музыка эшмәкәрҙәре бары тик совет ваҡытында ғына тәрбиә ала. Шуға ҡарамаҫтан, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә улар ҙур уңыштарға өлгәшә.

Башҡорт опера сәнғәте 1940 йылда ҡуйылған "Һаҡмар"ҙан (М. Вәлиев) башлана. Уның артынса уҡ башҡорт милли композиторҙарының Мәскәү опера композиторҙары менән ижади хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәһендә "Аҡбуҙат" операһы (Х. Заимов, А. Спадавеккиа) һәм беренсе "Сыңрау торна" балеты (З. Исмәғилов, Л. Степанов) барлыҡҡа килә. Башҡорт композиторҙары музыкаһының характер үҙенсәлеге булып боронғо йыр стиле һәм боронғо халыҡ музыкаһы менән яңы формаларҙың берләшеүе тора. Башҡорт операһы үҫешендә яңы этап булып башҡорт композиторҙарының үҙ аллы һәм алдағы опералар менән сағыштырғанда юғарыраҡ кимәлдә ижад ителгән "Айһылыу" (Н. Пейко), "Салауат" (З. Исмәғилов), "Азат" (Р. Мортазин) опералары тора.

Башҡорт совет композиторҙары Хәбибулла Ибраһимовтың, Мәсәлим Вәлиевтың, Заһир Исмәғиловтың, Хөсәйен Әхмәтовтың, Рәүеф Мортазиндың, Таһир Кәримовтың, Нариман Сабитовтың күп кенә әҫәрҙәре халыҡ репертуарына инеп, ысын халыҡ йырҙары булып китә.

Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа Советтар Союзының тиҫтәләрсә һәм сит илдәрҙә гастролдә булған Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының, Башҡорт дәүләт филармонияһының балет труппалары ҙур уңыш ҡаҙана. Башҡорт балеты һәм халыҡ бейеүҙәре оҫталары - Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәйзи Ғәскәров, арҙаҡлы артистар: Хәләф Сафиуллин, Зәйтүнә Насретдинова, Тамара Хоҙайбирҙина, Асия Мағазова, Фәрит Йосопов, Гүзәл Сөләймәнова, Фәүзи Саттаров һ.б. киң билдәле. Бухареста уҙған IV Бөтөн донъя фестиваленең Халыҡ-ара конкурсының беренсе дәрәжә лауреаттары исеменә Мөхәммәт Иҙрисов, Мөхәммәт Шәмсетдинов һәм Әнүәр Фәхретдинов лайыҡ була.

Совет власы йылдарында милли интеллигенция вәкилдәре үҫә.

*✓ Ул шиндар монтажлау, автомобилдәр йыуыу, кер йыуыу цехы асып, 20 кешегә эш бирҙе. Ҡандракүлдә турбазалар күп, уның хеҙмәтенә ихтыяж да бар. Йәштәрҙе ошо бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡҡа ылыҡтырырға кәрәк.*



**Һәр кешенең яратып уҡыған китабы була. Максим Макарычевтың "Фидель Кастро" әҫәре сираттағы әңгәмәсемдең характеры, эшмәкәрлеге формалашыуҙа, тыуған иленең патриоты булыуҙа ҙур роль уйнаған. "Уның бала саҡта малайҙар менән мөнәсәбәте, нисек ир-ат ҡорона еткәне, нисек революционер булып киткәне, Кубаның нисек бойондороҡһоҙлоҡ яулағаны - шул процестар барыһы ла ҡыҙыҡлы итеп яҙылған. Был китап ысын мәғәнәһендә ир-егет тәрбиәләүсе әсбап", - ти РФ Дәүләт Думаһы депутаты, социология фәндәре кандидаты Рөстәм Рифат улы ИШМӨХӘМӘТОВ. Гәзит уҡыусы менән бергәләп уның тормош китабы биттәрен байҡайыҡ әле.**

# ҮҘӘК МЕНӘН вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау

## Тәү сиратта - яуаплылыҡ

Мин - уҡытыусылар династияһынан, шуға ҡан яғынан үҙемде педагог тип һанаһам да, икенсе яҡтан, Бөтә Рәсәй кимәлендә ҙур үҙгәрештәр барғанда, ситтән генә күҙәтеүсе булырға тейеш түгелмен, тип уйлайым. Шуға тормошҡа позитив ҡарарға, халыҡҡа күберәк файҙа килтерергә, улар менән күберәк эшләргә, халыҡ ышаныс белдереп, депутат итеп һайлаған икән, ышаныстарын аҡларға тырышам. Беҙҙең, башҡорттарҙың, менталитеты шундайыраҡ бит: кеше нимә тип әйтер, тибеҙ, кеше фекеренә күп иғтибар бүләбеҙ. Был сифаттар миндә лә бар һәм улар үҙенә күрә милләт алдындағы оло яуаплылыҡ сағылышы ла булып торалыр. Халыҡ бит үҙенең округынан һайланғанмы депутат, юҡмы - ҡарап тормай, мөмкинлеге сыҡҡанда һөйләшеп, проблемаларын хәл итеп ҡалырға тырыша. Красноусолда йәшәгән атай-әсәйемә ҡайтһам, беҙҙең йорт та ҡабул итеү бүлмәһенә әйләнеп китә. Ауыл биләмәләре советтары башлыҡтары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, ябай граждандар ҙа кәңәш һорап булһа ла килә. Үҙ сиратымда, проблемаларҙы төрлө кимәлдә күтәреп, уларҙы хәл итергә тырышам. Үҙидара органдарының вәкәләттәрен ҡараһаҡ, улар халыҡ мәнфәғәттәрен хәстәрләп, район советы, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай, Дәүләт Думаһы депутаттарына сығырға тейеш. Беҙ үҙ кимәлебеҙҙә мәсьәләләрҙе хәл итергә тырышабыҙ, әммә ҙур суммала аҡса талап иткән проблема булһа, уны киләсәктәге планға индерергә мөмкин. Мәҫәлән, Ғафури районының Юлыҡ ауылында Еҙем йылғаһының ярҙарын нығытырға кәрәк, сөнки һыу халыҡтың баҡсаһын өңөп инеп бара. Әле был мәсьәлә буйынса проект эшләнә. Ауырғазы районы Талбазы ауылында таҙартыу ҡоролмалары юҡ, был мәсьәләне лә федераль программаға индерергә тырышабыҙ. Күптән хәл ителмәгән проблема ул. Интернеттағы социаль селтәрҙәрҙә күберәк ҡалаларҙағы хәлдәр теркәлә: бында светофор эшләмәй, тегендәге урамда асфальт юҡ, тип яҙалар. Миңә, ауыл кешеһе булараҡ, ҡалаларҙағы проблемалар ауыл проблемалары алдына бәләкәй генә кеүек күренә. Ауылдарҙа иһә эш урындары юҡ тиерлек, эш булмағас, донъяһын бөтәйтә, өй төҙөй алмайҙар, халыҡ эсә, ир-егеттәр ғаилә ҡора алмай, үҙ-үҙенә ҡул һала йә Себергә сығып китә - бына былар бөгөн иң төп проблема!

Депутаттың исеме есеменә тап килергә, ул төрлө өлкәлә - хоҡуҡтарҙы яҡлау, инвесторҙар йәлеп итеү буйынсамы - закондар сығарыу өҫтөндә эшләргә тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, инвесторҙарҙы етәкләп килтерергә лә кәрәкмәй. Закон уларға ниндәйҙер шарттар булдырһа, шул ваҡытта инвесторҙар үҙҙәре йүгереп киләсәк. Уларҙы ситтән килтереүгә лә шикләнеп ҡарайым. Үҙебеҙҙекеләрҙе үҫтерергә кәрәк! Инвесторҙар, тип, ауыҙ тултырып һөйләһәк тә, сит илдән киләме улар, Мәскәүҙәнме, 99 процент осраҡта банктан кредит ала ла, шул аҡсаны эшкә һала. Республикалағы эшҡыуарға ярҙам итһәң, ул да шулай кредит алып, ниндәйҙер өлкәгә һала ала - бына һиңә инвестор!

## Эш юҡ икән, эшҡыуарлыҡҡа тотон!

Бер уйлаһаң, ауылдарҙа эш юҡ, тип һөйләү ҙә әллә ни дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәй ул. Туймазы районынан бер ярҙамсым булды. "Ауылға ҡайтҡы килмәй, эш юҡ, - ти бер ваҡыт. - Заводмы, берәй производствомы асһалар, шунда эшләр инем". "Ә һин үҙең үҙеңә, икенсе кешеләргә эш урыны булдыр, районыңда нимә юҡ, нимә кәрәк икәнлеген ҡара, өйрән", - тинем. Хәҙерге ваҡытта ул шиндар монтажлау, автомобилдәр йыуыу, кер йыуыу цехы асып, 20 кешегә эш бирҙе. Ҡандракүлдә турбазалар күп, уның хеҙмәтенә ихтыяж да бар. Йәштәрҙе ошо бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡҡа ылыҡтырырға кәрәк. Мәҫәлән, Бөрйән районына барғанда юлда, трасса буйындағы туҡталыштарҙа һөт, ҡаймаҡ, эремсек һ.б. һаталар. Арыраҡ барып, бер ауылға инһәң, эш юҡ, тиҙәр. "Күрше районда юл буйынса һөт ризыҡтары менән сауҙа итәләр. Киптерелгән ҡоротмо, еләкме һатырға була бит, ниңә шуны эшләмәйһегеҙ?" - тием. Бер апай торҙо ла: "Мин ғүмер баҡый мәктәптә уҡытыусы булып эшләнем, уҡыусыларым күп, миңә юл буйында ултырыуы оят", - ти. Эйе, беҙҙең менталитет шундай. Хатта уҡытыусы булмаһалар ҙа, үҙ хужалығында етештерелгән продукцияны һатырға тартына беҙҙең халыҡ. Яһалма һеңдерелгән, "байҙар - яуыз, аҡса - насарлыҡ", тигән яманаттан һаман арына алмайбыҙ.

Эшҡыуарлыҡ темаһына ҡағылғас, шуны ла әйтеп китергә кәрәк: минеңсә, бәләкәй эшҡыуарлыҡты асыу юлында чиновниктар аша үтеү кәртәһен үҙгәртеү зарур. Төрлө илдәрҙә шәхси үҙәктәр эшҡыуарҙарға ярҙам итә, теркәү үткәрә. Беҙҙә район кимәлендәге ниндәй генә чиновникка инһәң дә, танау сөйөп ултыра бит инде. Теләһә ҡайһы район хакимиәтендә ишектән инеүгә, полиция ҡаршылай. Халыҡ уларҙы күреү менән ҡурҡа башлай, сөнки, "Ҡайҙа, кемгә, ниндәй һорау менән, яҙылдығыҙмы, юҡмы?", тип төпсөнөүҙәр китә. Хакимиәттәр ниндәйҙер ябыҡ учреждение, серле хәрби объект кеүек күҙаллана. Бындай тәртиптәрҙе лә ҡайтанан ҡарау кәрәк, тип уйлайым.

## Ҡануниәт үҙгәртеү талап итә

Эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәрен мәктәптә күберәк уҡытыу ҙа һөҙөмтәле буласаҡ. Сөнки өлкән класта иҡтисадты аҙнаһына бер сәғәт уҡыталар ҙа, вәссәләм. Иҡтисад нигеҙҙәре - ул бары тик териминдар ғына. Ул бер ниндәй оҫталыҡ та, тәжрибә лә бирмәй. Шуға күрә, өлкән синыфтарҙа, бәлки, эшҡыуарҙар менән күберәк осрашыуҙар үткәрергә кәрәктер. Сөнки йәмғиәттә хоҡуҡи нигилизм көслө. Законда дөйөм тәртип яҙыла, унда яҙылған хоҡуҡтарын граждандарға нисек тормошҡа ашырыу механизмын Хөкүмәт ҡарармы, указмы, күрһәтмәме сығарып билдәләй. Райондар үҙ ерлегенән сығып, уларҙы халыҡҡа яҡынайта. Ләкин беҙҙә нисек - закондар сыға, әммә ике-өс йылһыҙ өҫтәмә закон акттары эшләнмәй, күптәренең өҫтәмә закон акттары бөтөнләй юҡ. Сөнки уларҙы эшләр өсөн тәжрибә кәрәк, тәжрибә булмаһа, өҫтәмә закон акты ла булмаясаҡ. Документтар менән эшләй башлаһаң, ошолар асыҡ күренә. Мәҫәлән, һәр райондың үҙенең уставы, норматив-хоҡуҡи, урындағы акттары бар. Уларҙы тикшереп ҡараһаң, барыһы ла бер иш, әйтерһең дә, бер-береһенән күсерелгән. Шулай уҡ һәр райондың үҙенең социаль-иҡтисади үҫеш программаһы бар. "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан бүлексәһен етәкләгәндә уларҙың һәр береһен һорап алып, танышып сыҡҡайным. Һәр ҡайһыһы реферат һымаҡ яҙылған. Уларҙы граждандарҙың сходын йыйып, халыҡ менән осрашып, һәр райондың менталитетын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, географик, иҡтисади үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшләргә кәрәк. Мәҫәлән, Финляндияла Нокия тигән бәләкәй генә ауыл бар, шул атамалы кеҫә телефондарын шундағы бәләкәй генә заводта эшләйҙәр. Беҙҙә лә шундай бәләкәй предприятиелар асып булмаймы ни? Эшҡыуарлыҡты ла төрлө яҡтан ҡарау зарур. Бөгөн традицион кәсепселектең ғүмере ҡыҫҡарып бара. Башҡортостан ауыл хужалығы төбәге булараҡ, аграр эшҡыуарлыҡ кәрәк, мәҫәлән, етештереүҙә яңы технологиялар ҡулланылған ҡортсолоҡ.

Фермерлыҡ, эшҡыуарлыҡ буйынса ҡануниәт артабан да системалы үҙгәрештәр талап итә. Яңы Рәсәй дәүләте йәш, йәшәйештең динамикаһы ҙур, бөгөнгө иҡтисади хәл-торош бер аҙна үткәс бөтөнләй икенсе төрлөгә әйләнә. Ә закондарҙы оҙаҡ йылдарҙы күҙаллап ижад итәбеҙ. Шуға күрә закондар йәшәйеш динамикаһынан арттараҡ килә. Беҙгә шул закондар буйынса 5-10 йылға алға ҡарап, саҡ ҡына диверсификация кәрәк. Әммә бөгөн быны эшләү бик ауыр. Советтар заманында биш йыллыҡтар, планлы иҡтисад булған, эш планға ярашлы алып барылған. Шул система юҡҡа сыҡҡас, бөгөн саф баҙар мөнәсәбәттәре түгел, планлы-баҙар мөнәсәбәттәре барлыҡҡа килде. Закондарҙы ошо хәлдән сығып ҡабул итергә кәрәк.

Кадрҙар мәсьәләһендә лә күсәгилешлек булырға тейеш: ололарҙа - тәжрибә, йәштәрҙә энергия күп. Шуға күрә власта күсәгилешлек булһын өсөн үҙидара органдарында йәштәргә юл бирергә кәрәк, тип уйлайым. Кадрҙар мәсьәләһе, ғөмүмән, проблема инде ул. Бөтөн ерҙә конкурс нигеҙендә эшкә алған кеүектәр, һөҙөмтәлә барыбер танышлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ үҙ һүҙен итә. Бәлки, шундай күренештәргә юл ҡуймаҫ өсөн Рәсәй Федерацияһында кадрҙар сәйәсәте тураһында закон әҙерләү ҙә кәрәктер?..

## Теләк булһа - эш табыла

Әлеге көндә РФ Дәүләт Думаһының энергетика комитеты ағзаһы булып торам һәм аҙ дебитлы (ярлыланған) скважиналар мәсьәләһе менән шөғөлләнәм. Башҡа илдәрҙең тәжрибәһен ҡараһаҡ, бәләкәй һәм урта бизнес та ошо өлкәлә эшләй. Нефть крайы булараҡ, ошо өлкәлә урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереп ебәрһәк, яҡшы буласаҡ. "Башнефть" - ул монополист, уға бындай скважиналарҙа эшләү файҙаһыҙ. Ә урта һәм бәләкәй бизнес өсөн - файҙалы. Шуларҙы эшҡыуарҙарға эшкәртеүгә биреп, льготалы һалым шарттары булдырһаҡ, беренсенән, республика бюджетына күберәк килем инер ине. Икенсенән, яңы эш урындары буласаҡ. Мәҫәлән, Ғафури районын алһаҡ, Юлыҡ ауылында бер ҙур сығанаҡ бар. Разведка үткән, әммә унда бер кем дә эшләмәй. Бындай урындарҙа киң ҡоласлы эшмәкәрлек алып барыу кәрәкмәй ҙә, ул экологияға зыян

*Эшҡыуарлыҡ темаһына ҡағылғас, шуны ла әйтеп китергә кәрәк: минеңсә, бәләкәй эшҡыуарлыҡты асыу юлында чиновниктар аша үтеү кәртәһен үҙгәртергә кәрәк. Төрлө илдәрҙә шәхси үҙәктәр эшҡыуарҙарға ярҙам итә, теркәү үткәрә. Беҙҙә район кимәлендәге ниндәй генә чиновникка инһәң дә, танау сөйөп ултыра бит инде. Теләһә ҡайһы район хакимиәтендә ишектән инеүгә, полиция ҡаршылай. Халыҡ уларҙы күреү менән ҡурҡа башлай, сөнки "Ҡайҙа, кемгә, ниндәй һорау менән, яҙылдығыҙмы, юҡмы?" тип төпсөнөүҙәр китә. Хакимиәттәр ниндәйҙер ябыҡ учреждение, серле хәрби объект кеүек күҙаллана. Бындай тәртиптәрҙе лә үҙгәртергә кәрәк, тип уйлайым.*

# КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨП, үҙ сиратын көтә

килтерә, ә аҙ дебитлы бәләкәй скважиналар асырға мөмкин. Уйлап ҡараһаҡ, нефть өҫтөнән йөрөйбөҙ, эш юҡ тип ҡаңғырабыҙ. Ауыл ерендә бесән эшләп, май-ҡаймаҡ һатып ҡына түгел, аҙ дебитлы скважиналар асып та аҡса эшләргә була бит. Әлбиттә, бында "Башнефть" ярҙам итергә тейеш. Унын ярҙамыһыҙ был эште тормошҡа ашырыу мөмкин түгел. Төрлө техник проблемаларҙы бәләкәй, урта бизнес үҙе генә хәл итә алмай. Әлеге ваҡытта республикала 65 аҙ дебитлы скважина эшләмәй. Күбеһенең вышкалары тора, кнопкаға баҫ та, эшләй ҙә башла. Әммә уларға "Башнефть" ваҡыт әрәм итеп тормай. Шуларҙы конкурс ашамы, берлектәге предприятие эшләпме, бизнесҡа бирергә кәрәк.

Татарстанда бындай тәжрибә бар, уларҙың 40-тан ашыу шундай урта һәм бәләкәй предприятиеһы эшләй. Улар был эште беҙгә ҡарағанда алданыраҡ башланы. Был республикаға 10-15 йылға ҙур маҡсат булып тора. Уны нисек тормошҡа ашырыу механизмын әҙерләү Хөкүмәт елкәһенә ята. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән күптән түгел ошо проблема буйынса осрашып һөйләшкәйнем, ул вышкалар булған муниципаль райондар менән "Башнефть" берләшеп, берлектәге предприятиелар асыуҙы хуплай. Ә мин райондар менән генә түгел, шәхси инвесторҙар менән дә эшләргә кәрәк, тип уйлайым. Сөнки райондарҙың үҙҙәренең вәкәләттәрен тормошҡа ашырырға ла аҡсалары юҡ, ә предприятие асҡас, устав капиталына аҡса һалырға кәрәк.

Өфө дәүләт нефть техник университетында - профессорҙар, Мәскәүҙә Машина төҙөүселәр союзы, нефть-газ сәнәғәтселәре менән түңәрәк ҡор үткәрҙем, ғалимдар ҙа, Нефть-газ сәнәғәтселәре союзы президенты ла идеяны хупланы. Өфөлә үткән "Газ. Нефть. Технологиялар - 2015" күргәҙмәһендә лә был мәсьәләне күтәрҙек. Әлеге ваҡытта һалым льготаһына ҡағылышлы федераль ҡануниәткә үҙгәрештәр әҙерләйбеҙ, шулай уҡ тармаҡ ҡануниәтен дә әҙерләү зарур. Шул ваҡытта был идеяны тормошҡа ашырыу мөмкин буласаҡ. Сит илдәрҙе ҡараһаҡ, уларҙа урта, бәләкәй эшҡыуарлыҡтың ошо тармаҡтағы өлөшө 40 процентҡа тиклем етә. Өҫтәүенә был предприятиелар төбәктең генә түгел, райондың да бюджетын тулыландырасаҡ. Әле ер аҫты байлыҡтары тураһындағы федераль законға ярашлы, үҙебеҙгә бер нәмә лә ҡалмай, районға аҡса килмәй. Ә халыҡ, ерҙең елеген һуралар, исмаһам, мәктәпкә ярҙам итһәләр йәки, ҙур машиналары менән йөрөйҙәр, юлды ремонтлаһалар ине, тип мөрәжәғәт итә. Юлдан нефтселәрҙең ауыр транспорты йөрөй, ә ремонт эштәрен муниципалитет башҡарырға тейеш. Был дөрөҫ түгел, әлбиттә.

## Тормош мәктәбе, тормош һабаҡтары

Хеҙмәт юлымда ҙур коллективтар менән эшләү үҙе бер тормош мәктәбе булды. Бәләбәй башҡорт гимназияһына директор итеп тәғәйенләнеү ҙур яуаплылыҡ йөкмәтте. Сөнки был белем усағы көнбайыш форпост булып, республика етәксеһенең даими контролендә торҙо. Шул яҡтарҙағы райондарҙан һәләтле балаларҙы, республика кимәлендә һәләтле педагогтарҙы йыйып алыу кеүек ҙур эштәр башҡарылды. Ул ваҡытта бының ниндәй һабаҡ икәнлеген аңлап та етмәгәнмендер, бәлки. Шул осорҙа фән кандидаты дәрәжәһен яҡлауға өлгәштем, "Рәсәйҙең иң яҡшы директоры" исемен алдым. Етәксе, шәхес булараҡ формалашыуҙа Бәләбәй гимназия-интернатында эшләгән йылдарым яңы офоҡтар асты, ҙур тупһаға баҫтырҙы. Директор булып эшләгәндә етәкселәргә хат яҙып, артынан йөрөп, 20 уҡытыусыға бушлай фатирҙар



**_Тел мөхите булһа, тәрбиә эше лә бара, ә административ рәүештә мәжбүр итеп түгел. Шуға коллективҡа эшкә йәш уҡытыусыларҙы йыйып алдым, улар тәрбиә эштәрен ҡыҙыҡлы итеп ойошторорға өйрәнде. Тора-бара сыуаш балалары ла башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай башланы. Рус балалары ла ҡыҙыҡһынып тел өйрәнде. Туған телде китаптан уҡып, грамматиканы өйрәтеп кенә бала күңеленә һалып булмай. Төрлө мәктәп үҙенсә юлын табырға тейеш. Беҙ, мәҫәлән, йәйгеһен халыҡ-ара лагерь ойошторҙоҡ. Голландиянан, Англиянан балалар һәм тәрбиәселәр килде. Балаларыбыҙ инглиз телен уҡытыусы менән түгел, ә ошо телдә һөйләшеүселәр менән аралашып өйрәнде. Аралашыу ике телдә барҙы - йә инглизсә, йә башҡортса. Тәржемәләр туранан-тура башҡортсаға әйләндерелде._**

алырға ярҙам иткәйнем. Республика тарихында, моғайын, беренсе һәм һуңғы тапҡыр шундай ваҡиға булғандыр ул. Эшләгән эштәремде күреп, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан бүлексәһе башҡарма комитеты рәйесе Исмәғил Әхмәҙулла улы Ғәбитов саҡыртып алып, Бәләбәйҙән бер мандатлы округтан кандидатурамды күрһәтергә тәҡдим итте. 87 процент тауыш менән үтеп, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты булып киттем. Әйткәндәй, Исмәғил Әхмәҙулла улынан һуң "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан бүлексәһен етәкләнем. Абруйлы, билдәле сәйәсәмәндән һуң эшләүе бик ауыр булды. Тарих факультетын тамамлағас, сәйәсәтте белһәм дә, был минең өсөн ниндәйҙер яңы өлкә ине - республика кимәлендә һәр район, һәр ҡала, һәр урындағы бүлексә менән эшләргә, һайлауҙар үткәрергә кәрәк. Икенсе яҡтан, еңел булды - остазым коллектив менән нисек эшләргә өйрәтте, үҙенең кәңәштәре менән эште нисек итеп дөрөҫ ойошторорға ярҙам итеп торҙо. Был вазифала ауыл советы депутаттарын һайлауҙан алып, Рәсәй Президенты һайлауҙарына тиклем эшләргә, тормош тәжрибәһе тупларға яҙҙы миңә.

"Берҙәм Рәсәй" етәксе партия булғас, яуаплылыҡ икеләтә ҙур, сөнки ниндәй генә программалар, закондар ҡабул ителә, улар барыһы ла ошо партия менән бәйле. Мәктәптәрҙә оптималләштереү процестары үткән ваҡытта ла, һеҙ нимә эшләйһегеҙ, тип, "Берҙәм Рәсәй"гә мөрәжәғәт итәләр. Аңлатып ҡарайбыҙ, ул партиянан ғына тормай, башҡарма власть органынан килә, тип. Халыҡ аңында "Берҙәм Рәсәй" партияһы башҡарма власть органдары менән тиңләнә, улар ныҡ интеграцияланған. Йәғни КПСС ваҡытындағы кеүек килеп сыға, бары тик исеме генә үҙгәртелгән. Минеңсә, "Берҙәм Рәсәй" ҙә, башҡа партиялар һымаҡ, саҡ ҡына ҡырҙараҡ булырға, күберәген закондар сығарыу органдары, депутаттар менән эшләргә тейеш. Ә әлеге ваҡытта беҙҙә власть вертикале генә бар: "Берҙәм Рәсәй" тиһәк, Хөкүмәт күҙ алдына баҫа, Хөкүмәт тиһәк, "Берҙәм Рәсәй" тип аңлайбыҙ. Яңы, төрлө ҡараш, төрлө фекер, дискуссия кәрәк, ә ул кәмегәндән-кәмей. Шуға күрә, "Берҙәм Рәсәй" партияһы ла коммерция булмаған йәмәғәт ойошмаларына булдырылған шарттарҙа эшләргә тейеш, тип уйлайым.

## Ҡаршылыҡ юҡ, урындарҙа эшләйек

Элек һәр бер мәктәптә синыф етәксеһе уҡыусыларҙың йәшәү шарттары, ғаиләнең нисек йәшәүен тикшерә, ҡарай торғайны, ғаилә менән бәйләнеш нығыраҡ ине. Әлеге ваҡытта күп ата-әсә тәрбиә биреүҙе мәктәпкә генә һылтай ҙа ҡуя. Әлбиттә, мәғариф системаһында бөгөн белем биреү беренсе урында тора, әммә тәрбиә ата-әсәләр менән берлектә алып барылырға тейеш. Әгәр ғаиләлә тел мөхите булмаһа, туған теленә һөйөү тәрбиәләнмәһә, ата-әсә үҙе башҡортса һөйләшмәһә, туған телде мәктәптә генә өйрәтеү һөҙөмтә бирмәйәсәк, балала, туған тел, тигән тойғо булмаясаҡ, ул уны сит тел кеүек ҡабул итәсәк. Илһөйәрлек, тыуған ерендә яратыу тойғоһон да ата-әсә балаһына бәләкәй саҡтан, мәктәпкә барғанға тиклем һалырға, һеңдерергә тейеш.

Бәләбәй гимназияһында эш башлағанда Беренсе сентябрҙә үк: "Ошо көндән башлап һәр уҡыусы "Һаумыһығыҙ!" тип һаулыҡ һораша, бөтөн тәрбиә эштәре башҡорт телендә алып барыла", - тигән талап ҡуйҙым. Тел мөхите булһа, тәрбиә эше лә бара, ә административ рәүештә мәжбүр итеп түгел. Шуға коллективҡа эшкә йәш уҡытыусыларҙы йыйып алдым, улар тәрбиә эштәрен ҡыҙыҡлы итеп ойошторорға өйрәнде. Тора-бара сыуаш балалары ла башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай башланы. Рус балалары ла ҡыҙыҡһынып тел өйрәнде. Туған телде китаптан уҡып, грамматиканы өйрәтеп кенә бала күңеленә һалып булмай. Төрлө мәктәп үҙенсә юлын табырға тейеш. Беҙ, мәҫәлән, йәйгеһен халыҡ-ара лагерь ойошторҙоҡ. Голландиянан, Англиянан балалар һәм тәрбиәселәр килде. Балаларыбыҙ инглиз телен уҡытыусы менән түгел, ә ошо телдә һөйләшеүселәр менән аралашып өйрәнде. Аралашыу ике телдә барҙы - йә инглизсә, йә башҡортса. Тәржемәләр туранан-тура башҡортсаға әйләндерелде. Мәктәп етәкселегенән, уҡытыусынан, ата-әсәнән күп нәмә тора. Дәүләт кимәлендә, әлбиттә, стратегик документтар, программалар булырға тейеш. Ҡануниәт яғынан бөтөн шарттар бар, бары тик эшләргә генә кәрәк. Гел дәүләткә генә ҡарап ултырып булмай, ошо закондар нигеҙендә урындарҙа эшләү зарур. Ил башлығы В. Путиндың ШОС, БРИКС дәүләттәре башлыҡтарының саммиты ваҡытында: "Рус телен һәм башҡорт телен өйрәнегеҙ", - тигән һүҙҙәрен барыһы ла тиҙ генә онотто ла ҡуйҙы. Уны лозунг итеп күтәрергә кәрәк. Федераль кимәлдә бер ниндәй ҡаршылыҡ, кәртә юҡ. Бөтөн нәмә үҙебеҙҙән тора.

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ ***Субъекттар тиң хоҡуҡлы булырға тейеш. Шуға беҙгә, үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәьмин иткән төбәк булараҡ, вәкәләттәр күберәк бирелеп, килем дә күберәк ҡалһа, ғәҙел буласаҡ.***



*СУВЕРЕНИТЕТ ЕМЕШТӘРЕ*

# ҮҘЕБЕҘ БУЛЫП ҠАЛДЫҠ



**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:**

- Ул саҡта Башҡортостанда барған ваҡиғаларҙы ҙур илебеҙҙәге хәлдәрҙән тыш аңлауы ауыр, хатта мөмкин дә түгел ине. Шуға ла хәтеремдән һуңғы 30 йыл эсендә булып үткән тарихи күренештәрҙе барлайым. Уларҙан, кисәктәрҙән, тотош бер картинаны күҙ алдына баҫтырырға тырышам. Шулай итеп, бынан 30 йыл әүәл, 1985 йылда, СССР-ҙа демократик үҙгәрештәр башланды. Әммә ул саҡта беҙҙең беребеҙ ҙә алда беҙҙе ниҙәр көткәнен аныҡ ҡына күҙаллай алмай ине. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, тәүге ирекле һайлауҙар булып үтте. СССР-ҙың тәүге президенты һайланды. Хәтеремдә, мин хатта транспортта китеп барғанда әйтеп аңлата алмаҫлыҡ кинәнес менән М.С. Горбачевтың сығыштарын тыңлай торғайным. Әммә күп тә үтмәй, 1991 йылда, илебеҙҙә путч булды. Горбачев властан китте, сөнки Совет дәүләте емерелеп төштө. Халыҡ хужалығы тарҡалды. Халыҡ йыйған барлыҡ аҡсаһын юғалтты. Шул иҫәптән, минең атайымдың да ғүмер буйы йыйып барған аҡсаһы "янды". Ашығыс рәүештә илдең яңы Конституцияһы ҡабул ителде. Чечнялағы тәүге һуғыш, дәүләт милкен хосусилаштырыу, Ельциндың икенсе срокка һайланыуы, дефолт, Чечнялағы икенсе һуғыш, Б.Н. Ельциндың властан китеүе, В.В. Путиндың килеүе, губернаторҙарҙы һайлап ҡуйыуҙың туҡтатылыуы, Путиндың икенсе срокка һайланыуы, илдәге террор күренештәре, Д. Медведевтың идара итеүе һәм Путиндың власҡа янынан ҡайтыуы... Беҙ барыбыҙ ҙа был ваҡиғаларҙың тере шаһиттары.

Эйе, бынан 30 йыл элек беҙ ысын халыҡ власы хаҡында хыялландыҡ (демократия грек телендә халыҡ власы тигәнде аңлата). Хыялдарыбыҙ тормошҡа аштымы һуң? Бойондороҡһоҙ власть тармаҡтары - үҙаллы парламент, суд, киң мәғлүмәт саралары, сәйәси монополизмдан азатлыҡ, бер генә идея, фирҡә диктатынан ҡотолоу... Ниндәй үҙгәрештәргә эйә беҙ бөгөн? Үҙгәрештәр булмай икән, торғонлоҡ башлана. Ә бөгөнгө көн фрагменттары ниндәй картинаны тыуҙыра? Һәр кем үҙе яуап эҙләһен, үҙе башын эшләтһен. 2011-2012 йылдарҙа Болотный майҙанындағы, Сахаров проспектындағы митингылар, сит ил агенттарына һунар, губернаторҙарҙың һайлап ҡуйыла башлауы, һалҡын һуғыш, Ҡырымды Рәсәйгә ҡушыу, санкциялар, сит ил тауарҙарын үҙебеҙҙекенә алыштырыу, Украиналағы һуғыш, Б.Немцовтың үлтерелеүе, Көнсығышҡа йөҙ менән боролоу, хәҙер килеп, Сүриәләге хәлдәр...

Ошо ваҡиғалар фонында үҙаллығыбыҙ емештәре хаҡында эйфорияға бирелеп артыҡ бер ни ҙә әйтә алмайым. Шуныһы ҡыуаныс: халҡыбыҙ йәшәй. Беҙ һаман да үҙебеҙ булып ҡала алдыҡ. Йәшәүгә ынтылышыбыҙ тағы ла ныҒыраҡ көсәйҙе. Ошоһо, бәлки, иң мөһимелер...

## Үҙебеҙлек

*"Беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел, беҙ бары башҡорттар".*
*Башҡорт Шураһының 1-се фарманынан*

*Ҡыҙылдар ҙа түгелбеҙ,*
*Аҡтар ҙа беҙ түгелбеҙ.*
*Башҡорттар беҙ, башҡорттар!*
*Беҙ һаман да үҙебеҙ!*
*Үҙгәрешһеҙ был оран,*
*Һаман да ул бөгөнгө.*
*Килмәй бер ҙә өмөттән,*
*Үҙебеҙҙән төңөлгө.*
*Азат түгел беҙ һаман,*
*Ирекле ил түгелбеҙ.*
*Хыялыбыҙ - азатлыҡ!*
*Маҡсатыбыҙ үлемһеҙ.*
*Аҡ яклы ла түгел беҙ,*
*Ҡыҙыл яклы түгелбеҙ.*
*Үҙебеҙ яклы бары беҙ!*
*Бөлөнгәс бар, бүленгәс,*
*Бүлдермәйбеҙ милләтте,*
*Беҙ һаман да бер бөтөн.*
*Беҙ һаман да башҡорттар!*
*Булмай беҙҙе әркөтеп.*
*Һаман да бит, һаман да*
*Кәрәк оран һалырға:*
*Яралғанбыҙ донъяға*
*Үҙебеҙ булып ҡалырға!*
*Үҙе була алғанға*
*Тейеш иң ҙур алҡыштар.*
*Халыҡ итеп тыуҙырған*
*Хоҙай яклы башҡорттар.*

# ҮҘӘК МЕНӘН КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨП,

## вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау үҙ сиратын көтә

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

### Сифат өҫтөнөрәк

Бөгөн мәғариф өлкәһендәге оптималләштереү процестарына тәрлә ҡараш йәшәй. Мин уны тәбиғи хәл тип ҡабул итәм. Уйлап ҡараһаҡ, халыҡтың ихтыяжы ҙурая, күбәйә һәм ул көндән-көн арта бара. Хәҙер ауылда ла халыҡ кеҫә телефондары аша аралаша. Ауылда интернет, таҙа һыу, инфраструктура булырға, матур юлдарҙан матур машиналар йөрөргә тейеш. Шуға һәр кем үҙенә уңайлы мөхит эҙләй. Тормош сифаты яғынан да көн һайын талаптар күбәйә. Ә дәүләт ошо талаптарҙы тормошҡа ашырырға өлгөрә алмай. Бөгөн сифатҡа ынтылыш ҙур. Мин ауылда йәшәһәм, балаларымды ҡайҙа уҡытыу яҡшыраҡ икәнен ҡарап, уларҙы гимназия-интернатҡа урынлаштырыр инем. Әлбиттә, интернатта йәшәүе ҡыйын, әммә белем биреү учреждениеһы сифат яғынан күпкә юғары. Артабан бит уға БДИ-ны уңышлы тапшырырға, ҡайҙалыр юғары белем биреү учреждениеһына инергә кәрәк - атаәсәләр шуны алдан күҙаллай. Күптәр ауылдарҙа мәктәптәрҙең ябылыуына зарлана. Оптималләштереү процесын мин икенсе формала ойоштороу - мәктәптәрҙе филиал итеп ҡалдырыу йәки башланғыс мәктәпкә күсереү тип ҡарайым. Был хәл демография менән дә бәйле. Уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә лә Республика Башлығы, демографик кәмеү буласаҡ әле, тип белдерҙе. Хәҙер балалар бакҫалары тәҙәйбеҙ, аҙаҡ уларҙың күбеһе буш торасаҡ. Шуға, күп мәсьәләгә төплө, проблемаға иҡтисади яҡтан да ҡарау зарур. Әлбиттә, класта биш бала ултырһа, мәктәпте ябыу отошло, сөнки унда бит директор ҙа, завуч та, башҡа персонал да кәрәк. Йәғни коллектив уҡыусыларға ҡарағанда ике тапҡырға күберәк килеп сыға. Икенсе яҡтан, белем биреү сифатын да онторға ярамай.

Бында ла, баяғы әйткәнемсә, хоҡуҡи нигилизмға килеп төртөләбеҙ. Закон буйынса, мәктәптәрҙе ябыр алдынан граждандар сходы үткәрергә кәрәк. Әммә активистар ни өсөндөр төп мәктәпте филиалға әйләндергәндә шымып ҡалалар ҙа, улар филиал булып ҡалып йәки башланғысҡа әйләндерелеп, һуңынан ябылғас, шау-шыу күтәрәләр, халыҡ фекере һанға һуғылмай, тип, халыҡтың башын бутайҙар. Артабан инде халыҡ хөкүмәткә, етәкселеккә ышанмай башлай. Әммә хоҡуҡи яҡтан ҡараһаҡ, мәктәп, гимназия - ул юридик шәхес, айырым ойошма. Уның үҙенең уставы, ойоштороусыһы бар. Ә инде ниндәйҙер белем усағы икенсе мәктәптең филиалы итеп ҡалдырыла икән, артабан уны ябыу-япмау тураһында граждандарҙың сходы түгел, ә ойоштороусы хәл итә. Тимәк, мәктәпте филиал итеп ҡалдырыу тураһында һүҙ сыҡҡанда сход ҡарары хәл иткес ролде уйнай, ә һуңынан түгел. Был йәһәттән законға үҙгәрештәр индереү кәрәк һәм был мөмкин, тип уйлайым.

Әлбиттә, Башҡортостандың мәғариф системаһында бик ҙур етешһеҙлектәр бар. Мәҫәлән, былтыр дәреслектәр, уҡыу әсбаптары Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына тап килмәй, тип табылды. Был - тотош мәғариф системаһының ғәйебе. Ә система ентекле, ҙур концепция-программаһы, пландары булған ваҡытта ғына эшләй. Ағым буйынса барыу түгел, ә кәмендә 20 йылды күҙаллап эшләнгән программа булһа, бындай аңлашылмаусылыҡтар булмаҫ ине, тип уйлайым. Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты ректоры булып эшләгән ваҡытта шундай план ғилми советта ҡабул ителгәйне. Әле шундай стратегик план юҡлығы үҙен һиҙҙерә. Үкенескә күрә, мәғариф министры урынбаҫары булып эшләгән Артур Шәйхетдин улы Сурин арабыҙҙан иртә китеп барҙы. Ошо мәсьәләләрҙең күбеһен ул үҙ контролендә тота ине. Яңы кешеләр ошо стратегияның үҙәген күрмәгәндәр, ахыры, тип уйлайым. Әммә уны йәйләп хәл итергә була.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына килгәндә, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты ректоры булғанымда федераль кимәлдә эшсе төркөмгә индем, ошо стандарттарҙы әҙерләүселәрҙең береһемен тип әйтә алам. Стандарттарҙың иңғай яғы: беренсенән, белем биреүҙең йөкмәткеһе, компетенциялар (компетенция - уҡыусылар хәбәрҙар булған һәм эш тәжрибәһе туплаған билдәле белем, оҫталыҡ һәм тәжрибә берлеге) формалаштырыу. Мәҫәлән, шул уҡ эшҡыуарлыҡҡа әҙерләүҙ. Элек был беҙҙең етешһеҙлек ине. Уҡытыусылар яңы методика буйынса эшләргә тейеш. Элек уҡытыусы-уҡыусы кеүек кенә ҡабул итһәк, хәҙер улар берҙәм мәғариф киңлегендә эшләргә тейеш һәм бөтөн эшмәкәрлек һөҙөмтәгә йүнәлтелгән. Быға тиклем иғтибар эш барышына бирелә ине. Әлеге ваҡытта ошо уҡыту барышын аныҡлаштырыу, шул уҡ ваҡытта балаларҙың аңында күберәк компетенциялар формалаштырыу мөһим булып тора. Икенсе яҡтан, күп уҡытыусылар Федераль дәүләт мәғариф стандарттарының нимә икәнен, уның әһәмиәтен үҙҙәре лә аңлап етмәй. Йәйләп яңы быуын уҡытыусылары килер, йәйләп үҙгәрештәр булыр, тип уйлайым. Стандарттарҙың кире яғына килгәндә, беҙҙең мәғариф барыбер ҙә традицион булырға тейештер. Сөнки традицион мәғариф системаһы шәхесте формалаштырыуға, тәрбиәгә, патриотик тәрбиәгә күберәк иғтибар бирә ине, ә әлеге ваҡытта шәхесте түгел, уның компетенцияларын формалаштырыу төп урында тора.

### Шәхестәребеҙҙе үҫтерәйек

Беҙҙең етди милли идея юғалтылғанмы, әллә бөтөнләй юҡмы - аңлашылмай. Кавказ халыҡтарын ҡараһаҡ, улар Ислам дине менән ситләшмәгән, Ислам уларҙы көсәйтә, милләт һанын арттыра һәм балаларға күберәкте бирә. Чечен республикаһы башлығы Рамзан Ҡадиров, мәҫәлән, мосолман кейемендә йөрөп, үҙе өлгө күрһәтә. Шулай уҡ уларҙың яҡташлыҡ тойғоһо ла үҫешкән, бер-береһенә ныҡ ярҙам итәләр. Беҙ шундай туғанлыҡ традицияларыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ. Әлбиттә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты был йәһәттән күберәк эшләргә тейеш. Тиҙҙән үтәсәк Ҡоролтайҙың сираттағы съезында, бәлки, стратегия яғынанмы, идеология яғынанмы, ниндәйҙер ҡарар ҡабул ителер тип ышанам.

Ә милләтте ишәйтеү мәсьәләһе бик ҡатмарлы, сөнки бөгөн ҡатнаш никахтар күбәйә. Әммә шунда ла балаларыбыҙға телде ныҒыраҡ өйрәтергә, рух һалырға тырышырға тейешбеҙ. Милләт даны шәхестәрҙән килә. Беҙҙең Салауат Юлаевыбыҙ, генерал Шайморатовыбыҙ, совет йылдарындағы ҙур етәкселәребеҙ бар. Бөгөн дә шәхестәребеҙҙе күтәрергә, күрһәтергә оялмаҫҡа кәрәк. Ләкин кемдер күтәрелә башлаһа, уға төрлө яҡтан негатив яуҙырыла. Киреһенсә, үҙ шәхестәребеҙҙе үҙебеҙ үҫтермәһәк, ситтән килеп берәү ҙә күтәрмәйәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында ҡағылған темаларҙың барыһын да гәзит биттәренә сығарыу мөмкин түгел, әлбиттә. Әммә республиканың Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүенә 25 йыл тулыу алдынан Рөстәм Рифат улының түбәндәге һүҙҙәрен иғтибарһыҙ ҡалдырыу ярамай: "Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы составында субъект булараҡ йәшәй, беҙгә ҡабаттан үҙәк менән килешеү төҙөп, вәкәләттәрҙе яңынан ҡарау ҙа үҙ сиратын көтә. Бәлки, әле ваҡыты түгелдер, әммә тотороҡло мәлде табып, быны мотлаҡ тормошҡа ашырыу зарур. Субъекттар тиң хоҡуҡлы булырға тейеш. Шуға беҙгә, үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәьмин иткән төбәк булараҡ, вәкәләттәр күберәк бирелеп, килем дә күберәк ҡалһа, ғәҙел буласаҡ. Был нефть буйынса ла, республиканың ҡаҙылма байлыҡтарын файҙаланыу буйынса ла, финанс мәсьәләләре буйынса ла шулай булырға тейеш. Беҙгә махсус программа буйынса йәштәрҙе ситтә уҡытып, һуңынан уларҙы кире ҡайтарыу буйынса алда барған Ҡаҙағстандан өлгө алырға кәрәк. Рәсәйҙә яҡуттарҙың йәш быуынды үҫтереү фонды бар. Шундай программаларҙы өйрәнеп, үҙебеҙҙең ерлектә файҙаланыу ҡамасауламаҫ..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

**Республикабыҙҙағы милли театрҙарҙың бер ҡасан да үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап ятҡаны юҡ, географик яҡтан сәхнәләре төрлө урында булһа ла, хәл ителәһе, фекер ҡораһы мәсьәләләре бер булғангамы, Өфөнән ситтә ятҡан театрҙарҙа эшләүселәрҙе баш ҡалала йыш осратырға була. "Ижадхана"ның бөгөнгө геройының исеме лә рухи мәркәзебеҙҙең сәнғәт ҡорҙарында йыш яңғырай һуңғы осорҙа, сөнки ул бына ике йыл рәттән режиссерҙарҙы һәм драматургтарҙы бер үҙәккә йыйып, әүҙем эш алып барыу менән шөғөлләнә. Салауат дәүләт драма театрының баш режиссеры Зиннур Фәрит улы СӨЛӘЙМӘНОВ менән әңгәмәбеҙ ошо юҫыҡта булыр.**

# КӨНДӨҘ УТ ЯНДЫРЫП...

## драматургтар эҙләйбеҙ



### Юлдар театрға илтте...

Сәнғәткә тоғро булған ғаиләлә үҫтем мин. Ҡартатайым Әҳлей Фазлетдин улы Сөләймәнов Ейәнсура районыныҡы, һуғыштан һуң Баймаҡҡа килеп урынлашып, айырыуса мөһим эштәр буйынса следователь булып эшләгән. Тик сәнғәткә һөйөүе тынғылыҡ бирмәгән, ошо юлдан киткән. Районда ике музыка мәктәбе астырыуға өлгәшә, бөгөн уларҙың береһе - Иҫке Сибай ауылындағыһы һаман да эшләй һәм ҡартатайымдың исемен йөрөтә. Ҡурайҙа, скрипкала, думбырала, мандолинала һәм башҡа күп инструментарҙа уйнаны. Өйҙәре төрлө музыка ҡоралдары менән тулы булып хәтерҙә ҡалған. Ҡартәсәй матур йырлай, әле лә уны йырлатып алабыҙ йыйылған саҡта. Атай-әсәй ҙә йырлай, шуға ла бала саҡтан йыр-моң араһында үҫкән кеше мин. Сәнғәткә ылығып китеүемә лә ошолар сәбәпселәр инде.

Шулай ҙа 10-сы класты тамамлағас, юғары уҡыу йортоноң тарих бүлегенә уҡырға инә алмағас, һөнәрселек училищеһында ашнаҡсыға уҡып алдым. Ул саҡта Баймаҡ район мәҙәниәт йортонда Земфира Айрат ҡыҙы Алтыншина режиссер булып эшләй ине, уның кәңәшен тотоп, Өфө сәнғәт академияһына уҡырға инеп, актер һөнәрен үҙләштерҙем. Уҡытыусыларыма рәхмәтлемен, һөнәр серҙәренә төшөндөрҙөләр, тел байлығын ҡулланырға, матур итеп һөйләшергә өйрәттеләр, сәнғәткә һөйөү уяттылар, ошонан һуң башҡа юлдар эҙләмәнем, быныһы тап минеке ине. Тик минең баштан уҡ режиссер булыу теләге бар ине. Курсыбыҙ менән Стәрлетамаҡ театрына эшкә урынлаштыҡ. Режиссерыбыҙ Гөлдәр Мозафар ҡыҙы Ильясова ике йыл үткәс, артабан мине спектаклдәр ҡуйырға дәртләндерәсәк әкиәттәр эшләргә форсат бирҙе. Шулай яйлап режиссураға аяҡ баҫтым. Вахтангов исемендәге академик театр эргәһендәге Щукин исемендәге театраль институтта Александр Поламишев, Сергей Яшин кеүек ҙур шәхестәрҙең ҡулында уҡыуы ҙур һөйөнөс булды. Арыҫлан Йәнбәков менән беренсе институтты ла бергә тамамланыҡ, Мәскәүгә лә бергә киттек. Уның менән яҡын дуҫтар булдыҡ, ғаиләләр менән аралашып йәшәнек. Дүрт йыл бергә уҡыныҡ, бар ерҙә лә белемебеҙҙең, башҡорт театр сәнғәтенең кәм түгеллеген раҫланыҡ, үҙебеҙҙе лә, халҡыбыҙҙы ла күтәрергә тырыштыҡ.

### Милли театр - ул ниндәй?

Сәхнәлә актер булып эшләп йөрөгән кешенең ҡапыл режиссураға тартылыуының сәбәптәре төрлөсә булыуы ихтимал. Тик актер һөнәрен эстән белеү режиссерға ныҡ ярҙам итә, был турала күптәрҙең әйткәне бар. Актерлыҡ мәктәбен үтмәһәм, мин бөгөнгө кеүек эшләй ҙә алмаҫ инем. Ун йыл артист булып эшләгәндә бер юлы спектаклдәр ҡуя инем, 2002 йылдан алып бөгөнгө көнгә тиклем 23 спектакль сәхнәгә сыҡҡан. Театр менән сикләнмәнем, ҙур байрамдарҙың, һабантуйҙарҙың, фестивалдәрҙең, концерттарҙың режиссерҙары булдым.

Уйлап ҡараһаң, театр сәнғәте башҡортҡа бик хуш килеп кенә торған өлкә, сөнки йырлы, бейеүле халыҡтың борон-борондан һәр сығышы үҙе бер театр булған. Халыҡ йыйындарындағы сәсәндәр әйтеше, риүәйәттәребеҙ, йолаларыбыҙ ҡасандыр иртәме-һуңмы театрға алып барып еткерерғә тейеш ине. Унан һуң, телебеҙҙең моңо бар, башҡа милләттәр: "Һеҙҙең тел йырлар өсөн генә яратылған", - тип һоҡлана. Бөгөнгө башҡорт театры рус психологик мәктәбе нигеҙенә ҡоролған. Уға нигеҙләнмәгән булһа, ул көнсығышҡа яҡыныраҡ, фольклор, йолалар нигеҙендә ҡоролор ине, моғайын. Ҡытайҙа, Японияла үҙ мөхиттәрендә барлыҡҡа килгән театрҙар кешегә бөтөнләй икенсе кимәлдә - энергиялар, символдар аша тәьҫир итә, беҙҙең театр ҙа шулайыраҡ йүнәлештә эшмәкәрлек итер ине.

Йолалар күрһәтеп кенә театр үҫешә аламы, тип йыш һорайҙар. Әлбиттә, мөмкин, беҙҙең театрҙарҙа бындай спектаклдәр ҙә күп. Йоланың бар нескәлегенә төшөнөп, профессиональ кимәлдә эшләп сәхнәгә сығарғанда, ул милли театрҙың йөҙөн билдәләрҙәй әйбер була ала. Мәсәлән, ҡаҙаҡтарҙың, яҡуттарҙың, бүрәттәрҙең милли темаларға арналған әйберҙәре бик көслө һәм улар "Алтын битлек" Бөтөн Рәсәй театр фестивалендә ҡатнашып тора. Беҙҙең башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡуйылған "Ҡара йөҙҙәр" спектакле лә быйыл "Алтын битлек"кә тәҡдим ителде. Айрат Абушахманов йолаларға таянып, бөтөн донъя кимәлендә театрыбыҙҙың кимәлен күрһәтә торған әйбер эшләне. Әлбиттә, театрҙа йолаларға ғына ҡоролған спектаклдәр булырға тейеш тигән һүҙ түгел был, спектаклдәр төрлө булырға тейеш.

Беҙҙе башҡорт тамашасыһы ғына ҡарай барыбер, тип тә эшләй алмайбыҙ. Беҙҙең халҡыбыҙ ҙа бөтөн донъя мәҙәниәтенә үтеп инергә, беҙ улар менән бергә үҫергә тейешбеҙ. Киң ҡарашлы булырға кәрәк, беҙ бит бөтөн донъя менән бергә йәшәйбеҙ, айырым түгел.

### Иң ауыр жанр

Драматургия - ул иң ҡыйын жанр. Унда быуаттар буйына эшләнелгән, шымартылған ҡануңдар бар, шуларҙы белер өсөн күп уҡырға, белергә кәрәк. Был жанрҙың нескәлектәре күп, әйтәйек, романда фекерендә уҡыусыға еткерер өсөн 100 бит, 1000 бит яҙырға була, пьесала һәр һүҙ ҡәҙерле, ул кәрәкле урында ғына булырға тейеш. Һинең ике сәғәт ваҡытың бар, шул мәлдә тамашасының күңел төпкөлдәренә үтеп инеп, уның тойғоларын уятып өлгөрөргә бурыслыһың.

Шуға ла драматургтарға ярҙам итеү маҡсатынан продюсер Әлиә Яхина менән берлектә Заман драматургия һәм режиссура үҙәген барлыҡҡа килтергәйнек. Алдан әйтеп үтеүемсә, Мәҙәниәт министрлығының ярҙамы менән семинар-лаборатория үткәрәбеҙ. Ғөмүмән, республикаға бындай үҙәк күптән кәрәк ине. Ул театр донъяһындағы йәштәрҙе берләштерә, уларҙы драматургияға, театрға ылыҡтырасаҡ. Драматургтар һәм режиссерҙар өсөн семинарҙар менән генә сикләнмәйәсәкбеҙ, алдыбыҙҙа фестивалдәр үткәреү, белем биреүсе форумдар ойоштороу бурысы тора. Әйтәйек, беҙҙә театрҙар өсөн тауыш, яҡтыртыу операторҙарына, башҡа йүнәлештәрҙә эшләүсе белгестәргә уҡытмайҙар. Педагогтар саҡыртып, режиссерҙар, актерҙар, әҙәби, реклама бүлектәре белгестәренә курстар үткәрергә ине. Был эштең кәрәклеген Мәҙәниәт министрлығында ла аңлайҙар һәм ярҙам итергә тырышалар.

Эргәбеҙгә бер төркөм драматургтарҙы йыя алдыҡ. Уларҙын араһында әле генә ҡәләм тотҡан йәштәр ҙә, башҡа жанрҙарҙа танылыу яулаған әҙиптәр ҙә бар. Тағы ла ҡыбәйһен ине улар, ғөмүмән, яҙышҡан шәхестәребеҙ үҙен драматургияла һынап ҡараһын ине. Башҡорт милли драматургияһы артһын, үҫешһен ине. Семинарҙың эше лә бит шуға йүнәлтелгән - йәш драматург режиссер, композитор, педагогтарҙы ишетеп, өйрәнеп, тәүге һабаҡтар ала. Былтырғы лабораторияның өсөнсө этабының һөҙөмтәһе шунда - яңы әҫәрҙәр буйынса бәләкәй генә спектаклдәр күрһәтеп, республика театрҙарының директорҙары, художество етәкселәре, режиссерҙарына үҙҙәре теләгән, ынйыға тиң... Үҙенсәлекле театраль биржала уларға үҙҙәренә һайлап алырға мөмкинлек булды. Әлеге көндә беҙҙең семинарҙа "бешеп" сыҡҡан пьесалар менән республика театрҙарында бер нисә спектакль ҡуйылып ята. Салауат дәүләт драма театры Рәсәй Федерацияһының Мәҙәниәт министрлығы үткәргән ике грант отто, әле репетициялар бара, беҙҙең үҙәктең драматургтары Шәүрә Шәкүрова менән Дамир Йосоповтың пьесалары буйынса. Йәш драматург Диана Ғиләжеваның пьесаһы буйынса "Нур" театрында кескәй тамашасылар өсөн спектакль ҡуйыла. Сибай театрында Альмира Мөхәрәмованың "Ярҙам ит миңә..." тигән пьесаһы ҡуйылырға тейеш һ.б. Бына шулай, көндөҙ ут яндырып эҙләйбеҙ инде драматургтарҙы, бөгөн хәстәрләмәһәк, иртәгә хәлебеҙ үҙенән-үҙе яҡшырып китмәҫ.

### Тамашасыға ни кәрәк?

Режиссер булараҡ, бөгөнгө заман тамашасыһына ниндәй спектакль кәрәк икәнен аныҡ һәм теүәл белһәм, минең театрым тамашасы иң күп йөрөгән театр булыр ине. Шул уҡ ваҡытта, тамашасы быны аңламай ул тип, репертуарҙы ябайлаштырыу кәрәкмәй. Театр бит ул киң төшөнсә, ул үҙенә бөтөн сәнғәттәрҙе лә алған, унда скульптура ла, архитектура ла, йыры ла, бейеүе лә бар, темалар ҙа унда төрлө-төрлө булырға тейеш. Бөтөн донъяны, тотош замандың күрһәтә торған спектаклдәр кәрәк, ниндәйҙер сикләүҙәр индереү дөрөҫ түгелдер. Заманса пьесаны нисек яҙыу тураһында фекеремде белдерә алам, әммә мин генә был проблеманы хәл итеп бөтә алмайымдыр. Философик яҡтан ҡарағанда бында кешелектең уй-фекере ҡайһы тарафҡа йүнәлеүен, уның донъяның ҡайһы яғын аңларға маташыуын күрә белеү ҙә мөһим. Бөгөнгө замандың геройы ниндәй, уны эҙләү ҙә кәрәк.

Әлеге мәлдә театрҙа һынылыш осоро бара. Баҙар иҡтисады йәшәйешебеҙгә үтеп инһә лә, театрға инеп етмәне әле. Шуға ла репертуарлы театрҙың заманса формаһын барлыҡҡа килтереү йәһәтенән дә уйланырға мәжбүрбеҙ. Был беҙгә генә хас проблема түгел, тотош Рәсәй кимәлендә хәл әлегә шулай. Йәштәр театрға аҙ йөрөй, интернет, мәғлүмәт заманы тиһәк тә, тере һүҙҙән, ысын тойғонан бөйөгрәк нәмә уйлап табыуы ҡыйын ул. Шуға ла театр йәшәйеш әйләнешендә тағы ла өҫкә ҡалҡып сығасаҡ. Һуғыш мәлдәре менән сағыштырғанда, беҙ бөгөн балда, майҙа йөҙөп кенә йәшәйбеҙ. Тары бутҡаһы ашап йәшәгәндә лә театрҙы юҡҡа сығармағандар, әле лә ул һаҡланасаҡ. Островский әйткән бит: "Театр - ул милләттең өлгөрөп етеү билдәһе". Театрыбыҙҙы юғалтһаҡ, был милләтебеҙ өсөн ҡара замандар етте, тигән һүҙ буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театр - тамашасы, киңерәк алғанда, теге йәки был милләт үҙен сәхнәнән күреп, үҙенең йәшәү мәғәнәһен аңлаһын өсөн кәрәк, тиҙәр. Бәлки, бына шуның өсөн генә булһа ла заманса драматургия булырға тейештер ҙә. Тик Зиннур Фәрит улы менән барыһы ла килешер: ижадсының өлгөрөп етеүен көтөп ултырырға түгел, ә ижадсыға үҙенең һәләтен күрһәтеү өсөн климат, атмосфера тыуҙырырға кәрәк. Әле генә тиерлек барлыҡҡа килгән заман драматургия һәм режиссура үҙәге республикала ошо атмосфераны тыуҙырыуҙы бурыс итеп ала ла инде. Был милли ижади мөхит милли театрҙарыбыҙ сәхнәһенән күп һорауҙарыбыҙға яуап бирер әле киләсәктә.**

*Ләйсән НАФИҠОВА*
*әңгәмәләште.*

✓ *Мин 16 йыл хәмер ҡоло булғанмын икән, күңеллелек кисереүгә нәфсемде тыя алмай, алдағы 16 йыллыҡ ғүмеремдә кисерәсәк шатлыҡтарымды үтескә алып торғанмын. Үҙ-үҙемдән шатлығымды урлағанмын була бит был.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАУЫТ-ҺАБА...

## стресты дауалай

■ Организмды кальцийға байытам тип өҫтәмә рәүештә дарыуҙар ҡулланыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, тип белдерә табиптар. Яңы Зеландиялағы Окленд университеты ғалимдары оҙайлы тикшеренеүҙәр үткәргән, унда өҫтәмә рәүештә кальций ҡабул иткән 50 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар ҡатнашҡан. Ҡабул ителгән фекерҙәр буйынса, һөйәктәре һынып яфаланыусылар тәүлегенә 1000-1200 миллиграмм кальций ҡабул итергә тейеш. Әммә һынауҙар күрһәтеүенсә, был кәңәш һәр ваҡытта ла һөҙөмтә бирмәй. Бәҡтиһәң, уның 1-2 проценты ғына үҙләштерелә икән. Етмәһә, кальций һөйәктәр һыныуы хәүефен булдырмай тигән раҫлауҙар юҡ. Киреһенсә, кальций ҡабул итеүҙән ашҡаҙан-эсәк тракты зыян күреүе ихтимал. Әйткәндәй, был яңылыҡ өлкәнәйгәс һөйәктәрҙе кальций һаҡламай, тигәнде дөлилләүсе икенсе асыш. 2010 йылда АҠШ-та остеопорозды иҫкәртеү һәм һөйәктәрҙең сәләмәтлеген һаҡлау буйынса киңәйтелгән эксперимент уҙғарылғайны. Ул ваҡытта ғалимдар елкәемештең һәм йәшелсәнең һөт аҙыҡтарына ҡарағанда организмға кальцийҙы күберәк биреүе тураһында белдергәйне. Быны шуның өсөн дә Азия илдәрендә остеопороз осрактары күп теркәлмәй. Япония халҡы Америка халҡына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй һәм улар кальцийға бай һөт ризыҡтарын бөтөнләй тиерлек ҡулланмай. Ә Евросоюз илдәрендә һөт һәм һөт ризыҡтарын күп ҡулланалар һәм унда остеопороз менән күптәр ауырый.

■ Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡолаҡтарындағы алҡалар борондан гүзәллек билгеһе иҫәпләнә. Шуға ла ҡыҙ балаһы булған ата-әсәләр уның ҡолағын тиҙерәк тиштергеһе килә. Ҡолаҡ тишкәндә ауыртыу ныҡ тойола, шуға ла бала бәләкәй сағында ҡолаҡ тиштереү күпкә унайлыраҡ тип иҫәпләй улар. Тик экспертар һәм педиатрҙар бала үҙе был турала һорамайынса, ҡолаҡ тиштереү кәрәкмәй, тип иҫәпләй. Бигерәк тә бер йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе уйланырға тейеш, сөнки әнә организмға берәй инфекция индереүе бар, ә йәш баланың иммунитеты уның менән көрәшә алмай әле. Икенсенән, ныҡ ауыртыу тойғоһо кисергән бала психологик тетрәнеү кисерә, бала тыныслыҙлана, бер туҡтауһыҙ илауы бар.

■ Американың Корнелл университеты яңы асыш тураһында хәбәр итә. Белгестәрҙең фекеренсә, ул фән өлкәһен күпкә алға ебәрәсәк. Ғалимдар миллионлаған кешеләрҙе ҡотҡарасаҡ аппарат уйлап тапҡан. Оҙайлы эксперименттарҙан һуң, ғалимдар ҡан ҡыуыу һәләтенә эйә яһалма йөрәк эшләй алған. Ул пенопластан яһалған һәм был йөрәкте донор итеп ҡулланып буласаҡ. Әлеге мәлдә күп кенә медицина компаниялары ошондай уҡ ҡоролма яһау өҫтөндә эшләй. Уларҙың төп маҡсаты - яңы йөрәктең кеше организмына нисек тәьҫир итеүен өйрәнеү.

■ Стресс кисереп яфаланыусыларға ғалимдар яңыса дауаланыу сараһы өйрәтә. Тынысланырға һауыт-һаба йыуыу ярҙам итә, ти Американың Флорида университеты белгестәре. Бының өсөн һауыт-һабаны ентекләп, йәйлап йыуыу кәрәк. Был шөғөлгә етди ҡараусыларҙа, ысынлап та, нервылар көсөргәнеше, тимәк, стресс кимәле лә түбәнәйә. Психологтар иҫәпләүенсә, уйланып тороп һауыт-һаба йыуыу медитацияға тин.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 3-сө һабаҡ: "Үтескә алынған шатлыҡ"

Шулай итеп, тәүге көнөм бик күп миҡдарҙа сәй һәм ҡорот һурпаһы эсеп үтте. Туҡтауһыҙ хәрәкәт иттем: апайымдарҙың ихатаһындағы юҡ эште бар итеп, аҙаҡ ауыл янындағы урманға сығып, нисек булһа ла ҡыймылдарға, тирләргә тырыштым. Был көндә бөтөнләй ашағым килмәне, семетеп кенә ҡаптым.

Ғәжәп, әллә көнө буйы аяҡ өҫтөндә булғанғамы, арманһыҙ булып арығанғамы, кис нисек йоҡлап киткәнемде иҫләмәйем. Теге упҡынға ла тәгәрәмәнем, яман төштәр ҙә күрмәнем.

Әммә барыһы ла иртәгәһен, иртә таңдан башланды. Тупһаға сығып баҫыуым булды, ҡот осҡос күңелһеҙ уйҙар солғап алды. Ҡыҙарып ҡалҡып килгән ҡояш та, таңғы һиллек тә, саф һауа ла минә бер нисек тә тәьҫир итә алмаған кеүек, киреһенсә, был илаһи тынлыҡ күңелгә шик-шөбһә генә өҫтәгәндәй. Ауыл янында йәйелеп ятҡан күл буйын ҡыҙырып килдем. Күл күл инде ул, йоҡлап ятҡан тулҡындары минең эске торошома тап килмәй. Киреһенсә, уның сөмбәйҙерен күҙ алдыма килтереү күңел юшҡындарымды тәрәнәйтте генә һымаҡ. Урманға ла сыҡтым, аҙаштырырға теләгән һағыштарым, киреһенсә, ҡоштарҙың үҙәк өҙгөс итеп һайрауына ҡушылып, йәнемдә ҡанатты.

Аптырағас-алйығас, тирләгәнсе йүгереп ҡарарға булдым. Теге хәсрәтле уйҙарҙың баш мейемдә туҡтауһыҙ суҡып тороуы, дөрөҫ һулыш алыуға ҡамасауланы ла, йүгереп китеү менән тыным да ҡыҫылды. Шул саҡ тәмәкене иҫемә төшөрҙөм. Элек шул алдатҡыс төтәткес менән ҡайны бер ауыр тойғоларҙы баҫа ала инем, әммә был юлы тәмәке ҡабып тоҡандырыуым булды, туҡтауһыҙ сәсәп, күҙ алдарым ҡараңғыланды. Ҡабы-ние менән атып бәрҙем ергә үҙен һәм теүәл дурт йылға уны ауыҙыма алманым.

"Бер нәмә тураһында ла уйламаҫҡа кәрәк минә!" тип эстән генә үҙ-үҙемә һүҙ бирәм дә, "уйламаҫҡа кәрәк" тигән уйҙарым теге шик-шөбһәләргә кире алып ҡайта. Был "бахмур синдромы", йәғни баш ауыртыуҙың күңелгә күсеп дауам иткән иң ауыр өлөшө. Эскән кешеләр уны бик яҡшы аңлай. Ә быны баш төҙәтмәйенсә генә ул синдромдан сығып ҡара. Гүйә, үҙеңде бөтә кешелек алдында енәйәт эшләгәндәй тояһың, тойоп ҡына ҡалмайһың, кемдендер килеүен, һинең ҡылған гонаһың өсөн яза биреүен көтәһең әле. Эх, йөҙ грамм ғына эсеп ебәр ине лә, барлыҡ ғазаптарыңдан бер юлы арын ине. Һуң, мин быға тиклем гел шулай ҡотола килдем. Ул саҡта синдром баш төҙәтерлек әмәл тапҡансы ғына һуҙыла ине. Аҙаҡ... барыһы ла тигеҙләнә, юйыла ине. Допингты ни тиклем күп өҫтәһәң, шул тиклем рәхәт. Ә иртәгәһен... Юҡ, минә был юлы улай ярамай, сөнки Хоҙай мине өсөнсө тапҡыр иҫкәртте бит. Минең йәшәгем килә.

Нисек булһа ла түҙергә кәрәк, йәшәү хаҡына мин барыһын да эшләргә, сабыр булырға бурыслымын. Ә нисек итеп был ауыр уйҙарҙан ҡотолорға һуң? Ҡотолоп булмай! Үҙем теләп, аҡсаға һатып алған ғазабым бит ул. Саҡ ҡына онотолорға иткәндәй, апайым менән сабый, бала саҡтарыбыҙҙағы иң бәхетле мәлдәребеҙҙе иҫләй башлауға, теге хәл-торошом саҡ ҡына ситкәрәк күскәндәй булды. Ғәжәп, былдай мәлдәрҙә хәтирәләр ярҙамға килә икән. Ә беҙ күп осраҡта уларға вайымһыҙбыҙ. Апайыма мең рәхмәттәр уҡыйым. Йәшлек мәлемдә йөрәгемә уйылған тағы бер онотолмаҫ, ғүмерем буйы күңелемдә йәшәгән тойғом да иҫкә килеп төштө (был хаҡта алдараҡ һөйләрмен әле).

Хәҙерге аҡылым менән ул саҡтағы ғазапланыуҙарымды шулай баһалайым. Һәр кемдең яҙмышы, күрер, кисерер шатлыҡтары һәм ҡайғылары маңлайына яҙыла, тиҙәр. Тимәк, беҙ араҡы эскән саҡта алдағы көндәребеҙҙә күрәсәк һәм кисерәсәк шатлыҡтарыбыҙҙы үтескә алып, үҙебеҙсә күңелләнәбеҙ икән. Шатлыҡ - ул шул уҡ күңел энергияһы, ул икһеҙ-сикһеҙ түгел, кешегә үлсәп кенә бирелә. Эскәндә рәхәт, күңелле, ҡан ҡыҙа, уйнайһың, йырлайһың, бейейһең, осоп-ҡунаһың, башҡа бик күңелле, елле фекерҙәр ҙә килә - һин ораторһың. Иртәгәһенә инде, ни ғәжәптәндер, 180 градусҡа әйләнәһең дә ҡуяһың, энә йотҡан эт кеүек йөрөйһөң. Ислам тәғлимәтенең "Артыҡ шатланырға, артыҡ ҡайғырырға ярамай" тип өйрәтеүе лә шунан киләләр.

Мин 16 йыл хәмер ҡоло булғанмын икән, күңеллелек кисереүгә нәфсемде тыя алмай, алдағы 16 йыллыҡ ғүмеремдә кисерәсәк шатлыҡтарымды үтескә алып торғанмын. Үҙ-үҙемдән шатлығымды урлағанмын була бит был. Үҙемдән генә түгел, шул йылдарҙа башҡаларға өләшә торған шатлыҡтарымды ла стакан төбөнә һалып йотҡанмын. Бурысты үҙ-үҙемә һәм башҡаларға кире ҡайтарырға ла кәрәк. Ул арауыҡты шатлыҡ тойғоһо кисермәйенсә нисек үткәрергә һуң? Тәүбәгә килгәндән һуң үткән эс бошорғос шөкәтһеҙ көндәремде мин тик шулай ғына аңлата алам хәҙер.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ДАУАМ ИТЕП...

# ИҪКӘРТЕҮҘЕ...



## беренсеһенән үк ҡабул ит тә бит

**"Мин эсеүемде ташланым" тигән мәҡәләһендә Әхмәр-Ғүмәр Үтәбай, Хоҙай өс тапҡыр иҫкәртә, ти. Ул иҫкәртә, ә кешеләр шуны иҫәпкә алмай, ти. Эйе, Хоҙай күрһәткәнен барыбер аңламай шул эскән кеше. Мәҫәлән, бер эскән ҡатын менән булған хәл аптыратты мине. Уның кисергәндәрен, әлбиттә, врачтар "аҡ тапма" тип атар. Әммә... "Аҡ тапма" ғынамы икән был?**

Барыһы ла ҡырҡ көндән ураҙа тигәндә башлана. Уның шулай булыуын Алина (героиняның шартлы исеме булһын) һуңынан, бөтөн был ҡурҡыныс хәлдәр үтеп китеп, тормошо яйланғас ҡына һанап сығара. Аҙнаға яҡын ире менән эсеп йөрөйҙәр. Үкенескә ҡаршы, был аңлы ғына һөйкөмлө ҡатынды "йәшел йылан" ҡорбаны иткән. Барыһын да аңлай, белә, бына-бына дөрөҫ юлға баҫырмын, тип уйлай ҙа, әммә алдына шешә килеп ултырһа, доньяһы түңкәрелә лә ҡуя шул әллә нишләп. Шулай ҡара эш менән эскелекте ҡушарлап, утыҙҙы үтеп, ыҙырҡа ла яҡынлашып баралар былар. Бер яҡҡа сыҡҡандары, бер ни күргәндәре, бер ҡыҙыҡһыныуҙары юҡ. Эсеп туҡтағас, Алина, ғәҙәтенсә, өй таҙалай башлай. Түшәк-ҡаралтыны сисеп алып йыуа, йылғаға алып барып сайҡата. Урамдан кер көйәнтәләп китеп барғанында бер ҡыҙыҡ ҡына хәл була. Үҙенән йөҙ метрҙай арауыҡта ике ҡатын һөйләшеп тора һәм Алина уларҙың һөйләшкәнен ишетә.

- Алинамы шул? - тип һорай ҡатындарҙың береһе.

- Шулдыр, шуларҙан сыҡты бит, - ти икенсеһе.

- Ыста, ҡалай танымаҫлыҡ булып үҙгәреп, йәмһеҙләнеп киткән, - тип икәү-ара һөйләшеп ҡалалар. Был хәбәрҙәр уның ҡолағына шыбырлап ҡына әйткән шикелле ишетелә.

Ҡайтып, мунса яға Алина. Мунса тирәһендә йөрөгәнендә "кемдер" уға ҡарап торғандай тойола. Йыуынырға барғанында шул "кемдер" артынан эйәрә һымаҡ була, бер нисә тапҡыр әйләнеп ҡарай, берәү ҙә күренмәй. Мунсанан йыуынып сыҡһа, шул "кемдер" тағы эйәрә. Йоҡлап ҡына барғанында "кемдер" яурынынан һыйпай. Боролоп ҡарап та өлгөрмәй, ниндәйҙер бер көс ҡатынды иҙәнгә алып ата. Уның ҡысҡырған тауышына ғаиләһе уяна. Шул минуттан Алина "аҡылдан яҙа". Ҡолағына туҡтауһыҙ һөйләп тик торалар һәм Алина шуларҙы ҡысҡырып ҡабатлай. "Ике көн ике төн күҙеңде йоммаҫың, ризыҡ ҡапмаҫың", ти тауыш. Шунан Алина ғүмерҙә белмәгән сүрәләрҙе, аяттарҙы яттан уҡый башлай. Быйаса "бисмилла"нан башҡаны

*✓ Нимәгәлер этәреүсе көс кешенең үҙендә. Үҙе лә аңламаҫтан, ул теге йәки был ғәмәлде башҡара алам йәки алмайым тип, үҙен-үҙе гипнозлай. Бер кемде лә уның үҙенең ихтыярынан тыш гипнозлап булмай.*



КИТАБЕННАС




# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX быуат башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### "Беҙгә һөйләшеү тураһында әйт", тигән ғалим.

"Уй-фекерҙәрегеҙ күңелегеҙгә һыймағанда, һеҙ һөйләшә башлайһығыҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Йөрәгегеҙ менән яңғыҙ ҡалыр сара ҡалмағанда, ирендәрегеҙ менән йәшәйһегеҙ, тауыш менән мауығаһығыҙ. Һеҙ һөйләшкән саҡта саф фекерегеҙҙең яртыһы үлә. Сөнки фекер - киңлек ҡошо, һүҙҙәр ситлегендә ул ҡанаттарын йәйә, тик оса алмай. Арағыҙҙа, яңғыҙлыҡтан ҡурҡып, һүҙгә әүәҫ кешеләрҙе эҙләгәндәр бар. Яңғыҙлыҡта шымып ҡалғандар үҙенең "Мин"ен күрә һәм үҙ-үҙенән ҡасырға теләй. Һөйләшкәндә, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән дөрөҫлөктө асып һалғандар була. Саф хәҡиҡәтте шым ғына күңелдәрендә йөрөтөүселәр ҙә бар. Ундайҙарҙың рухы күңел тынлығында бәүелә. Юлда йә баҙарҙа дуҫыңды осратһаң, күңел торошоң ирендәреңде тирбәлтһен, телеңә хужа булһын - бер күңелдәге икенсе күңелгә күсһен: уның күңеле һинең күңелеңдең сафлығын һаҡлаясаҡ".

### "Беҙгә матурлыҡ тураһында аңлат", тигән Шағир.

"Әгәр ҙә матурлыҡ үҙенең артынан эйәртеүсе юл булмаһа, уны ҡайҙан тапмаҡ булаһығыҙ? - тигән Бәйғәмбәр. - Әгәр ҙә ул телмәрегеҙҙе туҡымаһа, уның тураһында нисек һөйләмәк булаһығыҙ?

Күңеле яралы бисара уны: "Үҙ күркәмлегенән үҙе оялған йәш әсә кеүек, изге йөрәкле", - тиер. Дәрте ташып торған кеше: "Юҡ, матурлыҡ - ул көслө һәм ҡурҡыныс тойғо, - тиеп ҡаршы килер. - Ул, дауыл кеүек ер һелкетеп, күккә олғаша".

Арып-йонсоған кеше: "Матурлыҡ шыбырлау кеүек йомшаҡ, - тиер. - Ул беҙҙең йәнебеҙ менән һөйләшә. Уның тауышы күләгәһенән ҡурҡҡан, һүнеп барған ут кеүек".

Тынғыһыҙ кеше: "Беҙ уның тау башында яңғырағанын ишеттек. Уның тауышы тояҡтар сыҡылдауына, ҡанаттар елпеүенә, арыҫлан үкереүенә оҡшаш", - тиер.

"Матурлыҡ таңда көнсығышта уяна", - тиер ҡала һаҡсыһы.

Көн уртаһында шул уҡ матурлыҡты яланда эшләүселәр киске шәфәҡтә күрә. Ҡар аҫтына күмелгәндәр: "Матурлыҡ яҙғыһын була", - ти. Эҫе көндә ураҡсылар ҡыш матурлығын һағынып иҫкә ала. Матурлыҡ төрлө мәлдә төрлөсә күренә. Дөрөҫөн әйткәндә, матурлыҡ толҡа тапмаған күңелдәрегеҙҙе елкендереүсе. Әммә матурлыҡ мохтажлыҡ түгел, ул - ҙур ләззәт. Ул - ялҡынлы йөрәк һәм йырлаған күңел. Ул - күҙгә күренгән образ да, күңелде тирбәлткән йыр ҙа түгел. Ул - күҙҙе йомғанда ла, күҙ алдынан китмәгән һын, ҡолаҡтарҙы ҡаплағанда ла ишетелгән яҙ һулышы. Ул - сәскәләргә күмелгән мәңгелек баҡса, иҫәпһеҙ-һанһыҙ фәрештәләрҙең бергә йыйылыуы. Матурлыҡ - ул илаһи йөҙөнән битлеген сискән тормош. Һеҙ үҙегеҙ ошо тормош һәм уның битлеге. Матурлыҡ - ул үҙен көҙгөлә күргән мәңгелек. Һеҙ үҙегеҙ шул мәңгелек һәм көҙгө".

### "Һинән үлем тураһында һорағыбыҙ килә", тигән берәү.

Бәйғәмбәр былай тип яуап биргән: "Үлем серен белгегеҙ киләме? Йәшәйештең йөрәгендә эҙләмәйенсә, уны башҡа ҡайҙан тапмаҡ булаһығыҙ? Төн ҡараңғылығына күнеккән өкө күҙе яҡтылыҡ серен белмәй. Әгәр, ысынлап та, үлем һулышын белгегеҙ килһә, йөрәктәрегеҙ үлемһеҙлек өсөн асыҡ булһын. Сөнки, йылға менән диңгеҙ кеүек, йәшәү менән үлем дә бер бөтөн. Өмөт-теләктәрегеҙҙең төпкөлөндә әхирәткә ышаныу, һүҙһеҙ килешеү бар. Әммә ҡар аҫтында йоҡомһораған орлоҡ кеүек, йөрәктәрегеҙ яҙҙы көтә. Өмөт-хыялдарығыҙға ышанығыҙ - улар мәңгелек ишеген асыр. Үлемдән ҡурҡыуығыҙ мәрхәмәтле батша ҡулынан бүләк алырға торған көтөүсенең ҡалтыраныуына оҡшаш. Ҡалтыранһа ла, көтөүсе бүләк алыуына шатланмаймы ни? Шатланһа ла, уның бөтөн иғтибары ҡурҡып ҡалтыраныуында түгелме? Үлеү - яланғас килеш елдәргә ҡаршы тороп, Ҡояш менән мәңгелеккә ҡауышыу түгелме ни? Һуңғы һулыш, Ерҙәге тынғыһыҙ тулҡындарҙан ҡотолоп, мәңгелек тулҡындарында Хоҙайҙы эҙләү түгелме? Тынлыҡ йылғаһынан ауыҙ иткәс кенә йырларға мөмкин. Тауҙың иң бейек нөктәһенә еткәс кенә ысын мәғәнәһендәге юғарыға күтәрелеүҙе тойған һымаҡ, тәнегеҙ ер ҡуйынына инеп ятҡас ҡына ысын бейеү башлана".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

әйткәне лә булмай, ә әле оҙон итеп яттан сүрәләр һөйләп аптырата. Стенала ут менән яҙылған доғалар уҡыталар Алинанан. Шуларҙы туҡтауһыҙ уҡый торғас, ауыҙы кибә, ирендәре ярылып, ҡанап бөтә. Мунсаға барып йыуынырға ҡушалар - барып йыуына, кейемен алыштырталар, яулыҡ ябындыралар. Бөтә ҡылған гонаһтарын иҫләтәләр, ҡысҡырып әйттерәләр. Бәҙрәф янына алып баралар, ишеген асып, бәҙрәф соҡоронан бала яралғыһы килтереп сығаралар. "Был һинең балаң!" ти тауыш. Ысынлап та, йәш сағында ҡатын балаһын төшөртөп, ошонда ташлаған була. "Ҡарағыҙ - бала!" тип ҡысҡыра Алина, тик уға берәү ҙә ышанмай. Шул ике көндә үҙен алмашлап ҡарауыллаған туғандарына ул нимәләр генә һөйләмәй.

Алинаны көсләп индереп өйгә һалалар. Улар менән бергә инеп, ишек төбөндә берәү баҫып торғанын күрә. Уның Ғазраил икәнен таный Алина: аяҡтары ергә теймәй, бите юҡ, үҙе лә оҙонса бер ҡара масса кеүек. Ныҡ ҡурҡа ҡатын, ундай ҡурҡыуҙы бер нәмә менән дә сағыштырып булмай, башҡа ваҡытта үлемдән ҡурҡмаған һымаҡ булһаң да, ысынында ҡот осҡос икән ул, тип һөйләйәсәк ул аҙаҡ. "Йәнеңде алырға яҡындарың булып килермен", ти Ғазраил. Аҙаҡ ул Алинаға әсәһе образында балта менән дә һөжүм итә, ҡустыһы сүрәтендә лә килеп йәбешә. Үҙ сүрәтендә генә яҡынламай, бары ҡарашы менән генә язалай. Тәненә энәләр ҡаҙап сыҡҡан кеүек итеп ыҙалата.

Икенсе көн мәсеткә китә Алина. Тик ҡатынды, эсеүҙән алйыған, тип унда индермәйҙәр. Тиҙ ярҙам саҡыртып, дауаханаға оҙаталар. Юл буйына күҙенә аҫылынып үлгән кешеләр күренеп бара. Дауахана рәшәткәләрендә үлгән балалар аҫылынышып тора. "Былар ҡатындар аборт ваҡытында үлтергән балалар", тип аңлаталар. Бер ниндәй дарыу ҙа алмай ҡатынды. Ул әллә нимәләр һөйләй, ҡысҡырып уҡына. Теле арып, берәй һүҙҙе төшөрөп ҡалдырһа йә әйтеп еткермәһә, "Алдашма, дөрөҫөн әйт!" тип, кире ҡабатлаталар. Тамуҡты күрһәтәләр, уның ғазабының ни рәүешле булғанын татыталар. Шулай ул ике көн, ике төн алйып, ҡапыл иҫен юя ла, оҙаҡ ҡына йоҡлап, килеп тора. Башынан үткән бөтөн хәлдәрҙе белә, әммә яттан һөйләгән доғаларын ғына иҫләмәй булып сыға. Табиптар был хәлде, эскелектән, "аҡ тапма", тип раҫлай. Эйе, уныһы ла хаҡ, әммә Алина быны иҫкәртеү икәнлеген аңлай. Шул көндән намаҙға баҫа. Тап ҡырҡ көн таҙарынғас, тәүге тапҡыр Ураҙа тота. Унан берәүҙәр көлә, икенселәр ышанмай.

Намаҙға баҫҡанын ишеткәс, мин дә ҡыуанғайным, Алланың ҡөҙрәте көслө, тип уйлағайным. Үкенескә ҡаршы, йыл тирәһе диндә булған ҡатын кире эсеп китте. Бер осрағанында башынан үткән баяғы хәлдәрен һөйләгәндән һуң, "Эсеп кенә үлермен инде", тип әсенеп торҙо...

Хоҙай кешене өс тапҡыр иҫкәртә, ти Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай. Киләһе иҫкәртеү Алинаға ниндәй рәүештә килер? Килгәнен ул ҡабул итерлек хәлдә булырмы? Ниңә кешене ошондай ҡот осҡос иҫкәртеүҙәр ҙә аҡылға ултырта, айыҡлыҡҡа килтерә алмай? Нисек кенә булмаһын, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Мин эсеүемде ташланым" яҙмалары ошондай ихтыярһыҙ кешеләр өсөн бик тә фәһемле. Авторға бындай ҡыйыулығы, башҡаларҙы ла ошо ҡот осҡос эскелек юлынан ҡурсыусы һүҙе өсөн Алла рәхмәттәре яуһын, тип теләге килә.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Беренсе сер
### Гипноздан сығығыҙ

Һәр кем теге йәки был кимәлдә башҡа кешеләрҙән алынған идеялар йәки уларҙың дөрөҫлөгөндә үҙен-үҙе ышандырған идеялар менән гипнозланған. Улар уның үҙ-үҙен тотошона гипнозлаусы үҙ объектына нисек тәьҫир итә, шундай уҡ йоғонто яһай. Оҙаҡ йылдар эшләү дәүеремдә ышандырыу һәм күҙаллау көсөн раҫлап, йөҙҙәрсә кешене гипноз хәленә индерҙем. Аңлау еңел булһын өсөн, гипноз аҫтында булған кешенең халәтен аңлатырға тырышам.

Гипноз йоғонтоһондағы сәләмәт ҡатынға, өҫтәлдә ятҡан ҡәләмде лә күтәрә алмаясаҡһың, тием. Һәм ул ошо ябай ғына ғәмәлде лә башҡара алмай. Шуға иғтибар итегеҙ, бында һүҙ уның эште башҡарырға тырышмауы тураһында бармай. Ул тырыша, әммә барыбер ҡәләмде күтәрә алмай. Бер яҡтан, ул эште аң һәм физик тырышлыҡ ярҙамында башҡарырға теләй. Икенсе яҡтан, "һеҙ ҡәләмде күтәрә алмайһығыҙ", тигән ышандырыу уның аңын ысынлап та эшләп булмай икәнлегенә инандыра. Был осраҡта беҙ аҡыл көсө тарафынан юҡҡа сығарылған физик көс менән эш итәбеҙ. Был ихтыяр көсө һәм күҙаллау көрәшенең миҫалы. Унда һәр саҡ күҙаллау еңеүсе булып сыға!

Күптәр ихтыяр көсө менән генә тормошон үҙгәртә алырына ныҡлы ышана. Был дөрөҫ түгел. Күҙаллау тарафынан тыуҙырылған кире уйҙар уларҙы үҙебеҙгә еңелеү килтерергә мәжбүр итә. Түгелгән көскә ҡарамаҫтан, һөҙөмтәгә өлгәшелмәй. Улар ялған инаныуҙы раҫланған дәлил тип ҡабул итә. Барлыҡ һәләттәре, изге ниәттәре һәм ихтыяр көсө хәҡиҡәт тип ҡабул ителгән йоғонтоло ялған инаныуға ҡаршы бөтөнләй файҙаһыҙ.

Шундай уҡ юл менән гипноз аҫтында кеше мөмкинлектәренең сикһеҙ икәнлеген дә раҫларға була, сөнки уның күҙаллау ҡеүәһе ныҡ көслө. Ситтән күҙәтеүселәргә мөғжизә тыуҙырыусы булып күренеүем мөмкин, сөнки уның ғәҙәти торошонда башҡара алмаған йәки теләмәгән ғәмәлен эшләтәм. Дөрөҫлөк түбәндәгегә ҡайтып ҡала: нимәгәлер этәреүсе көс кешенең үҙендә. Үҙе лә аңламаҫтан, ул теге йәки был ғәмәлде башҡара алам йәки алмайым тип, үҙен-үҙе гипнозлай. Бер кемде лә уның үҙенең ихтыярынан тыш гипнозлап булмай, сөнки ул ошо процеста үҙе лә ҡатнаша. Гипнозлаусы - бары тик гипноз хәленә күсеүҙе тиҙләтеүсе аралашсы ҡына. Мин гипноз миҫалын һеҙгә баһалап бөткөһөҙ файҙа килтереүе мөмкин булған психологик принципты һүрәтләү өсөн генә килтерҙем. Шул уҡ принцип хәҙерге мәғариф өлкәһендә лә сағылыш таба: студент үҙаллы белем ала, уҡытыусы уға йүнәлеш кенә бирә. Тағы ла асығыраҡ миҫал - һауығыу сәнғәте. Пациент оҫта дауалаусы етәкселегендә үҙен-үҙе дауалай.

Кешегә нимәнеңдер хаҡ икәненә ышаныу ғына кәрәк - ул төпкө аңында үҙенең инаныуын раҫлаусы, хатта улар ялған булһа ла, дәлилдәр йыя башлай. Уны, әгәр үҙ тәжрибәһендә йәки теоретик ҡабул итеүе буйынса үҙгәрергә ҡарар итмәһә, бер кем дә кире дүндерә алмай. Шунан сығып һығымта яһарға була: әгәр кемдер дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте шулай кәрәк тип ҡабул итә икән, уның артабанғы барлыҡ ғәмәлдәре һәм реакциялары ялған инаныуға нигеҙләнәсәк. Был идея оригиналлеккә дәғүә итмәй. Донъя яралғандан алып кешеләр үҙенә күрә бер гипноз йоҡоһонда була, әммә был хаҡта үҙҙәре лә белмәй. Был хаҡта бары тик бөйөк остаздар һәм фәйләсуфтар ғына хәбәрҙар булған. Улар кешелектең үҙен ялған дәлилдәр менән сикләүен аңлаған һәм уның ҡеүәтен бөйөк эштәргә йүнәлтергә тырышҡан.

**Роберт ЭНТОНИ.**

✓ *Егерме биш йыл эсендә милли мәғариф өлкәһендәге проблемалар хәл ителеп бөтмәһә лә, ошо арауыҡта башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ өйрәнеп, республика мәнфәғәтендә бик күп эштәр атҡарыусы шәхестәребеҙ бар.*



БАЙРАМ САРАЛАРЫ

# УҠЫТЫУСЫЛАР БАҺАЛАНДЫ

**Мәғариф өлкәһендә барған төрлө үҙгәрештәр, әлеһән-әле ҡалҡып торған проблемаларға ҡарамайынса, мөкиббән китеп эшләгән педагогтарҙың хеҙмәте республика Хөкүмәте кимәлендә юғары баһалана килә. Был йәһәттән "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә уҙғарылған аҡсалата дәртләндереү конкурсы менән иң яҡшы башҡорт һәм рус теле уҡытыусыларының республика конкурсы матур бер миҫал булып тора.**

"Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендәге аҡсалата дәртләндереү конкурсы 2006 йылдан башлап үткәрелә. Конкурс һөҙөмтәләренә ярашлы, фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн педагогтарға еңеүсе сертификаты һәм 200 мең һум күләмендәге премия тапшырыла. Туғыҙ йыл эсендә республиканың 1648 уҡытыусыһы ошо юғары наградаға лайыҡ тип табылған. Был юлы иһә, Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов тағы ла 35 педагогты ҡотланы. "Уҡытыусы - етди һөнәрҙәрҙең береһе. Хөрмәтле уҡытыусылар, бик күп нәмә һеҙҙең уҡыусыларығыҙға биргән белемдән тора", - тип билдәләне ул.

Башланғыс, урта һәм төп дөйөм белем биреү программалары тормошҡа ашырған педагогтарҙы БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова ла тәбрикләне. Ул шулай уҡ иң яҡшы башҡорт һәм рус теле уҡытыусыларының республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһында ла ҡатнашты. Республика Хөкүмәтенең 50 меңлек аҡсалата премияһы башҡорт һәм рус телен дәүләт теле булараҡ уҡытҡан педагогтарҙың өс йыллыҡ эш һөҙөмтәләре өсөн тапшырыла. Йыл да үҙ һөнәренең иң алдынғы хеҙмәткәре исеменә 50 уҡытыусы лайыҡ була. Быйыл улар рәтендә Өфө ҡалаһының дүрт башҡорт теле уҡытыусыһы һәм ике рус теле уҡытыусыһы ла бар. Быны ул еңеүселәр: Динә Аспаева (112-се һанлы урта белем биреү мәктәбе), Зөлхизә Вәлиуллина (82-се гимназия), Гөлсинә Ильясова (48-се Башҡорт лицейы), Фәйрүзә Үтәбаева (М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы), Любовь Григорьева (103-сө һанлы урта белем биреү мәктәбе), Анна Дзема (118-се һанлы урта белем биреү мәктәбе).

Бөгөн башҡа милләт балаларына ғына түгел, үҙ милләттәштәребеҙгә лә башҡорт телен белеү нисек мөһим булыуын аңлатыу зарурлығы килеп тыуҙы. Ата-әсәләргә балаларҙың бөтәһе лә сит тел өйрәнеп, ситкә эшкә китмәйәсәген, ә Башҡортостанда ерле халыҡ менән эшләйәсәген, телде белеү ҡамасау итмәҫен иҫбатларға кәрәк. Шуға күрә, башҡорт теле уҡытыусылары балаларға дәрестә теманы аңлатыуҙан тыш, йәмғиәт эштәрендә әүҙем ҡатнашырға, ата-әсәләр менән хеҙмәттәшлек итергә лә тура килә. "Беҙгә республикала башҡорт дәүләт теленең статусын күтәреү, уның әһәмиәтен арттырыу мөһим. Был йәһәттән махсус белем биреү йорттарына, вуздарға уҡырға ингәндә башҡорт теленән имтихан тапшырыу, йә булмаһа рус теленең БДИ һөҙөмтәләрен башҡорт теле БДИ һөҙөмтәләре менән алмаштырыу мөмкинлеге бирелһә ине. Сөнки уҡытыусының эшенә етәкселәр ҙә, ата-әсәләр ҙә ыңғай ҡарашта булыуға ҡарамаҫтан, милли мәғариф өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләр аңлатыу эштәре арҡылы ғына сиселеш табыуы икеле", - ти Өфө ҡалаһы 48-се Башҡорт лицейы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлсинә Ильясова.

Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа башҡорт теле дәүләт теле булараҡ күп кенә колледждарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында уҡытылмай. Ә уҡытылғандарында иһә уҡытыусыларҙың фиҙаҡәрлеге, балаларҙы ҡыҙыҡһындырыу өсөн төрлө алдынғы методик программалар төҙөүе маҡтауға лайыҡ. Мәҫәлән, Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы башҡорт теле уҡытыусыһы Ләйсән Күсәкова студенттарға башҡорт телен инглиз теле менән сағыштырып уҡыта. Дәрестәрҙә башҡорт мәҡәлдәрен, төрлө әкиәттәрҙе инглиз теленә тәржемәләп, сағыштырып өйрәнгәндә быға тиклем башҡорт телен бөтөнләй уҡымаған балаларҙа ла дәрескә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуа. Төрлө һылтауҙарға ҡарап, балаға туған телен тәрәндән өйрәтергә теләмәгән ата-әсәләр менән уртаҡ тел табып, башҡорт теленә ҡарата ихтирам тәрбиәләгән педагогтар өсөн милли мәғариф өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеү әллә ни ауыр түгел, тик Хөкүмәт кимәлендә ыңғай ҡараш булыуы мөһим. "Мин 1989 йылда эшләй башланым. Ул ваҡытта башҡорт телен уҡытыу буйынса бер ниндәй закондар, пландар, методик дәреслектәр ҙә, рус мәктәптәрендә хатта башҡортса әҙәби китаптар ҙа юҡ ине. Ҡулға бер дәфтәр һәм ручка тотоп дәрес үткәрҙек. Бөгөн үҙ эшен яратып атҡарған уҡытыусыға бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған, ижади ҡарашлы педагогтарҙың үҙе төҙөгән программалары бар. Уҡытыусы дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы итеп алып бара икән, балалар теләп уҡыһа, уның дәрес сәғәттәрен береһе лә ҡыҫҡартмай. Эш бара, барасаҡ тип кенә ҡуялар ул осраҡта", - ти был хаҡта Белорет ҡалаһының 20-се һанлы урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зәйнәп Собханғолова.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Себеште көҙ һанайҙар, тигән бик тапҡыр халыҡ мәҡәле бар. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың һөҙөмтәләрен хәҙер һанай башлаһаҡ та булалыр. Егерме биш йыл эсендә милли мәғариф өлкәһендәге проблемалар бөтөнләй хәл ителеп бөтмәһә лә, ошо арауыҡта башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ өйрәнеп, республика мәнфәғәтендә бик күп эштәр атҡарыусы шәхестәребеҙ бар. Уларҙың береһе лә был телде уҡыған өсөн юғары уҡыу йортона инмәй, йә карьера төҙөй алмай ятып ҡалмаған. Башҡорттар ҙа, башҡа милләт кешеләре лә ошо хәҡиҡәткә төшөнһә ине.**

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.

# УЛАРҘЫҢ ДА ӨЛӨШӨ ҘУР

**Республика көнөн ҡаршылап, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарын үткәреүҙә әүҙем ҡатнашыуҙары өсөн ҡаланың төрлө ойошма, предприятиелары, уҙҡтәре етәкселәренә маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы.**

Тантаналы йыйылышты асып, хакимиәт башлығы Өфөнөң быйылғы уңыштарын, йылдың иң иҫтәлекле ваҡиғаларын барланы. Атап әйткәндә, был сығышта баш ҡала урамдарын, юлдарын, ихаталарын төҙөкләндереү, ҡала парктарын, баҡсаларҙы, скверҙарҙы яңыртыу, коммуналь торлаҡ хужалығын артабан үҫтереү буйынса ҙур эштәр атҡарылыуын билдәләп үтте.

-Был йыл баш ҡала өсөн мөһим йыл булды: беҙ Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләнек, Өфөлә ике ҙур халыҡ-ара сара - ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары үтте. Форумда ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар уның ойоштороу кимәлен юғары баһаланы. Халыҡ-ара сараларҙы уңышлы уҙғарыуҙа һеҙҙең дә өлөшөгөҙ ҙур, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы сараға йыйылыусыларға мөрәжәғәт итеп һәм ҡыҙҡлап етәксегә бүләктәр тапшырҙы.

Әйткәндәй, бүләкләнеүселәр араһында "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева ла бар.

Илгиз ИШБУЛАТОВ.



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҮҘ КЕЙЕМЕБЕҘ МЕНӘН

Сентябрь аҙағында Монголияның баш ҡалаһы Улан-Баторҙа "Евразияның бөтөн төҫтәре: күсмә халыҡтар модаһы" Халыҡ-ара Гранд-дефиле үтте. Унда Әзербайжан, Венгрия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Төркиә, Ҡытай, Монголия һәм Рәсәй - Башҡортостан, Бүрәт, Тыва, Яҡут республикалары, Иркутск өлкәһе, Санкт-Петербург ҡалаһы ҡатнашты.

Башҡортостанды билдәле дизайнер Альбина Жерлицына һәм "Һылыуҡай-Bashkirian Beauty" студияһы моделе Рушана Әбсәләмова күрһәтте. Баһалама ағзалары иттибарына 2012-2015 йылдарҙа үткән "Азия супер моделе" конкурстары өсөн тегелгән кейемдәр тәҡдим ителде.

Проекттың ойоштороусыһы ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы һәм Монголия Хөкүмәте, Монголия Мәҙәниәт министрлығы, Донъя монголдарының халыҡ-ара мода академияһы. Тарихи костюмды өйрәнеү аша милләттең йолаларын өйрәнеү, уны һаҡлау өсөн был иң ҡулайлы ысул, ти ойоштороусылар.

# КИНО ҮҪЕШЕНӘ ЯРҘАМ ИТ




Өфөлә Башҡортостан кинематографистар берлегенең Йәштәр үҙәге республикала беренсе тапҡыр дебютанттар питчингы проектын әҙерләү менән мәшғүл. Питчинг - инвесторҙар табыу йәһәтенән кинопроекттарҙы презентациялау. Ул "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале сиктәрендә уҙасаҡ.

Республикалағы киноиндустрия үҫеше мәсьәләләре "Башҡортостандың йәш киноһы" I фестивалендә ҡаралғайны һәм Йәштәр үҙәгенең эшмәкәрлеген көсәйтеү, кино өлкәһендәге йәш белгестәрҙең мәғлүмәттәре тупланған каталог булдырыу, Өфө һәм республиканың төрлө майҙансыҡтарында кинолар күрһәтеүҙә ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Фестиваль тамашаһы һы ете ҡыҫҡа метрлы фильм ҡараны. Сараның ябыҡ өлөшөнә йәш режиссерҙар, композиторҙар, сценаристар, операторҙар, студиялар етәкселәре, рәссамдар саҡырылды.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 октябрь "Ғәфү ит мине!"** (И. Герман), мелодрама

**11 октябрь "Бер мәл санаторийҙа…"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

**16 октябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 октябрь "Нух кәмәһе янында"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 10.00, 12.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия

**15 октябрь "Һатам! Иремде һатам!!!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

**16 октябрь "Аҫылйәр"** (М. Фәйзи), музыкаль комедия

✔ *Ул сәстәрҙе ҡаплап торған яулыҡтың өҫтөнән кейелә. Маңлайҙың өҫтөнә 3 тәңкә тағыла - улар көнсығыштың өс изге йондоҙо кеүек, тыныслыҡ һәм намыҫлы юл күрһәтеп тора.*



РУХИӘТЕБЕҘ АСЫЛЫ

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**Бынан алда яҙылғанса, Ишембай милли мәҙәниәттәр үҙәгенең "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы волонтерҙары тарафынан төрлө йәштәге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейемдәре һәм биҙәнеү әйберҙәре тергеҙелде. Халыҡтың йолаларына, улар көн күргән тәбиғәткә нигеҙләнгән, бер-береһенән бер ни тиклем айырылып торған 10 төрлө өлгө килеп сыҡты. Улар: 4 йәшкә тиклемге бала, 11 йәшкә тиклемге ҡыҙ бала, 19 йәшкә тиклемге ҡыҙ, яугир ҡыҙ, кейәүгә сығыу йәшенә еткән ҡыҙ, никахлы ҡыҙ, килен, йәш әсә, ҡәйнә, өлкән ҡатын-ҡыҙ кейгән кейем һәм биҙәнеү өлгөләре. Өс образ тураһындағы мәғлүмәт гәзиттең 23-сө һанында баҫылды. Шуға ла ҡалған ете өлгөгә ентекләберәк туҡталайыҡ.**

4 йәшкә тиклем баланы енескә бүлеп ҡарау булмаған. Улар ҡатын-ҡыҙҙар яғында йәшәгән, бер үк тегелешле күлдәктәрҙә һәм яланаяҡ йөрөгәндәр. Был йәштә бала Хоҙайҙыҡы иҫәпләнгән. Шулай ҙа малайҙарҙы сөннәткә ултыртып, түбәтәй кейҙереп, беренсе тапҡыр атҡа мендереп, иғтибар күрһәткәндәр. Байрамдарҙа ҡыҙҙарға ла матур кейемдәр кейҙергәндәр (1-3-сө һүрәттәр). Ҡыҙҙың туғандары уға осһоҙло тәңкәләр, мәрйендәр, онталған биҙәнеү әйберҙәре бүләк итә башлаған. Ҡаурый, һөйәк һәм башҡа ҡул аҫтындағы материалдар ҙа унда өҫтәлгән. Шулай итеп, ҡыҙ балала кейемгә һәм биҙәнеү әйберҙәренә, байлыҡҡа ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килгән.

11 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар яланбаш йөрөй алған. Әммә сәстәргә ҡуҙ теймәһен өсөн төрлө бетеүҙәр менән биҙәлгән маңлайса кейгәндәр. Маңлайсалағы өс ҡортбаш насар күҙҙән һаҡлаған. Көмөш үҙенең есе, ялтырауыҡлығы, тауышы менән яуыз көстәрҙе ҡурҡытҡан. Ҡыҙ был мәлдә үҙенең ҡатын-ҡыҙ затынан икәнен яҡшы аңлаған. Атаһынан, ағаларынан биҙәнеү әйберҙәре һәҙиә итеү өсөн кәрәкле бүләктәр көткән. Ҡыҙҙың йәше һәм ғаиләһенең хәле уның биҙәүестәрендәге билдәләрҙә күренгән. Мәсәлән, толомға үрелгән сулпының рәтен һанау ҙа еткән.

11 йәштән 16 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар - ошо мәлдән үк ҡатын-ҡыҙ бала табыу һәләтенә эйә була. Ә шайтан, ярымтыҡ, бисура уның артынан йөрөп, зыян итергә маташа, имеш. Быға ихлас ышанғандар һәм буласаҡ ҡатынды улардан һаҡлағандар. Тәндең ҡалҡыу урындары ныҡлап йәшерелергә тейеш булған. Кейемгә ыштан менән баш яулығы өҫтәлгән. Яланғас тәнгә түшелдерек кейгәндәр (4-6-сы һүрәттәр). Уның хәҙерге күкрәксәләрҙеке кеүек шәшкеләре юҡ, бәйләп кенә ҡуйыла, һул ҡултыҡ аҫтына әсәнең теләктәре тегелгән өсмөйөшө бар. Түшелдеректең алғы яғында намаҙлыҡтарға төшөрөлгән типтағы биҙәктәр сигелгән.

Никахтағы ҡыҙ. Ҡыҙға 16 йәш тулһа, батша Рәсәйендәге мулла уға никах уҡый алған. Кейәүгә сығыу тураһында һәр ҡыҙ хыялланған. Һәм улар үҙенең матур кейемдәре менән яҡшы егеттәрҙе үҙенә ҡаратыу өсөн заманса кейемдәр тектергән. "Ҡаҙан" модаһы ҡаҙаныштары ла ҡулланылған, хатта өләсәйҙәр ҙә быға ҡаршы булмаған. Шуның өсөн дә 20-се быуаттың башына башҡорт ҡыҙының кейеме бик үҙенсәлекле төҫ алған. Баш кейеме ҡалфаҡ сәстәргә ҡаҙай торған ҡаптырмаларҙың үлсәменә тиклем бәләкәсәйгән, ә һаҡал ҙур бер ҡаптырмаға әүерелгән (7-9-сы һүрәттәр).

Яугир ҡыҙ - легендар образ. Әммә амазонкалар һәр халыҡта ла, шул иҫәптән, башҡорттарҙа ла бар. Борон бер ышаныу булған: әгәр ҙә яугирлыҡта ниндәйҙер уңыштарға өлгәшһә, хатта ярлы ҡыҙы ла ырыуҙың иң яҡшы егетенә кейәүгә сыға алған. Шуның өсөн дә ул ирҙәр менән бер рәттән һыбай сапҡан, уҡтан атҡан, дошманға ҡаршы яуға барған. Бәлки, ошо ваҡыттан таҡыяның формаһы шлемға оҡшап ҡалғандыр. Яурын аша һалынған һаҡалдың бер төрө яуҙа ҡамаусауламаған (10-12-се фото).

Никахтағы ҡыҙ никахтан һуң сафлыҡ билдәһе - аҡ кейемен һалған. Ул сағыу кейемдәр кейгән. Был уның түлен арттырасаҡ, тип ышанғандар. Ата-әсәһе эргәһендәге ҡалған көндәрен ул уйнап-көләп, әхирәттәре менән аралашып, кейәүе менән ҡунаҡҡа йөрөп үткәрергә тейеш булған. Йәш кәләштең башында бәрхәт ҡалфаҡ - 20-се быуат башында модала булған баш кейеме (13-15-се фотолар).

Балаға уҙыу һәләтен юғалтҡан ҡатын-ҡыҙ ҡарт иҫәпләнгән. Хәҙер уға сағыу кейемдәр кейергә ярамаған. Ул биҙәүестәрен туғандарына таратып биргән. Был йомартлығы өсөн Хоҙай уға сәләмәтлек һәм оҙон ғүмер бирә, тип ышанылған. Ауылдаштары, ихтирам йөҙөнән, уға ҡаптырмалы маңлайса - битлек алып килә. Ул сәстәрҙе ҡаплап торған яулыҡтың өҫтөнән кейелә. Маңлайҙың өҫтөнә 3 тәңкә тағыла - улар көнсығыштың өс изге йондоҙо кеүек, тыныслыҡ һәм намыҫлы юл күрһәтеп тора. Иң абруйлы ҡатындарға ҡатын-ҡыҙҙар араһында дини белем алып барыу бурысы йөкмәтелгән. Был турала Ҡөрьән һалынған бәләкәй муҡса һөйләй (16-18-се һүрәттәр).



*1-3-сө һүрәттәр. 4 йәшкә тиклемге ҡыҙ. Модель А. Камалова.*



*4-6-сы һүрәттәр. Түшелдерекле ҡыҙ. Модель Е. Солдатова.*



*7-9-сы һүрәттәр. Кейәүгә сығырға әҙерләнгән ҡыҙ. Модель С. Нәбикаева.*



*10-12-се һүрәттәр. Яугир ҡыҙ. Модель М. Заһиҙуллина.*



*13-15-се һүрәттәр. Никахтағы ҡыҙ. Модель С. Исҡужина*



*16-18-се һүрәттәр. Ҡарт ҡатын. Модель Ф. Вәхитова.*

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һыҡымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЙҺЫ АҒЗАҢ АУЫРТҺА...

## йәнең шул ерҙә

Һаран кешенең ишегенән эт баҡмаҫ, төнлөгөнән ел ҡаҡмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ йыш ҡына ваҡ-төйәккә генә ҡәнәғәт ҡалабыҙ, ваҡ-төйәккә генә бошонабыҙ.

**(Блез Паскаль).**

Йылғаның ағышы уның инештәренә бәйле түгел...

**(Жан Кокто).**

Ҡайһы бер осраҡтарҙа һинең яңылышыуҙарың уныш та килтереүе мөмкин.

**(Альфред Норт).**

Һәр кем йылына бер тапҡыр ғына булһа ла даһиға әйләнә.

**(Георг Лихтенберг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике йәш кеше Остазға килеп:**

**- Беҙҙе шәкерт итеп ал, зинһар. Һинән донъяуи ғилемдәргә өйрәнергә теләйбеҙ, - ти.**

**- Ярай, - ти Остаз. - Берегеҙ һауыттағы һыуҙы икенсе һауытҡа алмаш-тилмәш ҡойһон, икенсегеҙ бынау ташты бер урындан икенсе урынға алмаш-тилмәш күсерһен...**

**Йәштәр эшкә тотона. Ләкин күп тә үтмәй, уларҙың береһе ташты урындан урынға күсереүҙән ялҡа һәм Остазға:**

**- Ташты бер урындан икенсеһенә күсереп һалыуҙың бер мәғәнәһен дә күрмәйем - был ҡүңелһеҙ һәм файҙаһыҙ шөғөл. Миңә бер һауыттан икенсеһенә һыу ҡойорға рөхсәт итегеҙ әле, - ти.**

**Остаз йәш кешеләргә урындарын алышырға рөхсәт итә. Оҙаҡламай башта бер урындан икенсеһенә таш күсереп һалыуҙан, аҙаҡ бер һауыттан икенсеһенә һыу ҡойоуҙан ялыҡҡан йәш кеше тағы телгә килә һәм:**

**- Был шөғөлдәр миңә һис оҡшамай. Һин миңә ысынлап та ниндәйҙер ғилемгә өйрәтә торған эш ҡуш, - ти.**

**- Һин бит былай ҙа ниндәйҙер ғилемгә өйрәнәһең...- ти Остаз.**

**- Ташты күсереп ҡуйып йәки һыу ҡойоп мин ниндәй ғилемгә өйрәнә алам?- тип аптырай йәш кеше.**

**- Күндәмлек һәм түҙемлек сифаттарығыҙ бармы икән, тип белергә иткәйнем, - ти Остаз. - Һәр ғилем ошолардан башлана. Кем тәү ҡарашҡа мәғәнәһеҙ генә тойолған эште күндәм башҡара, тәрән мәғәнәле эшкә башланғыс һала. Иң ҙур мәғәнә ниҙә - йөкмәткеһен аңламайынса, аҡыллы хат яҙыуҙамы, әллә ташты бер урындан икенсеһенә күсереп, ниндәйҙер фекер тыуҙырыуҙамы - быны береү ҙә белмәй. Ә һин түҙемһеҙ - был теләһә ниндәй ғилемдең оло дошманы...**

**Эйе, үҙеңде күндәмлеккә һәм түҙемлеккә өйрәтеү - үҙең өҫтөнән хакимлыҡ итеү тигән һүҙ ул".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4636